ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

16-22 ноябрь (ҡырпағай) 2019

№46 (880)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Алырҙан алда биререндә уйла 3



Тамсыларҙа - диңгеҙ көсө 8-9



Тел дә, рух та... әсәйҙән, атайҙан 11



Донъя тотҡаһы бушаҡ булмаһын 12-13



ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ әлеге ваҡытта 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Кискә Өфө" гәзитенә 676 һум 02 тингә яҙыла ала. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы мәғлүмәтте таныштарығыҙға, әйләнә-тирәләгеләрегеҙгә лә еткерһәгеҙ ине.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Илдә айныткыстарҙы кайтанан тергеҙергә йыйыналар, был кәрәкме?

***Азамат КАШКАРОВ, табип, Баймаҡ ҡалаһы һәм районы наркологы:*** Кәрәк, тип уйлайым, сөнки бындай айнытҡыстарҙың кеше ғүмерҙәрен ҡотҡарып алып ҡалыуҙа файҙаһы тейер ине, моғайын. Ни өсөн тигәндә, рәсми мәғлүмәттәр буйынса, йыл һайын 10 меңләп кеше иҫерек килеш урамда туңып үлә. Унан ҡала, эскән әҙәмдәр тарафынан ҡылынған енәйәт статистикаһы ла арта ғына бара бит. Йә булмаһа, уларҙың үҙҙәрен туҡмап, үлтереп йә талап китәләр. Шуға күрә лә, мәлендә айнытҡысҡа килеп эләгеү эскән кеше мәнфәғәтен күҙәтер, тип уйларға кәрәк.

Әйткәндәй, яңынан тергеҙеләсәк был айнытҡыстар, элекке кеүек, эске эштәр системаһы учреждениелары итеп түгел, ә айырым, үҙаллы ойошмалар булараҡ ойошторолһа, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине. Әлбиттә, айнытҡыстың үҙендә лә һаҡ һәм тәртип өсөн яуаплы полиция хеҙмәткәре штаты булыуы ихтимал, шунһыҙ бындай контингент менән эшләүселәргә лә хәүеф барлығы аңлашыла. Шуның өҫтәүенә, айнытҡыстарҙа медицина персоналына ла урын булырға тейештер. Эскән кеше бында төн үткәрергә генә түгел, ә ниндәйҙер медицина ярҙамы, психологик көйләнеш тә алып сыҡһа ине. Һәр хәлдә, электән дә түләүле булған хеҙмәттең был юлы эскән кеше өсөн ҡиммәткәрәк төшөүе лә бик ихтимал. Тимәк, күрһәтеләсәк хеҙмәттәр кимәле лә хаҡына ярашлы көйләнә алалыр.

***Мансур ҒӘЛИУЛЛИН, хеҙмәт ветераны:*** Кәрәклеген улар кәрәктер ҙә, тик был бәләгә тарыған кешенән аҡса һурыу сараһына әйләнеп китмәҫме, тигән икеләнеү бар күңелдә. Был мәсьәлә дәүләт кимәлендә кеше мәнфәғәтен ҡайғыртыу сараһы булараҡ хәл ителһен ине. Әгәр илдә иҫерткес спиртлы эсемлектәр иркен һәм сикләүһеҙ һатыла һәм был ҡаҙнаға миллиардлап табыш килтерә икән, иҫерткес ҡулланып бәләгә тарыусы, яҙмыштары ҡыйралыусы миллиондар ғүмере өсөн дә дәүләт һәм власть яуаплылыҡ йөкмәргә тейеш. Иҫерек килеш ҡылынған төрлө енәйәт арҡаһында ғүмерҙәр өҙөлә, өҫтәүенә, туңып үлеүселәр статистикаһы ла хаттин ашҡан икән, тимәк, был араҡы ҡорбандарының шәхси эше генә булып ҡала алмай. Уларҙың ғүмерен һаҡлау буйынса, әйтеүемсә, дәүләт кимәлендә саралар күрелергә һәм бының өсөн ҡаҙнанан аҡса бүленергә тейештер, тигән уйҙамын. Шулай итмәгәндә, айнытҡыстар үҙаллы оҙаҡ йәшәү һәләтенә эйә була алмаясаҡ, хатта улар шәхси ҡулдарҙа булыуға ла ҡарамаҫтан. Ошоға тиклем дә бит асылып-ябылып торҙо улар, хәтерләһәгеҙ. Бынан бер ун йыллап элек Өфөлә киң ҡолас менән ике айнытҡыс асып ебәргәйнеләр: К. Маркс урамында һәм уның филиалын - Черниковкала. Өр-яңынан йыһазландырылып, хеҙмәтләндереүсе персоналы тулы штат менән дәртләнеп эш башлап ебәргәйнеләр. Был турала мин үҙебеҙҙең ошо "Кискә Өфө" гәзитендәге репортаждан уҡып та белә инем, телевизорҙан да күрһәткәйнеләр. Күпме генә эшләп, ниндәй генә файҙа килтереп ҡалғандыр - тиҙ үк ябылып та ҡуйҙы бит, аҡса юҡ, тинеләр. Әле лә был йәһәттән иҫеректәрҙең тишек кеҫәһенә һәм уларҙың ғаилә бюджетына иҫәп тотола икән, бындай айнытҡыстың эштәре алға ла бармаҫ, эскән кешегә ярҙамдары бик йүнлегә лә булмаҫ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

## АҠБУҘАТЫБЫҘ ҠАЙТТЫ!



**Бөрйән районында "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" эпостары персонажына - Аҡбуҙатҡа һәйкәл ҡуйыласаҡ. Аҡбуҙат танылған башҡорт скульпторы Өлфәт Ҡобағошовтың эскизы буйынса Силәбе өлкәһенең Кәҫле заводында ҡойолған. Суйын һынды Кәҫленән Бөрйәнгә йөк тракторында килтергәндәр. Уның бейеклеге - өс метр, ҡанаттары араһында арауыҡ та өс метр самаһы. Әҙерләүселәр мәғлүмәте буйынса, аттың ауырлығы - өс тоннаға яҡын.**

- "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" эпостарында һүрәтләнгәнсә, беҙҙең Аҡбуҙ көмөшкә буялған, ҡеүәтле ҡанатлы, булат ҡылыслы, - тип хәбәр итте республиканың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин. - Башҡорт халҡының эпик әҫәрҙәренә ҡуйылған тәүге һәйкәл барыһына ла оҡшар һәм Башҡортостандың халыҡты үҙенә тартып торған иң күркәм урындарының береһенә әүерелер тип ышанам.

"Аҡбуҙат" монументаль-скульптура композицияһы Шүлгәнташ мәмерйәһенән йыраҡ түгел, Йылҡысыҡҡан күле янында ҡуйыласаҡ. Әле уны урынлаштырыу эштәре бара.

12+

✓ *Күпселек осраҡта газлы булыу өсөн йылдар буйы көтөргә тура килә. Йылайыр районы Юлдыбай ауылында ошо мәсьәлә киҫкен тора. Быйыл уҡ газ үткәреүгә килешеү төҙөлөүгә ҡарамаҫтан, әле булһа газһыҙ ултырған өйҙәр күп.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# БАШЛАНҒЫСТАРҘЫ ХУПЛАЙЫМ

**Һәр кемебеҙҙең әйтер һүҙе бар. Әйҙәгеҙ, гәзит уҡыусылар, ошо рубрика аша үҙ фекеребеҙҙе белдерәйек, әйтәһе һүҙебеҙҙе еткерәйек. Республикабыҙ ҙур һәм уның төрлө төбәгендә барған ваҡиғалар тураһында хәбәрҙар булып торһаҡ, яҡшы бит. Мин дә әйтәһе һүҙҙәремде аҡ ҡағыҙға теркәп, "Киске Өфө"гә ебәрҙем әле.**

Республика Башлығының күп башланғыстарын хуплайым. Башҡортостан халҡының йәшәйешен яҡшыртыуға, еңелләштереүгә йүнәлтелгән эштәренең гел уң булыуын теләйем. Шулай, ҡайһы бер категория граждандарға газ үткәреү өсөн түләнгән аҡсаны тулыһынса йәки өлөшләтә ҡайтарып алыу мөмкинлеген ҡарау тураһында ишетеп, ҡыуанып ултырам. Ысынлап та, өйгә зәңгәр яғыулыҡ индереү ҙур сығымдар талап итә. Унан да бигерәк, мәшәҡәте күп. Күпселек осраҡта газлы булыу өсөн айҙар һәм хатта йылдар буйы көтөргә тура килә махсус ойошма хеҙмәткәрҙәрен. Йылайыр районы Юлдыбай ауылында, мәҫәлән, ошо мәсьәлә үтә лә киҫкен тора. Былтыр уҡ газ үткәреүгә килешеү төҙөлөүгә ҡарамаҫтан, әле булһа газһыҙ ултырған өйҙәр күп. Йылайырҙа ғына түгел, республиканың башҡа райондарында ла яңы йорт һалып инеүселәр ошо уҡ проблема менән осраша. Тейешле кимәлдә хеҙмәт күрһәтә алмаған ойошмаға ҡарата ниндәй ҙә булһа сара күрелер, тип ышанам. Ҡышҡы һалҡындарҙа һыуыҡ өйҙә ултырыу, балаларҙың өшөп ауырыуын күреү күңелле түгел.

Быйыл йәй Зубово Лайф 2 микрорайонында йорт һатып алдыҡ. Барыһы ла оҡшай, фатир ҙа, йорт урынлашҡан урын да. Ләкин иртән эшкә барыу һәм кисен имен-аман ҡайтыу үтә лә ауырға төшә, сөнки Зубовонан иҫке Шишмә трассаһына сыҡҡан урында юл тар, светофор юҡ, ике яҡтан да бер туҡтауһыҙ машиналар ағымы килә. Ошо уҡ юлдан балаларҙы алып йөрөгән автобус көнөнә бер нисә тапҡыр уҙа. Унда күсеп йәшәй башлауыбыҙға өс ай ғына үтте, ә минең күҙ алдында өс авария булды.

**Зубово Лайф, Зубово Гарден, "Приют" һәм "Тихие зори" баҡсаларында йәшәүселәр әйтеүенсә, ошо юл сатына светофор ҡуйыуҙы һәм юлды киңәйтеүҙе һорап, күп тапҡыр төрлө органдарға мөрәжәғәт иткәндәр, ләкин әле булһа бер эш тә ҡыбырлатылмаған. Кеше ғүмерҙәренә ҡарата шул тиклем дә битарафлыҡ булырға мөмкинме ни?**

Артабанғы һүҙем Салауат ҡалаһы тураһында булыр. Ундағы йорттар араһындағы, төрлө учреждениелар алдындағы юлдарҙың торошо ҡот осҡос. Асфальт бөткән, соҡор-саҡыр һәм күл кеүек ятҡан һыу яткылыҡтары. "Тиҙ ярҙам" машиналары сығып-инеп, туҡтап йөрөгән майҙансыҡ бомба төшкән урынды хәтерләтә. Ошо юлдарҙан былай ҙа хәлдәре ауыр сирлеләрҙе һелкетеп алып киләләр, табиптар һәм водителдәр күпме этләнә. Урындағы хакимиәт был мәсьәләне тиҙ арала хәл итеүҙең берәй юлын табыр тип ышанам.

Яҙмам тик проблемаларҙы ғына яҡтыртыуҙан тормаһын өсөн күҙгә ташланған һәйбәт күренештәр тураһында ла бер-ике һүҙ. Баш ҡала урамдарында һәм трасса буйлап светофорҙарға светодиод таҫмалар урынлаштырыу бик мәслихәт. Алыҫтан күренеп торған светофор руль артындағыларға ла, йәйәүлеләргә лә ҡулайлы.

Райондарҙағы ауылдар араһында, шулай уҡ баш ҡалаға дәүләт автобустары йөрөй башлауын хуплайым. Был башланғыс һүнеп ҡалмаҫ һәм халыҡ һәр һум артынан ҡыуып елгән таксиларҙан төшөп, автобустарҙа йөрөй башлар, тип ышанам.

Өфөнөң "Еңеү паркы"нда урынлашҡан "Дежнев баҫҡысын" йүнәтә башлауҙарын күреп шатландым. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында төҙөлгән баҫҡыстар әлегә тиклем ремонт күрмәне лә, буғай, ләкин ҡала халҡының яратҡан урындарының береһе булыуҙан туҡтаманы. Ремонттан һуң яңырып, матурланып алған баҫҡыстан үтергә теләүселәр һаны тағы ла артасағына шигем юҡ.

Матур республикала йәшәйбеҙ. Ошо матурлыҡты һаҡлауға һәр кемебеҙ үҙ өлөшөн индереп, ҡулыбыҙҙан килгәнде үҙебеҙ эшләп, бөтә нәмәне лә өҫтән көтөп ятмайыҡ, тип өндәшкем килә. Йортобоҙға яҡын урынлашҡан юл буйын йәки ауыл янындағы шишмә-йылғаларҙы таҙартып ҡуйыу, подъезд алдарын тәртиптә тотоу өсөн күп кәрәкмәй. Бары тик теләк етә.

**Фәнил ФАЗЫЛОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Илдә айнытҡыстарҙы ҡайтанан тергеҙергә йыйыналар, был кәрәкме?



**(Башы 1-се биттә).**

***Айгөл ХӘКИМОВА, блогер:*** Айнытҡыс, тигәндән, ышанаһығыҙмы, юҡмы - ун биш йәшемдә саҡта унда миңә лә бер булырға тура килгәйне һәм ул мәңгелеккә ниндәйҙер ҡотолғоһоҙлоҡ ҡоҙоғо булып хәтеремдә ҡалды. Эш шунда: атайым эсергә яратты һәм, әлбиттә, өйҙәгеләргә һис тынғылыҡ бирмәне: йә өйҙә дау ҡуптара, йә сығып китеп ғәйеп була, ҡайҙа йөрөгәнен дә белмәҫһең. Шундай көндәрҙең береһендә ул тағы өйгә ҡайтманы. Беҙ уны шешәләш дуҫтарында ҡуна ҡалғандыр, тип уйланыҡ, тик иртәнсәк айнытҡыстан милиция шылтыратып, атайымды килеп алырға ҡуштылар: төндә уны шунда алып киткәндәр, ә хәҙер сығара алмайҙар, сөнки уның бер ниндәй документы ла, түләп сығырға аҡсаһы ла юҡ икән. Әсәйем эшкә ашыҡты, тимәк, атайҙы миңә ҡотҡарырға тура килә. Ҡурҡыныс та, оят та ине миңә был миссияны башҡарыуы. Ярай әле, урамда осраған кешеләр был учреждениеның ҡайҙалығын ентекләп өйрәтеп ебәрҙеләр. Тыштан штукатуры ҡойолоп торған иҫке бер тәпәш кенә һоро бинала булып сыҡты айнытҡыс тигәндәре. Эстән тағы ла ҡурҡынысыраҡ күренеш: ҡараңғы коридорҙы бәләкәй генә бер лампочка яҡтырта, буяуы ҡубарылып төшкән стена менән таш иҙән, ярым ҡараңғы еүеш бина миңә тыштағы ҡайнап торған тормоштоң иң төпкөл, тупаҫ урыны булып тойолдо. Ошондай уҡ ҡараңғы залда бер нисә милиционер ултыра ине. Атайымдың фамилияһын әйткәс, мине арытабан коридор буйлап тимер рәшәткәле ҙур камера яғына әйҙәнеләр. Тимер ишек шығырҙап асылыуға, миңә унда хас та кинолағы кеүек күренеш пәйҙә булды: ҡараңғы таш камерала йолҡош ҡиәфәтле, трусиктан ғына тороп ҡалған унлаған ир ултыра ине. Улар шул тиклем бер-береһенә оҡшаған: сәстәре туҙған, бер нисә көн ҡырынмаған йөҙҙәрендә әллә ҡурҡыу, әллә кемделер көтөү - мин улар арһында атайымды таный ҙа алманым. Аяғөҫтө баҫып торғандарының берәүҙәре йылынырға теләп һикерәнләй, икенселәре яланғас тәнен ыуғылай... Милиционер асып ебәреү менән уларҙың ҡараштары ишеккә ябырылды, күрәһең, һәр кем миндә үҙ туғанын күрергә өмөт итте. Атайымдың фамилияһын ҡысҡырҙылар, уға оят ине, күрәһең, килеп сыҡты ла, миңә бер ни ҙә өндәшмәйенсә, кейемдәрен алды һәм беҙ ниндәйер ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйғас, ниһайәт, урамға сыҡтыҡ. Атайым ниҙер өндәшкәйне генә, мине ошондай хурлыҡлы хәлгә төшөрөүенән ташып барған асыу һәм нәфрәтемде тыя алмайынса, уға екерҙем. "Баш төҙәтергә генә бир инде, ныҡ ауырыйым бит... Ҡайтып етергә",- тине ул бер ни булмағандай. Сарам юҡ ине. Тимәк, бөгөн дә өйгә ҡайтмайынса, ҡайҙалыр урамда йөрөп торорға тура килә...

Был көндән алып байтаҡ йылдар үтте, тормош та үҙгәрҙе, ләкин айнытҡыс тигән төшөнсә ниндәйҙер бер тупаҫ төйөр, йөрәк ауыртыуы, ҡайғы булып хәтерҙән юйылмай һаман. Шуға күрә, бөгөн айнытҡыстар кәрәкме тигән һорауға ла мин бер төрлө генә яуап бирергә ҡыйынһынам. Минең уйымса, айнытҡыстар эскелек сиренә бирелгән кешеләргә ниндәй ҙә булһа ярҙам итеү маҡсатында ойошторолорға тейештер, ә бер төн ҡунып, аҡса түләп, етмәһә, уларҙың былай ҙа кәмһенеүле хәлдәренән көлөп, полиция йәберләүенә, мыҫҡыллауҙарға дусар итеп, булған ғына аҡсаларын талап сығара торған урын итеп түгел. Ә беҙҙәге ошоға тиклем булған айнытҡыстан сығыу менән кеше тағы ла эсергә йүнәлә ине, шулай булмаһын, ә айнытҡыс булғас, ул кешене ысынлап та айнытып, һиҫкәндереп ебәрерлек, уйландырып алырлыҡ булһын, тик бына уны нисек эшләргә - шулай уҡ белгестәргә уйланырға кәрәк. Бәлки, урамда аунап ятҡанды ғына түгел, ә боларып, башҡаларға тынғылыҡ бирмәгәндәрҙе лә айнытҡысҡа оҙатыу мәсьәләһен ҡарарҙар. Айныгас, был кешене психолог, нарколог кеүек белгестәр менән әңгәмә йә дауалау сеансы, бик булмаһа, холоҡ төҙәтеү буйынса йәмәғәтселек өсөн файҙалы эштәр көтһөн.

Әйткәндәй, ҡайһы бер сит ил тәжрибәһен дә файҙаланырға мөмкин. Мәҫәлән, Американа тәгәрмәсле айнытҡыстар хеҙмәте һорау менән файҙалана икән. Медицина хеҙмәткәрҙәренән торған бригада иҫерек кешегә тиҙ арала үҙе килә, уны аяҡҡа баҫтырыу өсөн система ҡуя, укол ҡаҙай, башҡа төрлө оператив ярҙам күрһәтә ала. Тик был хеҙмәттәр, әлбиттә, кеҫәһе ҡалындар өсөн. Ә бит беҙҙең йәмғиәт хәҙер ҡапма-ҡаршы социаль ҡатламдарға бүленеп бөттө, шуға ла алкоголь эсемлектәрҙе ҡулланыу кимәле лә, эскәндәр өсөн айнытҡыс һәм иҫерек кешегә ярҙам кимәленең дә айырымланыуы бик ихтимал.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Ошо көндәрҙә Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Андрей Назаров Башҡортостанда йылына ике тапҡыр яңы байрам - Милли кейем көнө үткәреләсәге хаҡында хәбәр иткәйне. Вице-премьер Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә байрамдың апрелдең өсөнсө йомаһында һәм сентябрҙең икенсе йомаһында билдәләнәсәген һөйләне. "Был үҙ мәҙәниәтеңде баһаларға өҫтәмә мөмкинлек булыр тип иҫәпләйбеҙ", - тип белдерҙе ул.

✓Инорс биҫтәһенең Т.Йәнәби бульварындағы бассейнын яңы йыл каникулдарына файҙаланыуға тапшырырға кәрәк, тип талап итте Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Андрей Назаров. 13 ноябрҙә ул эш сәфәре менән Өфөнөң сәнәғәт һәм социаль объекттарында булды. Бассейн "Башҡортостандың 100 йыллығына - 100 объект" проекты сиктәрендә төҙөлә. 2017 йылдың декабрендә башланған эштәр ағымдағы йылдың аҙағына тамамланырға тейеш.

✓Башҡортостанда тыуып үҫкән, әлеге көндә Санкт-Петербург мәғлүмәт технологиялары университетының икенсе курсында уҡып йөрөгән Артур Шәйхаттаров абруйлы TEDx халыҡ-ара конференцияһында үҙенең асышы - һуҡырҙар һәм һаңғырауҙар өсөн мессенджеры менән таныштырҙы. Артур ошо проект менән Рәсәйҙә иң абруйлы үҫмерҙәр гранттарының береһен отҡан. Республика етәксеһе Радий Хәбиров, юғары уҡыу йортон тамамлағас, талантлы программисты Өфөлә көтөүҙәрен белдерҙе.

✓Аҙна аҙағына тиклем Башҡортостандың баш ҡалаһында йылы температура һаҡлана. Ләкин синоптиктар мәғлүмәте буйынса, киләһе аҙнала һауа тороşо ҡырҡа үҙгәрә. Атап әйткәндә, көндәрҙең 12 градусҡаса һыуытыуы көтөлә. 20 ноябрҙән термометр бағанаһы төшә башлай. Кесаҙна, 21 ноябрҙә, ҡояшлы булһа ла температура -7 градусҡа тиклем төшөүен дауам итә. Йома, 22 ноябрҙә, күп итеп ҡар яуыуы фаразлана.

✓20-23 ноябрҙә Өфөлә "Беҙҙең Бренд" фестивале - тәмле һәм төрлө ризыҡ яратыусылар өсөн ысын байрам ойошторола. Сарала Рәсәйҙең 19 төбәгенән һәм Башҡортостандың 30-лаған фермер хужалығынан 130-ҙан ашыу компания ҡатнашасаҡ. Фестивалдең иң сағыу ваҡиғаларының береһе - Башҡортостан Республикаһының Ауыл хужалығы министрлығы ойоштorған "Беҙҙең Бренд" аҙыҡ-түлек һәм төрөү конкурсы.

УЙЛЫҒА - УЙ

# АЛЫРҘАН АЛДА БИРЕРЕНДЕ УЙЛА



**Телебеҙҙә "үтескә алыу", "үтескә биреү" төшөнсәләре бар, улар халҡыбыҙҙың матди тормошо күренештәренең береһе булып тора. Көнкүрештә кәрәк булған нәмәләрең үҙеңдә булмаған осраҡта уларҙы күршеңдән йә иһә башҡа бер танышыңдан алып тороу - боронғо ғәҙәт. Тик шуныһы ла мәғлүмдер ки: күпме алаһың - шул тиклем үк ҡайтараһың. Был заманына күрә йәшәйештең алтын ҡағиҙәләренең береһе булған.**

Заман башҡа - заң башҡа: бөгөн бурысҡа алған иҫәбенә йәшәү бик күп замандаштарыбыҙ өсөн ҡотолғоһоҙ ҡанунға әйләнеп бара. Үтескә йәшәүселәр заманы етте, күрәһең. Закон һәм банк финансистары телендә был күренеш кредитлау тип атала. Тик банкынан алған үтестең ҡайтармаһы ғына ни тора: байтаҡ осраҡтарҙа бер мең һум алаһың да бер мең өс йөҙ һумды ҡайтараһың. Был мөхиттә банкының кредит ставкаһы тиғән ҡотолғоһоҙ процент өҫтәмәһе хөкөм һөрә. Микрозайм тип аталған үтес килешеүҙәрендә йыллыҡ процент ставкаһы меңәр процентҡа еткән ваҡыттар булды, ошо арҡала әллә күпме граждандар бөлгөнлөккә төшөп, тамам хәйерселек сигенә етте. Ярай әле, закондар хәҙер ҡомһоҙлоҡтоң ашаһына сыҡҡан банкирҙарға сик ҡуйҙы - микрофинанслауҙа йыллыҡ проценты 365 проценттан артыуы тыйылды. Әммә фәҡир бәндәләргә был да аҙ түгел бит! Күрәһең, ҡырағайҙарса капитализмдың уҫал ырҗайыуы шулайыраҡ булалыр инде.

Әйтеп китергә кәрәк, ... 

Ә тиҫтәләгән коммерция һәм дәүләт банкылары, көнө-төнө тигәндәй, ватандаштарыбыҙҙы кредитҡа аҡса алырға саҡыра: йәнәһе, бурысҡа алған аҡсаға ожмахтай тормош ҡора алаҫаҡһың. Бындай реклама урамдарҙағы баннерҙарҙан да күҙгә бәрелеп тора, радио-телевизорҙан ғына түгел, кеҫә телефондарынан да кеше аңына инеп, уның нәфсеһенә ҡотҡо һала. Аҡса бирәбеҙ, бер паспорт та етә, ни барыһы 15 минут ваҡыт үтәсәк, бирғән саҡта өлгөрөп ҡалығыҙ! Аҡсаң булмаһа, беҙҙән ал, 10 мең һум ал, 100 мең һум ал! Кем әйтмешләй, ошондай саҡырыуҙар үтектән ишетелһә лә, һис ғәжәпләнмәҫһең.

Ә кеҫә төбө һай булған уртаса рәсәйле, исеме уның Иван булһынмы, Закир йә иһә Шакирмы, ҡайҙа барһын инде, иртәгәһен ишәк ҡайғыртһын, тигәндәй, ала шул аҡсаны бурысҡа. Йыш ҡына үҙ теләгенән башҡа ла бурыс һаҙлығына төшөргә мәжбүр була ул: кешеләрсә йәшәр өсөн йорт-ҡура кәрәк, фатир кәрәк, автомобиль кәрәк, ғәзиз балаһын аҡса түләп уҡытырға кәрәк, исмаһам, бер таҡыр булһа ла шул Анталияны күреп ҡайтырға кәрәк!

Ай-һай, үтескә йәшәүселәр хаттин артты түгелме һуң? 2019 йылдың октябренә рәсәйлеләрҙең банкыларға түләргә тейешле бурысы гигант суммаһы тәшкил итә - 16,9 триллион һумға еткән ул. Үҙегеҙ сағыштырып ҡарағыҙ: 2018 йылда Рәсәйҙең нефть һәм газ сәнәғәтенән алынған килем - 9 триллион һумдан саҡ ҡына артығыраҡ, ә тотош ил буйынса йыллыҡ сығымдар суммаһы 34 триллион тирәһе.

**Тимәк, граждандарҙың үтескә алған аҡсаһы илебеҙҙең йыллыҡ бюджетының яртыһын тәшкил итә! Шул сумманың 811,8 миллиардының билдәләнгән график буйынса түләнмәүенә 90 көндән ашыу ваҡыт үтеп киткән. Рәсәй субъекттары араһында Башҡортостан да кредит алыусылары иң күп булған төбәктәрҙән һанала. 2019 йылдың тәүге яртыһында ғына башҡортостандар кредитҡа барлығы 163 миллиард һумдан ашыу аҡса алған, ә кредитлауҙың дөйөм суммаһы 441 миллиард һумға еткән. Әйтергә кәрәк, ошо кредиттарҙың дүрттән бер өлөшө ипотекаға тура килә.**

Әйтеүебеҙсә, бурыс иҫәбенә йәшәүҙән бер кем дә ҡурсаланмаған. Әммә кредитлаусы банкылар граждандарға алған бурысты килешеүҙә күрһәтелгән процентары менән ваҡытында ҡайтарыуҙы талап итә. Ҡайтара алмайһың икән - һин банкрот. Финанс ойошмаһы бурысын ҡайтара алмаусыларҙы судҡа биреп, уларҙың барлы-юҡлы мөлкәтен дә тартып алырға хаҡлы. Батша Рәсәйендә банкротлыҡҡа төшкән граждандар өсөн махсус яза булған - ул "бурыс соҡоро" ("долговая яма") тип аталған. Әлбиттә, бурысҡа батҡандарҙы көнсығыш илдәрендәгесә тәрән соҡорҙа тотмағалар ҙа, уларҙың үҙҙәрен генә түгел, хатта ғаилә ағзаларын да төрмәгә япҡандар. Был Рәсәйҙә тик 1879 йылда ғына закон менән тыйылған.

Әлеге көндә лә финанс упҡынына осҡан кешеләр бар, улар ошо ҡотһоҙ һәм ҡотолғоһоҙ хәлдәренән нисек арынырға белмәй ыҙалана. Ошондай кешеләрҙең, артабан ни ҡылырға белмәйенсә, тамам өмөтһөҙлөккә бирелеп, аҙмыштарын фажиғә менән тамамлау осраҡтары әленән-әле ишетелеп тора.

Әлбиттә, ил етәкселеге, дәүләт финанс системаһы менән идара итеүселәр ил халҡын саманан тыш кредитлауға сик ҡуйыу юлдарын табырға тырыша. Тик улар бында бер генә ысулды һайлай - граждандарға кредит бирерҙән алда уларҙың финанс хәлен ентекләберәк тикшереп, кредит килешеүен үтәй алыу-алмауҙарын төп шарт итеп ҡуйыу. 2008 йылда Америка Ҡушма Штаттарында ипотека алыусыларҙың күбеһенең бурыстарын ҡайтармай башлауы арҡаһында ундағы бер нисә банкының банкрот хәлenә төшөп, иҡтисади-финанс кризисы бөтөн донъяға таралғайны. Ил етәкселеге тап ошондай хәлдә булдырмауҙы күҙ уңында тота ла инде.

Бында бер нәмәне иҫтән сығарырға ярамай: бизнес әһелдәре, хәлле эшҡыуарҙар кредит алһа, үҙ ҡулдарында тотҡан предприятиеларı өсөн ала, уларға торлаҡ йә ҡулланыу кредитының бер кәрәге лә юҡ. Байҙар, физик шәхес булараҡ, бер ҡасан да банкрот булмай. Финанс ысынбарлығында тап шулай килеп сыға ла инде: тормош шарттарын башҡаса яҡшырта алмаусы миллионлаған рәсәйле кредит кабалаһы юлына үҙ теләге менән аяҡ баҫа. Ҡайһы бер ғаиләләргә үҙҙәренең дөйөм килеменең өстән ике өлөшөн кредит түләүгә тотонорға тура килә. Йыш ҡына ғаилә башлығы бер юлы ике урында эшләп, алһыҙ-ялһыҙ тир түгергә мәжбүр була. Кредитҡа йәшәгән ғаиләләрҙең тормош сифаты нык түбәнәйә: улар арзанырaҡ, сифатһыҙыраҡ аҙыҡ-түлек менән туҡлана, насарыраҡ кейенә, мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн дә мөмкинлектәре аҙая.

Бәғзе берәүҙәр кредит алып йәшәү рәүешен бөтөн донъяға хас булған заман тренды, йәғни өҫтөнлөк алған тенденция шулай, тип аңлатырға тырыша. Шулайын шулайҙыр ҙа ул, әммә был осраҡта ла түбәнһеңдә бер нисә процент миллиардерҙарҙан торған олигархтар ҡатламы, артыҡ үҫешә алмаған урта хәллеләр һәм фәҡирлек сигендә көн иткән түбәнге ҡатлам (ил халҡының дүрттән өс өлөшө) булған пирамидаль төҙөлөшлө илдә йәшәүебеҙҙе онотмайыҡ. Бында, элекке йырҙарҙың береһендә йырланғанса, үтә байҙар ҡәҙимге бал менән генә хушһынмай, сит-ят тарафтарҙа утрауҙар, ҡәлғәгә торошло йорттар һатып ала, миллиондарса доллар торған яхталарҙа типтерә, хатта эттәрен дә махсус самолетта йөрөтә... Һәм беҙҙә бәғзе меҫкендәр сүп һауыттарында соҡоноп көн итә. Ә шул уҡ АҠШ-та граждандар өсөн кредит проценты 3-6 проценттан артмай. Ә кредит процентарын сағыштырыу фәҡир рәсәйле файҙаһына түгел: мәҫәлән, беҙҙә ипотека кредиты 10-12 процент булһа, АҠШ-та - 15 йылға 3,375 процент, Японияла - 1,68 процент, Швейцарияла - 1,75 процент, Финляндияла - 1,83 процент, Германияла - 1,90 процент, Люксембургта - 2 процент.

Ислам динендә бурысҡа бирелгән аҡса өсөн риба, йәғни процент алып, шуның иҫәбенә йәшәү харам һанала. Был динебеҙҙең әхлаҡи асылына тап килә. Тимәк, банкыларҙың ҙур процентарға ҡоролған эшмәкәрлеген әхлаҡ биҙмәненә һалып үлсәһәң, ошо финанс системаһының паразиттарға ғына хас булған йәшәү рәүеше асыҡлана. Әйе, тап шулай ул: беҙ үҙебеҙ, белә-күрә тороп, паразиттар аҫрайбыҙ.

Быны ошо хаҡта уйланғанда бала сағымда атайымдан ишеткән бер ауыл лаҡабы иҫкә төштө. Тыуған ауылыбыҙ Иҙристә халҡыбыҙҙың мәшһүр артисы Ғималетдин Минһажев тыуып үҫкән. Ауылыбыҙға ҡайтып йөрөгән саҡтарында атайым да уны ҡунаҡҡа саҡырып һыйлар булған: билдәле артист гармунда уйнап, атайым ҡушылып йырлап, күңел асҡандар. Элекке заманды иҫкә алып, гәпләшеп тә ултырған улар. Артистың атаһы Минһаж ҡарттың ғаиләһе үтә ярлы булып, ҡыштарын байҙан бурысҡа он алып тора икән. Йәйҙәрен ауыл байына бурыс хаҡына бесән сабышырға йөрөгәндәр былар. Бай аҡсаһына ялланып сабыусылар ҙа бар икән. Бер мәл сабынлыҡта хәл йыйырға туҡтағас, Минһаж ҡарттың ҡарсығы былай тип әйтә икән: "Башҡаларҙың салғылары һелтәгән һайын "ғорош-ғорош" тигән тауыш сығара, беҙ фәҡирҙең салғылары ни, "бурыс-бурыс" тейеүҙән ары китмәй". Ул заманда грош тип аталған тимер аҡса булғанын хәҙер күптәр белмәй инде.

Ошо лаҡаптың ғилләһе лә шунда инде: бурысҡа йәшәү кеше иңенә ауыр йөк булып ята ла күңеленә лә һис бер тынғылыҡ бирмәй йәшәтә. Шуның өсөн кредит алырҙан алда, халҡыбыҙ әйтмешләй, ете ҡат үлсәп, бер генә ҡат киҫеү фарыздыр ул.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Сәләм" беренсе ғаилә телеканалы тотош республиканан дуҫтарын йыя. 13 ноябрҙә Ишембай ҡалаһының мәҙәниәт һарайында Башҡортостандың яңы телеканалы менән таныштырыу булды. Телеканал Башҡортостан ҡалаларында һәм районларында муниципаль, урындағы телестудияларҙы һаҡлау өсөн булдырылған. 2019 йылдың 11 октябрендә Сибайҙа эшләй башлаған "Сәләм" телеканалы Башҡортостандың кабель операторҙары селтәрҙәрендә һәм интернет-сервистарҙа күрһәтә.

✓Өфөлә "Һанлы мәҙәниәт" проекты сиктәрендә виртуаль залдарға инеү нөктәләре эшләй. Виртуаль залдарға инеү нөктәләре Рудольф Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжында, Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында, Өфө сәнғәт училищеһында, Урта махсус музыка колледжында, Башҡортостан Республикаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһында, Һуҡырҙар өсөн республика махсус китапханаһында, Башҡорт дәүләт филармонияһында бар.

✓"Башинформ" агентлығы яңы проект башлап ебәрҙе. Подкастар - ул форматы буйынса билдәле бер темаға радиотапшырыуҙарҙы хәтерләткән аудиофайлдар. "Өлкәндәр өсөн мәктәп" һәм "Ҡала мөхите" тигән подкастар баҫылып сыҡты ла инде. Подкастар темаһы буйынса тәҡдимдәрҙе, фекерҙәрҙе һәм иҫкәрмәләрҙе podkasts@bashinform.ru электрон адресына ебәрергә мөмкин.

✓30 ноябрҙән Башҡортостанда Өфө - Яңы Абҙаҡ маршруты буйынса "Урал легендаһы" поезы хәрәкәте тергеҙелә. "Урал легендаһы" туристар араһында популяр ҡышҡы маршрут буйынса аҙнаһына ике тапҡыр - шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә йөрөр тип күҙаллана. Өфөнән "Урал легендаһы" урындағы ваҡыт буйынса иртәнге 6.56 сәғәттә ҡуҙғала һәм Яңы Абҙаҡҡа төшкө 13.53 сәғәттә барып етә.

✓Башҡортостан Эске эштәр министрлығының Миграция мәсьәләләре буйынса идаралығы 2019 йылдың февраль-октябрендә бирелгән биш йыллыҡ паспорттарҙы алмаштыра. Документтарҙың кодында хата киткән. Был Күмертауҙа, Стәрлетамаҡта, Ишембайҙа, Нефтекамала, Октябрьскийҙа, Межгорьела паспорт алған граждандарға ҡағылмай. Сит ил паспорты һәм Рәсәй Федерацияһы граждаы паспорты менән миграция мәсьәләләре буйынса бүлеккә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

ҠЫҪҠАСА

# КҮПЕРЛЕ БУЛАЛАР!

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә бер аҙнанан Бөрйән районының Нәби ауылында яңы күперҙең файҙаланыуға тапшырыласағын хәбәр итте.** Ул республикала емерек хәлдәге күперҙәрҙең күп икәнен белеүен билдәләне. Улар бөтә райондарҙа ла тиерлек бар - Бишбүләк, Шаран, Туймазы, Борай, Октябрьский ҡалаһы һәм башҡалар. Башҡортостан етәксеһе һүҙҙәренсә, 2024 йылға тиклем күперҙәрҙе планға ярашлы төҙәкләндереү программаһы әҙерләнгән. "2019 йылда ғына 12 күпер төҙәрбөҙ һәм реконструкцияларбыҙ, 28-ен йүнәтербеҙ. Йылап республикалағы барлыҡ күперҙәрҙе тәртипкә килтерербеҙ", - тип белдерҙе Радий Хәбиров.

✓ **Өфө Рәсәйҙең иң аҡыллы ун ҡалаһы иҫәбенә инде. Tvil.ru аналитиктары уҙғарған һорау алыу мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостандың баш ҡалаһы, 1,39 процент тауыш йыйып, 10-сы урынды алды.** Баш ҡалала уны "Аҡыллы" итеүсе бер нисә фәндә үҫтереү үҙәге бар: Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең математика, молекулалар һәм кристалдар физикаһы, механика, нефть химияһы һәм катализ, органик химия институттары һәм башҡалар; Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы учреждениелары һәм башҡалар. Башҡортостандың баш ҡалаһы түбәндәге ҡалаларҙан ғына ҡалышты: Санкт-Петербург, Мәскәү, Новосибирск, Ҡаҙан, Екатеринбург, Түбәнге Новгород, Сочи, Севастополь, Красноярск.

✓ **13 ноябрҙән Башҡортостанда пенсионерҙарға һәм инвалидтарға туристик юлламалар хаҡының бер өлөшөн түләү өсөн сертификаттар тапшыра башланылар.** Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусылары һәм инвалидтары юлламалар менән сиратһыҙ тыш тәьмин ителә, тип билдәләнеләр республиканың халыҡҡа социаль ярҙам үҙәгендә. Йыл аҙағына тиклем Башҡортостанда бөтәһе 1,5 мең самаһы кешене юлламалар менән тәьмин итеү күҙаллана. Республикала йәшәгән һәм пенсияһына социаль өҫтәмә алған пенсионерҙарҙың, инвалидтарҙың сертификат алыуға хоҡуғы бар. Сертификаттар Башҡортостан Республикаһы Халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалдарында, шулай уҡ "Ғаилә" республика ресурс үҙәгендә һәм уның филиалдарында бирелә.

✓ **Быйыл "Ауыл табибы" федераль программаһы буйынса Башҡортостандың 99 табибына - 1 миллион һум, 10 фельдшерға 500 мең һум тапшырыла.** Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Кононова һүҙҙәренсә, түләүҙәр 15 ноябрҙә тиклем тамамлана. Тағы 72 фельдшерға "Ауыл табибы" республика программаһы буйынса 500 мең һум түләнә. "Ауыл табибы" программаһында эләкмәгән 150 табип та 1 миллион һум алды. Коллегалары менән бергә бер миллион һум алған 8 табип та ошо исемлеккә индерелгән. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тәҡдиме менән башланған программа буйынса 137 махсус йүнәлешле белгескә бер миллион һум түләнгән. Маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡыған 1033 студентҡа 5 мең һум бирелә, ә 416 ординатор 8 мең һум ала.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ФОЛЬКЛОРИАДА ҠАСАН БУЛА?

**Башҡортостандың киләһе йылға бюджетында Бөтә донъя фольклориадаһын үткәреү өсөн 300 миллион һум һалынған.**

**Республиканың финанс министры Лира Иғтисамова Дәүләт Йыйылышының аграр комитеты ултырышында донъя форумын ойоштороуҙа федераль үҙәк яғынан да финанс ярҙамына өмөтләнеүҙәрен билдәләне.**

Бөтә донъя фольклориадаһы дүрт йылға бер тапҡыр үткәрелә. Сара кешелектең традицион мәҙәни мирасының күп төрлөлөгөн күрһәтеүгә һәм уны һаҡлауға булышлыҡ итеүгә йүнәлтелгән. 2020 йылдың йәйендә Башҡортостан ике аҙнаға үҙенсәлекле театрлаштырылған майҙансыҡҡа әүерелә. Унда донъяның 80-дән ашыу иленән өс меңгә яҡын артист республика халҡын һәм ҡунаҡтарын үҙҙәренең йыр-моңо, бейеүҙәре, халыҡ кәсептәре, аш-һыуы, кейем-һалымы һәм сәхнә сәнғәте менән таныштыра. Фестивалдә ситтән күҙәтергә генә түгел, ә төрлө интерактив сараларға әүҙем ҡушылырға - төрлө халыҡтарҙың уйын ҡоралдарында уйнап ҡарарға, милли ризыҡтарынан ауыҙ итергә, традицион сәнғәттәрен өйрәнергә мөмкин. VI Бөтә донъя фольклориадаһы 2020 йылдың 18 июленән 1 августына тиклем уҙғарыла.

# ЗЫЯНЛЫҺЫ КӘРӘКМӘЙ!

**Башҡортостанда Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары республиканың Экология кодексына республика биләмәһендә яңы "зыянлы" производстволар индереүҙе сикләгән төҙәтмәләр өҫтәргә ниәтләй.**

2020 йылдың 1 ғинуарынан тирә-яҡҡа кире тәьҫир иткән яңы капиталь төҙөлөш объекттарын улар экологик параметрҙары буйынса иң яҡшы технологияларҙан ҡалышмаған осраҡта ғына файҙаланыуға тапшырыуға рөхсәт ителәсәк. Тәү сиратта был нефть сығарыуға һәм эшкәртеүгә, төҫлө металл мәғдәндәрен сығарыуға һәм байыҡтырыуға, төп органик һәм органик булмаған матдәләр етештереүгә ҡағыла. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, индустриаль төбәк өсөн был аныҡлыҡ принципиаль әһәмиәткә эйә. "Башҡортостан - сәнәғәт яғынан үҫешкән төбәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бындай "мизал"дың экологик зыян рәүешендәге кире яғы ла бар. Тәбиғәтте һаҡлау саралары - ғәмәлдәге производстволарҙы яңыртыу һәм таҙартыу ҡоролмаларын ғына ҡуйыу түгел. Был шулай уҡ проектлау һәм төҙөү этабында экологик контроль. Әгәр баҙар продукттың сифатын көйләһә, производствоның тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһо дәүләт контролендә булырға тейеш". Закон проектында "бысратыусы матдә" төшөнсәһенә лә аныҡлыҡ индерелә.

# КҮСЕҮ ОСОРОНДА...

**Башҡортостан юлдаш телевидениеһы программаларын һанлы телевидениеның беренсе пакетында күрергә мөмкин. Ноябрь аҙағында республика телеканалы тапшырыуҙарын таңғы 6-нан алып иртәнге 9-ға һәм киске 5-тән 7-гә тиклем ОТР телеканалында күрһәтә башлайҙар.**

Республиканың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов һүҙҙәренсә, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы республиканың төп телеканалы булып тора, уның Башҡортостанда аудиторияһы ҙур. Республика телеканалының программаларын элеккесә юлдаш һәм кабель телевидениеһында, шулай уҡ аналог сигналын ҡабул иткән телеантенна менән ҡарарға мөмкин. Ведомство башлығы ваҡыт үтеү менән Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һанлы телевидение пакеттарының береһенә инер тигән ышаныс белдерҙе. Башҡортостан телевидениеһының төбәк өҫтәмәләрен булдырыу буйынса техник эштәр 14 ноябрҙән 15-енә ҡарай төндә башҡарыла. Был ваҡытта телевизорҙарҙың һәм телеприставкаларҙың ҡайһы бер моделдәрендә телесигналдың юғалыуы мөмкин. Ошо осраҡта телеканалдарҙы автоматик рәүештә йәки ҡул менән көйләргә генә кәрәк. Консультация алыу өсөн РТРС-тың федераль "ҡыҙыу бәйләнеш"енә шылтыратырға: 8 800 220 20 02.

# "ЕҢЕҮ" МАРАФОНЫ БАШЛАНДЫ!

**Өфөнөң Еңеү паркында Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына арналған "Еңеү" республика марафоны башланды. Ҡатнашыусылар алдында сәләмләү һүҙе менән Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев сығыш яһаны.**




Башҡортостан Республикаһында "Еңеү" марафоны штандартын тәүгеләрҙән булып Борай районы ҡабул итте. 15 ноябрҙә Борайҙа Бөрө, Кушнаренко, Асҡын, Балтас, Ҡариҙел, Мишкә, Борай райондары ҡатнашлығында "Еңеү салюты" республика халыҡ ижады фестиваленең беренсе зона сараһы була. Артабан "Еңеү" республика марафоны штандарты республика фестиваленең туғыҙ зона сараһын урап сыға. Тантанала 1941-1945 йылдарҙағы Эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл армияһының атлы төркөмөнә "Мәңгелек ут" символы менән капсула тапшырылды. Артабан ул "Еңеү" республика марафоны барышында Башҡортостан ҡалаларына һәм райондарына тапшырылырға тейеш. "Еңеү" республика марафонының һуңғы этабы 2020 йылдың 9 майында Өфөлә байрам саралары барышында уҙа. Марафонды ойоштороусылар: Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Республика Хәрби дан музейы, Башҡортостан Республикаһының муниципаль берәмектәре хакимиәттәре.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө һәм Прага араһында тура авиабәйләнеште тергеҙергә теләйҙәр. Башланғысты республика парламентында Чехияның Fәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы вәкиле Витезслав Пивонька менән осрашыу барышында Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев тәҡдим итте. Витезслав Пивонька мәсьәләнең көнүҙәклеге менән ризалашты, Башҡортостанға сәфәренән һуң Чехия яғы менән тейешле консультациялар үткәреү эшенә тотондо.

✓Белорет - Әүжән трассаһында күп итеп ҡар яуған, ағастар ҡолаған. Автоһәүәҫкәрҙәр стихия эҙемтәләренең видеоһын социаль селтәргә һала. Юл хеҙмәттәре эшселәре юлды асыу өсөн ағастарҙы бензобысҡы менән бысып йыҡҡан. Быны күргәндәр, ағастар епшек ҡарҙы күтәрә алмайынса ауған, тигән фекерҙә. "53 йыл йәшәп, бындай мөғжизәне күргәнем юҡ ине. Ҡот осҡос", - ти автомобиль пассажиры. 10 ноябрҙә ошо урында ныҡ итеп ҡар яуған.

✓Өфө шорт-трек мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе, олимпия чемпионы Семен Елистратов АҠШ-та Донъя кубогының өсөнсө алтын миҙалын яуланы. Бынан алда "Башинформ" Елистратовтың 1500 һәм 5000 метрлыҡ арауыҡта беренсе "алтын"ын алыуы тураһында хәбәр иткәйне (Даниил Ейбог, Павел Ситников һәм Виктор Ан менән эстафета).

✓2018 йыл өсөн милек һалымын түләү ваҡыты яҡынлашып килгәнлектән, шулай уҡ халыҡҡа милек һалымы һәм физик берәмектәр килеменә һалым тураһында мәғлүмәт биреү акцияһы барышында Башҡортостан Республикаһының һалым органдары граждандарҙы күсмә ҡабул итеү ойоштора. Һалым түләүселәргә унайлы булһын өсөн акцияны 2019 йылдың 8 ноябренән 1 декабренә тиклем йома, шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә Өфөнөң һәм республиканың сауҙа комплекстарында уҙғарыу күҙаллана.

✓10 ноябрҙән 12-һенә тиклем Башҡортостанда "Мосафир" халыҡ-ара этник музыка форумы уҙғарылды. Өфө бөтә донъянан World Music өлкәһе эксперттарын ҡабул итте. Улар өсөн ойошторолған этнотур ваҡытында ҡунаҡтар милли ризыҡтарҙан ауыҙ итте, милли хореография элементтарын өйрәнде, яндан уҡ атып, башҡорттарҙың традицион кейемдәрен кейеп ҡараны.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Был проекттарҙың төп маҡсаты булып 2024 йылға тиклем мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеларына йөрөүселәрҙең һанын 18 процентҡа арттырыу тора.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

**"Бер нәмә лә ишетмәнем", "Ишеттем, әммә уларҙа нимә тураһында һүҙ барғанын уйлап та ҡараманым", "Бик ҡатмарлы яҙылған, аңлауы ауыр"... Ҡала Советы депутаты Артур Хазиғәлиев үҙенең һайлаусыларына милли проекттар тураһында һорау биреп, шундай яуаптар алған. Белеүселәр бар, әммә улар эштәре буйынса, сараһыҙҙан ғына хәбәрҙар икән.**

# МИЛЛИ ПРОЕКТТАР НИСЕК ҮТӘЛӘ?

Мәғлүм булыуынса, былтыр Рәсәй Президенты Владимир Путин милли проекттар тураһында указға ҡул ҡуя. Улар барлығы 13. Башҡортостанда иһә Рәсәйҙең милли проекттарына инған барлыҡ 11 төбәк проекты: "Демография", "Һаулыҡ һаҡлау", Мәғариф", Мәҙәниәт", "Торлаҡ һәм ҡала мөхите", "Экология", Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар", "Һанлы иҡтисад", Хеҙмәт һөҙөмтәлелеге һәм мәшғүллеккә ярҙам", "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ, шәхси эшҡыуарлыҡ инициативаһына ярҙам", "Халыҡ-ара кооперация һәм экспорт" проекттары үтәлергә тейеш.

Башҡортостанға милли проекттарҙы тормошҡа ашырыуға 175,1 миллиард һум бүленгән, шуларҙың 74,155 миллиарды - федераль бюджеттан, 49,71 миллиарды - республиканың берләштерелгән бюджетынан, 44,77 миллиарды - бюджет булмаған сығанаҡтарҙан, 6,29 миллиарды - дәүләттең бюджет булмаған фондтарынан.

Өфө ҡалаһы ла был милли проекттарҙа ҡатнаша һәм шуға ла ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә "Мәҙәниәт" милли проектының үтәлешенә төп иғтибар йүнәлтелде. Хакимиәттең Мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы начальнигы Шамил Абдраҡов белдереүенсә, милли проектҡа өс федераль проект инә: кадрҙар әҙерләүҙә, ижади проекттарға һәм ирекмәнлек хәрәкәттәренә ярҙам итеүҙә ҡуйҙалаған "Ижади кешеләр", тармаҡҡа һанлы технологиялар индереүҙә ҡуҙаллаған "Һанлы мәҙәниәт" һәм халыҡ өсөн мәҙәниәт учреждениелары булдырыу, уңайлы шарттар тыуҙырыуҙы ҡуҙаллаған "Мәҙәни мөхит". Был проекттарҙың төп маҡсаты булып 2024 йылға тиклем мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеларына йөрөүселәрҙең һанын 18 процентҡа арттырыу тора. "Ижади кешеләр" проектын тормошҡа ашырыу барышында мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре белемен камиллаштырып тора, ижади коллективтар төрлө конкурстарҙа һәм фестивалдәрҙә сығыш яһай һәм дипломдар менән бер рәттән аҡсалата премияларға лайыҡ була. "Һанлы мәҙәниәт" проектына ярашлы, баш ҡаланың ҡайһы бер мәҙәни учреждениеларында виртуаль залдар эшләй башлаған һәм улар аша ҡала халҡы Рәсәй генә түгел, донъя йондоҙҙары сығыштарын онлайндан да, яҙманан да ҡарай ала. Тиҙҙән Үҙәк ҡала китапханаһында, Киң күләмле үҙәкләштерелгән китапханалар системаһының үҫмерҙәр филиалында, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Үҙәк китапханала мәғлүмәт технологияларына тоташыу нөктәләре булдырыласаҡ. "Мәҙәни мөхит" проектының маҡсаты - мәҙәниәт учреждениелары селтәрен киңәйтеү һәм һәр кешегә унда йөрөй алыу мөмкинлеге булдырыу. Бөгөн иһә баш ҡалала халыҡты клубтар һәм ошо типтағы учреждениелар менән тәьмин итеү планы нормативҡа ярашлы 82,3 процентҡа ғына үтәлә. Булғандарының да ҡайһылары заманса талаптарға тап килмәй. Шамил Абдраҡов шулай уҡ үҙенең сығышында 2024 йылға тиклем Өфө балалар филармонияһын, Ҡала мәҙәниәт һарайын, Ҡала мәҙәниәт-күңел асыу үҙәген, Йәш тамашасы театрын һәм Өфө ҡала планетарийын реконструкциялау, капиталь ремонтлау планлаштырылыуын билдәләне.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# КЕМДӘР ХӘЙЕР ЙЫЯ?



**Транспорт туҡталышында үҙенден маршрутынды көтөп торғанда йәиһә транспортта китеп барғанда шундай күренешкә шаһит булаһың: махсус ҡумта һәм сирле тураһында мәғлүмәт тотҡан малайҙар (күпселек осраҡта улар үҫмерҙәр), автобусҡа инә лә, берәй мәрхәмәтлек фонды исемен атап, ярҙам һорай, йәғни ҡумтаға кем күпме булдыра ала, шунса аҡса һалыуҙы үтенеп, салондың артынан башынаса үтә. Ҡайһы бер водителдәр уларҙы индермәй, шунда уҡ ҡыуып төшөрә, күрәһең, ялҡып бөткәндәрҙер. Бәғзеләре иһә рөхсәт бирә.**

Быдндай күренештәр, әлбиттә, Өфөлә генә түгел, хатта Мәскәү, Питер кеүек ябай халыҡтың ике ятып бер төшөнә лә инмәгән ҡалаларҙа ла йыш осрай. Улар метрола, вокзалдарҙа йөрөй, вагондарға инеп, ваҡ-төйәк әйбер һата, үҙҙәренең ауыр бала сағы тураһында һөйләй. Кемдер иҫе лә китмәй, ҡайһы береүҙәр йәлләп, нимәлер булһа һатып ала. Беҙҙә иһә хәлторош бер аҙ башҡасараҡ - үҫмерҙәр кемгәлер ярҙам итеү өсөн аҡса йыя. Һәр хәлдә, шулай икәненә үҙебеҙҙе ышандырырға тырышабыҙ.

Улар йәмғәт тыныслығын да боҙмаған кеүек, икенсе яҡтан, хәҙер ниндәй генә хәйриә, мәрхәмәтлек фондтары юҡ. Үҙен ихтирам иткән абруйлы фондтар шулай балаларҙы эшкә егер инеме икән? Ундайҙар, моғайын, йә эре компания-предприятиелар менән эшләйҙер, халыҡҡа мөрәжәғәт иткәндә лә үҙҙәренең иҫәбен, реквизиттарын күрһәтә һәм иҫәптәренә күпме аҡса күсеүе, күпмеһе ниндәй мохтаж балаға ебәрелеүе йәки нимәлер һатып алыныуы тураһында отчет биреп баралыр. Ә был үҫмерҙәр бары тик ниндәйҙер бысраҡ ҡуллы мут әҙәмдәрҙең ҡулындағы уйынсыҡтыр, күрәһең. Сөнки уларҙы хоҡуҡ һаҡлау органдары тотҡан осраҡта ла, яуапҡа тарттырыу мөмкин түгел, ә кем ҡушыуы буйынса эшләүҙәрен әйтмәйәсәктәр. Әгәр инде үҙ сменаһын тотолмай ғына үткәрһә, бәлки, күпмелер аҡса ла түләйҙәрҙер.

Һәр хәлдә, тотолмаған - бур түгел, тиғән кеүек, бары тик фаразларға ғына ҡала. Кем әйтмешләй, держава өсөн оят: әллә ҡайҙа ятҡан Африкаға миллиардлап бурыстарын түләтмәйбеҙ, ә үҙ илебеҙҙә балалар урам буйлап хәйер йыя...

**Наил КӘРИМОВ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ДЕКРЕТ АҠСАҺЫ...

**Киләһе йылдың 1 ғинуарынан йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиеның максималь күләме 322 мең һумға тиклем арта.**

2019 йылда ул 301 мең һумдан ашыу тәшкил итте. Баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиеның максималь күләме 26 мең һум урынына (2019 йылда) 28 мең һумға тиклем арта. Пособиены иҫәпләү өсөн уҙған ике йылдың хеҙмәт хаҡы алына, ләкин сикке базанан юғары түгел. 2018 һәм 2019 йылда Страховка фондына страховка аҡсаһын иҫәпләү өсөн сикке базалар 815 мең һәм 865 мең һум тәшкил итә. Был йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиеларҙың максималь күләмен, шулай уҡ баланы тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиены арттырырға мөмкинлек бирә.

Бынан тыш, киләһе йылдан бер көнлөк ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса пособиеның максималь күләме 2150,68 һумдан 2301,36 һумға тиклем күтәрелә.

# КҮП БАЛАЛЫҒА ҺӘМ...

**РФ Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев ҡул ҡуйған бойороҡта балалы ғаиләләргә бирелгән ипотека кредитын банктарға ҡайтарыу ҡағыҙәләренә үҙгәрештәр раҫланды.**

Инвалид балаһы 2022 йылдың 31 декабренә тиклем тыуған граждандарҙың 6 процент менән кредит алыу йәки кредит осоронда рефинанслау хоҡуғы була. 2022 йылдың 31 декабренә тиклем тыуған балаға инвалидлыҡ ошо ваҡыттан һуң ҡуйылһа, ғаилә 2027 йылдың 31 декабренә ҡәҙәр льготалы шарттарҙа ипотека алырға мөмкин. Президент Владимир Путин башланғысы менән булдырылған ишле ғаиләләргә ярҙам программаһы 2019 йылдың 25 сентябренән алып эшләй. Был льготанан өсөнсө һәм артабанғы балаһы тыуған йәки тыуырға тейеш ғаиләләр файҙалана ала. Ипотека түләү өсөн аҡсаның күләме 450 мең һум тәшкил итә. Программа әлегә 2022 йылдың 31 декабренә тиклем ғәмәлдә.

# ТАРИФТАР АРТА...

**Киләһе йылда Рәсәйҙә кәрәҙле элемтәгә тарифтарҙың 10-25 процентҡа ҡиммәтләнеүе ихтимал.**

Telecom Daily генераль директоры Денис Кусков фекеренсә, бәлки, тарифтар 10-12 процентҡа артыр. Аныҡ прогноз ноябрь аҙағына билдәле була. Telecom Daily үткәргән һорау алыу һөҙөмтәләренән күренеүенсә, рәсәйҙәрҙең күбеһе әле уҡ кәрәҙле элемтәгә сығымдарҙың артыуын һиҙә. Хеҙмәттәрҙең хаҡын арттырып, элемтәселәр быйыл эске роумингты бөтөрөү сәбәпле кәмегән килемдәрен ҡаплай. МТС, Tele2 һәм "Билайн" мобиль операторҙары әлегә элемтә хеҙмәттәрен күрһәтеүгә тарифтарҙы арттырырға йыйынмай, тип хәбәр итә ТАСС компания вәкилдәренә һылтанма менән.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыу алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тире янғанда

❖ 2 ҡалаҡ календула сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минуттан һуң һөҙөргә. Янған урынды йыуыу өсөн ҡулланыла. Был төнәтмә тирене матур итеп бөтәштерә, янған урындар ҡалмай.

❖ Дегәнәк ауыртыуҙы баҫа һәм шешеүҙе булдырмай. Таҙа итеп йыуып, шыма яғын янған урынға һалып бәйләйҙәр. Тәүге тәүлектә 2 сәғәт һайын алыштырырға.

### Бүҫер

❖ 1 ҡалаҡ бүҫер үләненә (вероника дубравная) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр, ашағандан һуң, ярты-шар стакан эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ эт һабыны (собачье мыло, грыжник душистый) үләненә 2 стакан ҡайнап һыуынған һыу ҡойорға, 2 сәғәттән һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашағандан һуң эсергә.

### Тире сирҙәренән

❖ Сиҡан йәки күҙгә арпа сыҡһа йонсотһа, 3 ҡалаҡ кесерткәнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Ошо уҡ сирҙәрҙән яңы ғына һығылған кесерткән һутын (көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ) эсергә мөмкин. Балалар өсөн - 1 балғалаҡ.

❖ Сиҡан, һыҡты ваҡытында 1 ҡалаҡ бәпембә тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут талғын утта ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан 20 минут алда ярты-шар стакан эсергә.

❖ Сиҡанды, эренле шеште йомшартыу өсөн меңъяпраҡты зәйтүн майына ҡушып (1:10), май яһарға. Шешкә һөртергә, көн һайын алыштырырға.

### Ринит

❖ Көнөнә 4-5 тапҡыр танауға 3-5 тамсы алоэ һуты тамыҙырға. Бал өҫтәлгән каланхоэ йәки юл япрағы һуты ла ярҙам итә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ - Алланы яратыу - аҡылдан, бәйғәмбәрҙе яратыу - имандан, балаларҙы яратыу - тәбиғәттән, ҡатынды яратыу - мөхәббәттән килә, - тип яуап биргән уға Фатимаһы.



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**XIX-XX быуаттарҙа өйрәнелгән территорияла тамбур (элмә, ҡабартма ҡайыу), ҡыя сәнсеп сатрашлау (косая сетка), шыма нағышлау, сатрашлап сигеү (крестик), уратып алыу һәм башҡа төр йөйҙәр ҡулланып ҡайылған әйберҙәр осрай. Иң киң таралғаны - тамбур булған һәм уның бер нисә төрө билдәле: ябай элмә, киң элмә, ҡуш элмә, типселгән йөй (йүрмәп тегеү) һ.б. Артабан улар тураһында тулы мәғлүмәт биреләсәк.**



*Характерлы элмәк йөйҙәр: 1 - ябай элмә; 2 - киң элмә; 3 - ҡуш элмә төрҙәре; 4 - типселгән йөй; 5 - кәҙә тояғы менән тултырыу*

Ҡайһы бер ҡайыу алымдары сағыштырмаса ҙур булмаған территорияла ғына ҡулланылған, башҡалары бөтә ергә киң таралған. Экспедициялар ваҡытында йыйылған материал художестволы күрһәтелеш йәһәтенән үҙенсәлекле, сағыу өс төбәккә иң тулы ҡылыҡһырлама биреү мөмкинлеген аса:

а) тәүге осор малсылыҡ традициялары менән тасуири көньяҡ-көнсығыш;

б) классик тамбур һәм хисаплы ҡайыуҙы берләштереүе менән үҙенсәлекле Урал аръяғының көнсығышы;

в) ултыраҡ тормош шарттарында ла традицион тамбурҙың бөтә алымдары һаҡланып ҡалған көньяҡ-көнбайыш (Дим йылғаһы бассейны һәм көньяҡ Урал алды).

Көньяҡ-көнсығыш төбәге ҡуҫҡар биҙәге менән берләшкән "ике ҡатлы тамбур" үҙенсәлекле ҡайыу алымының сикһеҙ күп төрләнеүе территорияһы. Этнография һәм сәнғәт фәненә ҡараған хеҙмәттәрҙә ҡайһы берҙә был алымды "тәкәмөгөҙ менән һиҙепләү" ("козлик в окантовке") йәки "ҡыя сәнсеп сатрашлау" ("косая сетка") тип билдәләйҙәр. Көньяҡ-көнсығыш башҡорт ауылдарында тегеү алымына яҡын булған тасуири атама - "ҡуш элмә" ҡулланыла. Асылда, был киңәйтелгән тамбурҙың ҡатмарландырылған бер төрө. Эш барышында энә алдағы күҙҙе эләктереп, элмә рәүешендә һалынған еп эсендә биҙәктең икеләтә һыҙаты буйлап алмаш-тилмәш йә һулдан, йә уңдан үткәрелгән. Бер ыңғайҙан һыҙаты һүрәтләнгән (сәнсемдәр сүпләп сигеүҙе хәтерләтеп, берберенәнә инеп торған) һәм уртаһы ла селтәр менән тултырыла барған.



*Көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда традицион ҡайыу өлгөләре. Яҫсыҡ туҡымаһы (Ташбулат ауылы, Әбйәлил районы БР). РЭМ. ХХ б. уртаһы.*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# АЛДАТҠЫС ЛӘЗЗӘТТӘРГӘ ЫМҺЫНМА!



**Бик борон заманда күккә ашҡан бейек тауҙарҙағы ҡарурмандар араһында донъя ығы-зығыһынан арыған, донъяның фани икәненә тамам төшөнгән, ҡалған ғүмерҙәрен Аллаһы Тәғәләгә арнаған, уға ғына ғибәҙәттә зекерҙәр ҡылған изге дәрүиш суфыйҙар йәшәгән, ти. Был урын бик бай булып, суфыйҙар ошондағы тәбиғәттә үҫкән төрлө ризыҡ менән генә туҡланып көн иткән. Эскән һыуҙары көмөштәй саф, балдай татлы, шифалы шишмәләрҙән икән.**

Изге суфыйҙарҙы аяғандай, бында ҡыштың һалҡыны ла, йәйҙең көйҙөргәс томра эҫеһе лә артыҡ маҙаһыҙламаған. Йомшаҡ ҡына иҫкән ел дә тик хозурлыҡ, тик сафлыҡ ҡына алып килеп торған. Суфыйҙар ғүмерҙәрен ғибәҙәттә үткәргәс, ҡәлебтәре (йөрәктәре) изге доғаларҙан сафланып, күңелдәре гонаһ-бысраҡтан таҙарынып, йөҙҙәре һәр ваҡыт рухи сафлыҡ, илаһи нур бөркөп торған.

Бер саҡ уларҙың береһенең башына шундай уй килгән: "Мин рухи яҡтан бигерәк бәхетлемен, ә батшаның бәхете нисегерәк була икән?" Шулай итеп, был суфыйҙың бер генә көн булһа ла батша булып ҡарау теләге уянған. Ошо ниәтен тормошҡа ашырырға булып, суфый, йәннәттәй төйәген ташлап, батша бәхете эҙләп сығып киткән. Үҙе юлда уйлана бара икән: "Йә, Хоҙай! Ҡолондоң теләктәрен ҡабул итеп, бер генә көн батшалар бәхетен татытып ҡараһаңсы..." Шулай бара торғас, ҡарт суфый, үҙе лә һиҙмәҫтән, алтын-көмөш менән биҙәлгән һарай янына барып сыҡҡан. Ул ҡыуана-ҡыуана, күҙҙең яуын алырҙай ҡыуаҡтар, сәскә түтәлдәренә күмелгән баҡса аша үтеп киткән. Туп-тура һарайға, унан аш бүлмәһенә ингән. Алдында быҒаса төшөндә лә күрмәгән татлы ризыҡтар менән һығылып торған өҫтәлде күреп, суфый шулай уйлаған: "Хаҡ Тәғәлә теләктәремде ҡабул итте, хыялдарымды алдыма килтерҙе. Бер генә көн батша булып йәшәп ҡарайым әле", - тип шатланған.

Суфый иҫке-моҫҡо кейемдәрен ташлап, йыуына, батшаның затлы кейемдәрен кейә һәм ашарға керешә. Бүлмәгә ингән батша хеҙмәтселәре, был хәлде күреп, аптырашта ҡала.

- Һин кем булаһың? Бына-бына батшабыҙ һунарҙан ҡайтасаҡ... - тип, хеҙмәтселәр ҡысҡырырға тотонған.

- Мин бөйөк батшаның дуҫы, уның саҡырыуы буйынса ҡунаҡҡа килдем, - тигән суфый дәрәжә һаҡлап.

Батша хеҙмәтселәре уға ышанған, ашап бөткәс, батшаның ял бүлмәһенә оҙатҡан. Суфый батшаның йомшаҡ түшәгендә донъяһын онотоп, ләззәтле йоҡоға талған.

Ошо мәл арып-талып һунарҙан ҡайтып килгән батша вәзирҙәренең береһен һарайға сапҡын итеп ебәргән.

- Батшабыҙ дуҫын беҙгә ҡунаҡ итеп ебәргәс, уға тип әҙерләнгән ризыҡты ашаттыҡ, - тип ҡаршылаған хеҙмәтселәр вәзирҙе.

Вәзир батша бүлмәһенә барып ингән һәм хырылдап йоҡлап ятыусы суфыйҙы күреп туҙынған.

- Ҡамсы бирегеҙ, батшабыҙҙың бындай дуҫы юҡ, - тип ҡысҡырған вәзир.

Ҡарт тәнен ҡамсы яндырыуҙан тертләп уянып киткән. Барыһы ла суфыйҙы туҡмарға тотонған. Ҡаты туҡмалған ҡарт: "Был - минең донъя ләззәтенә алданыуым өсөн Хоҙайҙың яҙаһылыр. Кеше ни тиклем изгерәк, тәҡүәлерәк булһа, уның Хаҡ Тәғәләнән һораған теләктәре шул тиклем тиҙерәк ғәмәлгә аша, әгәр инде гонаһ ҡылһа, хатта гонаһы бәләкәй булһа ла, яҙаһы шул тиклем тиҙерәк үҙенә ҡайта...", - тип уйлап, донъяның ошондай ҡанундарын аңламағанлыҡтанмылыр, тәненең ҡаты ауыртыуына ҡарамай, ҡысҡырып көлә башлаған. Хеҙмәтселәр уны торған һайын ярһыбыраҡ һыҙырған. Ҡарт тегеләр һуҡҡан һайын ҡысҡырыбыраҡ көлә, ти. Улар суфыйҙың аңын юғалтҡансы туҡмап, һарайҙан ситкә, урман араһына илтеп ташлаған.

Аҙаҡ суфыйҙы иптәштәре эҙләп табып, төйәктәренә алып ҡайтҡан. Иптәштәренең береһе ҡыбырҙай алмай ятҡан ҡарттың ауыҙына һөт ҡойоп: "Һин беләһеңме ауыҙыңа кем һөт ҡойғанын?" - тип һораған. "Минең ауыҙға һөт ҡойҙороусы үҙен онотоп, бер генә көн батшалыҡ ләззәтен татырға теләгән өсөн яза биреүсе Алланан башҡа кем булһын," - тип яуап биргән суфый. Иптәштәре рәхәтләззәттә лә, ауырлыҡ килгәндә лә, Ғәләмдәр Раббыһына ҡарата үҙгәрешһеҙ саф мөнәсәбәттә ҡалған ҡартты күреп ҡыуанышҡан.

Тап ошо ваҡытта батша һарайына әйләнеп ҡайтҡан. Үҙе юҡта килеп, алдашып, уға тип бешерҙән ризыҡты ашаусыға йәне көйөп, ҡартты табып килтерергә бойорған.

Батша ярандары ҡартты табып, типкеләй-туҡмай һарайға килтергән. Батшаны күреү менән ҡарт элеккенән дә ҡысҡырыбыраҡ көлә икән. Батша уны үлтереү менән янаһа ла, тыйылмаған суфый. Йәйлап-йәйлап батшаның асыуы ғәжәпләнеүгә күсә башлаған. Әгәр ҙә үҙенә бының сәбәптәрен аңлатып бирһә, суфыйға үҙенең тәхетен дә ҡыҙғанмай бирәсәген әйткән батша.

- Күрәһегеҙме, мин бер генә көн үҙемә ошо матди донъяның барлыҡ алдатҡыс ләззәте менән күңелемә хушлыҡ табып йәшәргә теләгәнем өсөн Хаҡ Тәғәләнән ҡаты яҙа алдым. Ғазап сиктем, туҡмалдым. Көләүемдең сәбәбе шулдыр: әгәр ҙә мин бер генә көн донъя алдатҡыстарына ымһынып, ялған рәхәтлек менән ләззәтләнгән өсөн ни хәтле туҡмалыу, ыҙаланыуға дусар ителһәм, һеҙҙең ғүмерегеҙ буйы Алланың барлығын да онотоп, донъя ләззәтенә алданып йәшәгәнегеҙ өсөн ни хәтле туҡмаласағыҙҙы күҙ алдына ла килтерә алмауҙан ғәжиз булып аптырауҙан көләм бит. Әле миңә бүләк итергә теләгән тәхетегеҙҙән баш тартам. Мин бер генә минутҡа ла батша булырға теләмәйем, - тигән суфый...

Был ҡиссаның ниндәй халыҡтыҡы икәнен иҫләмәйем. Әммә үҙҙәрен донъя алдатҡыстарынан арындыра алыусы, күңелдәрендә мөхәббәт, донъя тигеҙлеге һәм матурлыҡ фәлсәфәһен йөрөтөүсе кешеләр булған бит. Мәҫәлән, суфыйҙар хәҡиҡәтте Хаҡ Тәғәлә тиеп атап йөрөткән, ә Хаҡ Тәғәләнең мөхәббәт икәненә инанған.

Һинд фәйләсуфтары Хаҡ Тәғәләнең өс төрлө өлөштән торғанын белгән:

- Сат - бөтөнбарлыҡ, матди донъя;

- Чит - аң һәм көстәге рух (энергия);

- Ананда - ләззәт, мөхәббәт, ятыу.

"Яратыу" һүҙе "барлыҡҡа килтереү" тигәндә аңлата. Тимәк, мөхәббәтһеҙ бер нәмә лә барлыҡҡа килә алмай. Тимәк, донъяны Аллаһы Тәғәлә яратҡан, барлыҡҡа килтергән икән, ул донъяны мөхәббәте менән бар иткән. Барлыҡ йән эйәләре, кешеләр ҙә мөхәббәт емеше.

Бер саҡ Мөхәммәт бәйғәмбәр кейәүе Ғәлиҙән һораған:

- Алланы яратаһыңмы?

- Яратам, - тип яуап биргән кейәүе.

- Бәйғәмбәребеҙҙе яратаһыңмы?

- Яратам...

- Балаларыңды яратаһыңмы?

- Яратам...

- Ә ҡатыныңды яратаһыңмы?

- Яратам, - тигән кейәү кеше.

- Һин, тимәк, барыһын да яратаһың. Ә ҡайһылай итеп бынау хәтле мөхәббәтеңде эсеңә һыйҙыра алаһың? - тип һораған Бәйғәмбәр.

Кейәүе был һорауға яуап бирә алмаған. Ҡайтҡас, ҡатыны Фатиманан һораған.

- Алланы яратыу - аҡылдан, Бәйғәмбәрҙе яратыу - имандан, балаларҙы яратыу - тәбиғәттән, ҡатынды яратыу - мөхәббәттән килә, - тип яуап биргән уға Фатимаһы.

**Сәлих ХӘЙҘӘРОВ.**

*✓ Хәҙерге геногеографик тикшеренеүҙәр түңгәүерҙәрҙең нәсел-заттарының төрлө ата-бабаларҙан барлыҡҡа килгән айырым гаплотөркөмдәрен асыҡ күрһәтеп тора.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?



**Тарихсы-этнограф Р.Ғ. Кузеев түңгәүер ырыуын көньяҡ-көнсығыш башҡорттары төркөмөнә индергән. Ошо ғалимдың фекеренсә, түңгәүерҙәр боронғо башҡорттарҙың тәүге этник субстратына ҡарай, улар бөрйән һәм үҫәргән ырыуҙары менән йәнәш ҡуйыла. Ул үҙенең "Башҡорт халҡының килеп сығышы" исемле китабында ошолай яҙа: "Үҫәргәндәрҙең, түңгәүерҙәрҙең, шулай уҡ башҡа бер башҡорт ҡәбиләләренең ата-бабалары иртә урта быуаттарҙағы ғәрәп-фарсы сығанаҡтарында баджгард, баджгурд, басджирт йә иһә башхарт тигән дөйөм атама аҫтында билдәле булған".**

# ҠУРАЙСЫЛАР ИЛӘҮЕ ТҮҢГӘҮЕР ЫРЫУЫНАН БЕҘ

Ошо уҡ ғалим түңгәүер башҡорттарының монгол сығышлы булыуҙарын күҙаллай, сөнки монгол ҡәбиләләренең береһенең этнонимы түңгәүер атамаһына оҡшаш. Ысынлап та, 1744 йылда Пекинда "Һигеҙ байраҡ составында булған маньчжур ырыуҙарына дөйөм күҙәтеү" исеме менән баҫылған хеҙмәттә Цин династияһына буйһонған 233 монгол һәм маньчжур ҡәбиләләренең исемлеге бирелә, улар араһында Тангур ҡәбиләһе лә бар. Шулай уҡ XIX быуат этнографы П. Назаров тапҡан бер шәжәрәлә "Дәнгәүерҙәр Сыңғыҙ оноғо, Ҡуңғрат бей улы Дәнгәүерҙән таралған", тигән мәғлүмәт бар. Әлбиттә, бында түңгәүер вариҫтарының үҙ нәҫелен Сыңғыҙ хан исеме менән бәйләргә тырышыуын тарихи традиция йоғонтоһо тип аңларға кәрәк. Әммә был башҡорт ырыуының тарихи тамырҙары боронғо монгол ҡәбиләләренән булған Кунграт (Хонгират) ҡәбиләһенә барып тоташыуы ысынбарлыҡҡа тап килеүе бик мөмкин. Был хаҡта Р. Кузеев былай тип яҙа: "Ошондай факттар йыйылмаһы түңгәүер ырыуының этник нигеҙенең килеп сығышын кунграт (конграт, конгират) - боронғо монгол ҡәбиләһе менән бәйләргә мөмкинлек бирә, ул һуңғараҡ (XIII-XIV быуаттарҙа) төркиләшеп, Урта Азия һәм Ҡаҙағстан халыҡтарының, иң әүәл үзбәктәрҙең этник составы формалашыуында ҡатнаша".

Тарихсы С. Хәмиҙуллин түңгәүерҙәрҙең боронғо тарихын күҙаллаған Р. Кузеев версияһындағы ҡапма-ҡаршылыҡтарға иғтибар итә. Бер яҡтан, ғалим түңгәүерҙәрҙе боронғо башҡорттарҙың этник нигеҙен тәшкил иткән этник төркөмдәр рәтенә ҡуйһа, икенсе яҡтан, тик XIII быуатта ғына төркиҙәр составына ингән монгол-кунграттар менән бәйләй. Р. Кузеев иһә был фактҡа үҙенсә аңлатма бирә: "Шулай ҙа түңгәүерҙәр көнсығышта монгол ҡәбиләләренән әүәлерәк айырылып сыға; уларҙың төркиләшеүенең Төрки ҡағанаты эсендә башланыуы үҙенән-үҙе беленеп тора, ул һуңынан боронғо бәшәнәк мөхитендә тамамлана. Түңгәүер тарихы монгол этник берәмектәренең Һырдарья һәм Арал буйына бик иртә (XIII быуаттан күпкә алдараҡ) үтеп инеүенең бер миҫалы булып тора..."

С. Хәмиҙуллин Р. Кузеев версияһының ышаныслы булмауына үҙ дәлилдәрен килтерә. Бер яҡтан, IX-X быуаттарҙан алдараҡ монгол ҡәбиләләре составы буйынса бер ниндәй ҙә сығанаҡтар юҡ, ул заманда түңгәүерҙәрҙең кунграт берләшмәһенән айырылып сығыуы буйынса тарихи дәлилдәр табылмаған, ошо заманда кунграт ҡәбиләһенең булыу-булмауы ла билдәһеҙ. Ә Кузеев фараз иткәнсә, түңгәүерҙәр боронғо башҡорт берләшмәһенә тик IX-X быуаттарҙа ғына ҡушылған, ә Төрки ҡағанаты составында улар VI-VIII быуаттарҙа уҡ "төркиләшеү" осорон үтергә тейеш була. Шуға ҡарамаҫтан, Р. Кузеев теркәп ҡалдырған 3 факт ғилми яҡтан түңгәүерҙәрҙең килеп сығышын күҙаллар өсөн хәл иткес роль уйнай: 1) түңгәүер риүәйәттәре, үҫәргән һәм бөрйәндәрҙеке кеүек үк, үҙҙәренең башҡорт ерлегендә "автохтон" булыуын раҫлай; 2) уларҙың генеалогияһы Көнсығыш Төрки ҡағанатының билдәле хәрби етәксеһе, принц Күлтегингә (684 - 731 йй.) барып тоташа; 3) этнограф П.С. Назаровтың түңгәүерҙәрҙең тәү бабаһы сифатында шәжәрәлә теркәлгән Ҡуңғрат бей улы Дәнгәүер тураһындағы мәғлүмәте.

С. Хәмиҙуллин этнограф Р. Кузеев яҙмаларындағы ысынбарлыҡҡа тап килмәгән тағы ла бер факты билдәләп үтә. Ғалим түңгәүер ырыуында эске бүленеш булмауы хаҡында хаталы фекер ҡалдырған. Ысынбарлыҡта был ырыуҙа ла ике бүленеш (урман- һәм ялан-түңгәүерҙәр) булып, уларҙың өпәй, юрмый, имес, бай атамалы аралары (аймаҡтары) теркәлгән. Ә хәҙерге геногеографик тикшеренеүҙәр түңгәүерҙәрҙең нәсел-заттарының төрлө ата-бабаларҙан барлыҡҡа килгән айырым гаплотөркөмдәрен асыҡ күрһәтеп тора. С. Хәмиҙуллин билдәләүенсә, Р.Ғ. Кузеев, күрәһең, тап бөрйән, үҫәргән һәм түңгәүер ырыуҙарының башҡорт исеме аҫтында танылыу фактын XX быуат башындағы билдәле этнограф Сәғит Мираҫовтың "Башҡорт шәжәрәләре" тигән хеҙмәтенән алған. С. Мираҫов бына ниҙәр яҙа (нөсхәләге орфографияға ярашлы бирелде): "Әгәр ҙә был шәжәрәләргә таянырға тура килһә, был шәжәрәләр беҙгә байтаҡ нәмәләр асып бирә алалар. Берҙән, дөйөм башҡорт халҡының бер атанан ғына таралған халыҡ булмай, мынан мең - мең ярым йыл элек һәр ҡәбилә үҙ алдына айырым йәшәб һуңынан бер халыҡ, бер йәмғиәт булып китеүҙәрен; икенсе: башҡорттарҙың төрөк нәҫеленән булыуын. Сөнки һәр бер шәжәрә үҙенең төб бабаларын төрөк ҡәүеменән булған мәшһүр бер кешегә итеб бәйләйҙәр. Бәғзеләре һун төрөктәрендә булған Баламирға, бәғзеләре Аланджа-ханға, Угузға, бәғзеләре уйғыр төрөктәренән булған Култикингә, бәғзеләре манғул хандарынан булған Чингиз, Мамай, Майҡы, Туҡтамыш, Идигу, бәғзеләре Аҡһаҡ-Тимергә итеб бәйләйҙәр. Мәҫәлән, Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәләре Уғуз-хандан айырылыб һуңынан үҙҙәре өлкән бер дәүләт булып манғул баҫҡанлығы дәүерендә һәр тарафҡа таралғандар әйтәләр. Шулай уҡ Ҡаңлы ырыуҙары үҙҙәренә Ҡаңлы исемен Уғуз биргән тиҙәр. Бөрйән, Үһәргән, Түңгәүер ырыуы шәжәрәләре үҙҙәренең төб бабаларын уйғыр төрөктәренең ханы булған Култикин, анан һуң Аланджа-ханға, анан Нух улы Яфәскә итеб бәйләйҙәр. Табындар үҙҙәрен Майҡы-бийгә, анан Аҡһаҡ-Тимергә бәйләйҙәр. Меңлеләр үҙҙәрен һун төрөктәренең ханы Баламирға бәйләйҙәр. Миндә юғарыла әйтелгән ырыуҙарҙың һәр ҡайһының шәжәрәләре бар. Әммә Көҙәй, Ҡыуаҡан, Ҡатай, Тамъян ырыуҙарының ғына шәжәрәләрен күрә алғаным юҡ".

Күренеүенсә, этнограф С. Мираҫов бер юлы өс айырым башҡорт ырыуының төп бабаһы сифатында тарихта Көнсығыш Төрки ҡағанаты исеме аҫтында билдәле булған дәүләттең сәйәси һәм хәрби эшмәкәре Култегинде күрһәтә. Был мәғлүмәттең ысынбарлыҡҡа тап килеү-килмәүен билдәләү мөмкинлеге юҡ. Шулай уҡ башҡорт исемен йөрөткән иң боронғо ырыуҙар теҙмәһенең ошо өс ырыуҙан ғына тороуы ла бер нисек тә дәлилләнмәгән әле, сөнки ошо хаҡта аныҡ тарихи сығанаҡтар табылмаған. Шуға күрә үрҙә телгә алынған фаразды ла боронғо башҡорт тарихының бер версияһы сифатында ҡабул итеү фарыз. С. Хәмиҙуллин дә бөрйән ырыуы башҡорттарының геногеографияһы һәм палеогенетика материалдары буйынса уларҙың ата-бабаларының Көньяҡ Уралда иң кәмендә сармат дәүеренән (беҙҙең эраға тиклем V - II бб.) үк йәшәүен, ә түңгәүерҙәрҙең бер өлөшөнөң шул уҡ R1b-M343 гаплотөркөмөнә ҡарауын иҫәпкә алып, ошо ырыу вәкилдәренең ерле башҡорт этносын барлыҡҡа килтереүен фаразлай. Һәр хәлдә лә ул бөрйән һәм түңгәүерҙәрҙең дә тарихи сығанаҡтарҙа айырым бер ҡәүем атамаһы рәүешендә сағылдырылған башҡорт этнонимын үҙҙәренә ҡабул итеп алыуын, ә ниндәй ҡәүемдең башҡа бер ырыу атамаһы менән түгел, ә үҙ исеме булған башҡорт исеме аҫтында тарихта теркәлеүе әлегә асыҡланмаған, тип иҫәпләй.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



# БОРОНҒО БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТСЕЛЕГЕ

Милли дәүләт тураһында һүҙ алып барғанда уның халыҡты формалаштырыуҙағы ролен әйтеп китергә кәрәк. Ҡайһы бер ғалимдар, **халыҡты халыҡ итеп тарих аренаһына сығарыусы - ул дәүләт,** тиҙәр. Ысынлап та, мәнфәғәттәре, ихтыяждары тәүҙә төрлөсә, хатта ҡапма-ҡаршы ла булған; сығыштары, тел, йолалары төрлөсә ҡәүемдәрҙе бергә уҡмаштырып, уларҙан ихтыяждары, мәнфәғәттәре бер бөтөн булған халыҡ яһау өсөн көслө, ҡеүәтле ойошма талап ителә. Был ойошма, бая үрҙәрәк әйткәнебеҙсә, дәүләт тип атала. Башҡорттоң эсендә әллә күпме ырыу, ҡәбилә барлығы билдәле, ә башҡорт тигән ҡәбилә тарихсыларға әлегә билдәһеҙ. Тимәк, төрлө атамалы ырыу, ҡәбиләләрҙе Башҡорт тигән исем артына берләштереүсе көс булған.

Беҙгә туғандаш төрөк халҡының, дәүләтенең барлыҡҡа килеүенә күҙ һалһаҡ, халыҡты формалаштырыуҙа дәүләттең роле ап-асыҡ күренер. Хәҙер төрөк тип аталған милләтте формалаштырыуҙа уғыҙ сығышлы төрки ҡәүемдәрҙән тыш, гректар, грузиндар, әрмәндәр, ғәрәптәр, иран телле ҡурдтар һәм башҡа әллә күпме ҡәүемдәр ҡатнаша. Дәүләтте ойоштороусы көстөң башында уғыҙ төркиҙәре тора, армия, дәүләт институттары иң тәүҙә улар мәнфәғәтен ҡайғырта. Баҫып алынған халыҡтар (мәжбүри йәки үҙҙәре теләп) әкренләп кенә дәүләттең көсөн тәшкил иткән халыҡтың теленә күсә башлай һәм шулай итеп күптәре төркиләшеп бөтә. Хәҙер донъяла көслө төрөк халҡы һәм дәүләте йәшәй, бөтә донъя буйлап үҙ мәнфәғәтен ҡайыра.

Дәүләт һәм халыҡ атамаһының барлыҡҡа килеүенә ҡарата тағы бер сағыу миҫал килтерергә була. Был Венгрия миҫалы. Уғыр телле мадъярҙар әле йәшәгән ерҙәренә үҙҙәре менән бергә төрки телле башҡорттарҙың бер өлөшөн дә эйәртеп алып китә. Башҡорттар уғырҙарға үҙҙәре теләп эйәрҙеләрме, әллә мәжбүри көсләп алып кителделәрме - беҙ быны аныҡ ҡына әйтә алмайбыҙ. Нисек кенә булмаһын, башҡорттар мадъярҙарҙың ата-бабалары менән бергәләшеп Паннонияны баҫып алалар. Был баҫып алыуҙы ойоштороусы төп көс, ихтыяр, йәғни власть мадъярҙар ҡулында була. Баҫып алыу, алғас ул ерҙәрҙә нығыныу өсөн ғәскәр кәрәк. Кешеләрҙе бергә ғәскәр итеп туплау, уларҙан берҙәм ғәйрәтле йоҙроҡ яһау өсөн көслө ихтыяр кәрәк. Был ихтыяр (иран телләләрҙә власть шулай атала - **Ә.З.**) мадъярҙар ҡулында була. Төҙөлгән дәүләттә власть мадъярҙар ҡулында булғас, дәүләт уларҙың исеме менән атала башлай. Дәүләт эсендә ҡалған төрлө телле халыҡтар, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, венгр дәүләтенең теле - мадъяр телен ҡабул итеп, әкренләп кенә мадъярлашып бөтәләр. Хәҙер ярайһы уҡ көслө, үҙен донъя кимәлендә таныҡҡан, тарихта ла үҙ эҙен ҡалдырған Венгрия тигән дәүләт һәм ошо дәүләттең төп халҡы венгрҙар (үҙҙәрен мадъяр тип атайҙар - **Ә.З.**) бына тигән итеп йәшәп яталар. Венгрия дәүләтен ҡороуҙа мадъярҙарҙың ата-бабалары менән берҙәй көс түккән беҙҙең башҡорт уларҙың эсендә иреп юғалған, сөнки дәүләт, көс мадъярҙар ҡулында ҡала. Әле XII-XIV быуатта башҡорттар был илдә айырым халыҡ булараҡ теркәлгәндәр. Иҙриси хеҙмәттәренән күренеүенсә, башҡорттарҙың ул ерҙәрҙә венгр короленә буйһонған ярым үҙаллы (хәҙерге термин менән әйткәндә - автономиялы) үҙ дәүләттәре лә булғанлығы мәғлүм.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Гимназияла уҡыған йылдарҙа мин кешенең иң беренсе бурысы - аралашырға өйрәнеү икәнен аңланым. Кеше менән дөрөҫ мөнәсәбәттәр ҡороп аралашыу бик мөһим. Шуға, психология буйынса китаптар уҡырға яратам.*

# ТАМСЫЛАРҘА -

## Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика

**Саҡ ҡына тарих һөйләп китәйек. Башҡортостан автономия яулағас, 1924 йылда әҙәби башҡорт теле тураһында ҡарар раҫлана. 1927 йылда Өфө ҡалаһында тәүге театр техникумы асыла. 1928 йылда Ғәббәс Дәүләтшин тарафынан беренсе башҡорт теле дәреслеге яҙыла. Башҡорт дәреслектәрендә иҫке төрки теле һәм ғәрәп графикаһы үҙгәртелә, уларҙа әле яңы әлиф, әле латин, әле кириллица хәрефтәре алмашынып тора. Наҙанлыҡты бөтөрөү буйынса ликбез мәктәптәре халыҡты башлыса матбуғат һәм документтар уҡырлыҡ грамотаға өйрәтә. Өфөлә балалар өсөн башҡорт мәктәбе асыу мәсьәләһе1934-1937 йылдарҙа күтәрелә, башлап йөрөүсе зыялылар араһында ғалимдар, яҙыусылар була. Билдәле яҙыусы Зәйнәб Биишеваның бер туған апаһы Хәлимә Абдулла ҡыҙы Ҡорбанаева ла тап ошо осорҙа баш ҡалала өйҙән-өйгә йөрөп, башҡорт балаларын йыя һәм башҡорт кластарында уҡыта башлай (9-сы балалар йорто, ул саҡтағы мәғариф министры - Ибраһим Абыҙгилдин). 1944 йылда Сталиндың махсус указы менән "ил азатлығы өсөн ғүмерен ҡорбан иткән башҡорт фронтовиктарының етем ҡалған балаларын уҡытыу өсөн мәктәп-интернат асыла" (мәғариф министры - Сәғит Әлибаев). Совет илен немец фашистарынан әрсеп, Ҡыҙыл армия Берлинға ынтылған ваҡытта төпкөл башҡорт ауылдарынан етем балалар Өфөгә, 9-сы мәктәпкә килтерелә. Меңәрләгән етемдәр араһынан ни бары ике йөҙләп бала шулай ил ҡарамағына күсерелә. Күлдәге тамсы кеүек кенә булһа ла, башҡорт халҡы быдай хәстәрлек өсөн ил башлыҡтарына һәр ваҡыт рәхмәт уҡый, сөнки аслыҡтан һәм ауырыуҙарҙан һәләк булған етемдәр һаны ифрат күп була…**

**Шул замандан бирле йәшәй 1-се башҡорт мәктәп-интернаты. Ошо көндәрҙә етмеш биш йыллығын билдәләгән уҡыу йорто бөгөн Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты тип аталып йөрөй. Бик ҡатмарлы замандарҙа балалар бында иҫән-имен ҡалыу форсатын эҙләп килтерелһә, бөгөнгө уҡыусы-гимназистар ниндәй уйҙар менән йыйыла икән был уҡыу йортона? Редакциябыҙҙа уларҙың дүртәүһе менән әңгәмә ҡорҙоҡ. Һүҙ уларҙың үҙ-ара шәхсән мөнәсәбәте, уҡыуға һәм тормошҡа ҡарашы хаҡында барҙы. Тыуған яҡтарынан һәм ата йортонан үҙ теләктәре менән айырылып, республиканың иң алдынғы мәктәбендә дүртәр-бишәр йыл буйы белем алған йәштәр ниндәйерәк тормош һабағы, донъяуи әҙерлек үтә икәнен дә самаланыҡ. Унынсы класс уҡыусыһы Гөлназ Ишемғолова (Бөрйән районы Иҫке Монасип ауылынан), ун беренсе класс уҡыусылары Яҙгөл Торопҡолова (Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан), Ғәзинур Рыҫмөхәмәтов (Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылынан), Нур Собханғоловтарҙың (Стәрлебаш районы Ҡабыҡҡыуыш ауылынан) һөйләгәндәрен үҙгәртмәйенсә гәзитебеҙ уҡыусыларына ла еткерәбеҙ.**

**Шулай итеп, гимназияға ниндәй маҡсаттар алып килгән уларҙы? Маҡсаттарына өлгәшкәндәрме?**

**Гөлназ Ишемғолова:** Мин гимназияға төплө белем алырға килдем. Ағайҙарым, апайҙарым да ошонда уҡыны. Улар кеүек, минең дә баш ҡалала уҡығым килде. Ғөмүмән, бәләкәй саҡтан мине ошо гимназияла уҡыясаҡһың, тип үҫтерҙеләр, һәм берәй ваҡыт дәресемде уҡымаһам, берәй теманы ятларға йыбанһам, атай-әсәйем: "Һин бит Өфөгә, гимназияға бараһың, тырыш, уҡы!" - тигән сәм һала торғайнылар. Улар дөрөҫ әйткән: гимназияға килеүемә мин үкенмәйем, сөнки бында төрлө яҡтан үҙемде үҫтерҙем, үҙемде таптым... табып киләм!

Гимназияла төрлө яҡтан үҙебеҙҙе асыу өсөн мөмкинлектәр күп. Ауылдарҙа ундай шарттар юҡ. Шуға ла ошондай уҡ белем көҫәгән, әммә ауылда ҡалған иптәштәрем өсөн көйөнәм. Атайым менән әсәйемә рәхмәт, улар мине, башҡа атай-әсәйҙәр кеүек, "Балам һағынып һарыға һабышыр ул", тип йәлләп торманы, "Уҡы, кеше бул!" тинеләр ҙә, Өфөгә юлландырҙылар. Ысынлап та, мин бары тик уҡыуҙы ғына уйлап йәшәйем бында. Төрлө хәлдәр була, шулай ҙа уҡыуҙан башҡалары ваҡ мәсьәлә һымаҡ. Миңә бигерәк тә уҡытыусылар оҡшай. Һәр хәлдә, нимәләр тураһында ултырып һөйләшергә, серләшергә була беҙҙең уҡытыусылар менән. Улар һине аңлай, өйрәтә... Гимназияла һәр уҡытыусы балалар менән уртаҡ тел таба белә - был мотлаҡ принцип. Уҡытыусы дәрәжәһе шулай юғары ҡуйыла. Улар үҙҙәре уҡытҡан фәнде дөрөҫ итеп балаларға еткерә беләләр, үҙҙәренең дәресенә ныҡ яуаплы ҡарайҙар. Минеңсә, улар үҙҙәрен киләсәктә уҡыусылар ғына түгел, бөтә республика, бөтә халыҡ баһалаһын өсөн тырыша, сөнки улар бит милли кадрҙар тәрбиәләүселәр.

**Яҙгөл Торопҡолова:** Мин дә был гимназияға килеүемә үкенмәйем дә, иламаным да. Атай-әсәһен, ауылын һағынып илаусылар бар, әлбиттә. Минең күңелдә ундай ҡыйынлыҡ булманы. Сөнки яҡшы белем алырға теләк ҙур ине. Мин тыуған ауылымда уҡығанда ла төрлө лагерҙарға, ярыштарға күп йөрөнөм, шул саҡта ла өйҙән бер нисә көнгә айырылып торорға тура килә ине. Шуғамы икән, был юлы ла атай-әсәйҙән алыҫ булыуыма тиҙ өйрәнеп киттем. Бындағы мөмкинлектәрҙе бар тулылығында файҙаланырға тырышам. Олимпиадаларҙа, төрлө бәйгеләрҙә күп ҡатнашам. Бер ҙә йәлләмәйем үҙемде, йыбанмайым да. Уҡыуымды артабан Өфөләге йәки Мәскәүҙәге юғары уҡыу йортонда дауам итермен, тип уйлайым. Мин яңы ауырлыҡтарҙан, үҙгәрештәрҙән ҡурҡмайым, киреһенсә, миңә яңыны асыуы, танышыуы ҡыҙыҡ... Белем алыу - минең өсөн иң мөһиме.

**Ғәзинур Рыҫмөхәмәтов:** Дөрөҫөн әйткәндә, гимназияға мин артыҡ ҙур маҡсаттар ҡуйып килмәнем. Әсәй интернетта иғлан күрҙе лә: "1-се гимназияға имтихан алырға киләләр икән, барып ҡарайһыңмы?"- тине. Барҙым, имтихандар бирҙем, бишенсе класҡа ҡабул иттеләр. Уҡыным да киттем. Гимназияла ауылда уҡығанда ҡыҙыҡһынған фәндәрҙе - математика, геометрия, физиканы тағы ла төптәнерәк өйрәнеү мөмкинлектәре асылды. Логарифмалар тормошта бик кәрәкмәҫ, бәлки, ләкин уларҙы аңлау - үҙе үк бейеклек яулау ул. Был предметтарҙы аңлау тормошта еңеүҙәргә өлгәшергә өйрәтә. Тормош ҡыйынлыҡтарын да еңергә мөмкин икән дәбаһа, тип аптырайһың хатта ҡай ваҡыт.

Унан һуң, эшләргә генә түгел, ял итергә лә өйрәнеү кәрәк. Гитарала, пианинола уйнау мине ял иттерә. Гимназияла уҡыған йылдарҙа мин кешенең иң беренсе бурысы - аралашырға өйрәнеү икәнен аңланым. Кеше менән дөрөҫ мөнәсәбәттәр ҡороп аралашыу бик мөһим. Шуға психология буйынса китаптар уҡырға яратам. Был эштә миңә тағы бик ҙур ярҙамсы һәм кәңәшсе - ул интернет. Теләгән һорауға яуапты, уҡырға теләгән китапты "Интернет" тигән дуҫ табып бирә. Һорауҙарға яуап эҙләгәндә үҙеңдең дә уйланыуың, ғәмәли мәсьәләләр сисеүең, күп яҙыуың файҙалыраҡ. Шундай юл менән асылған фән, табылған белем тәрәнерәк һәм ҡәҙерлерәк кеүек. Тормошто аңларға ҙур аҡыл көсө кәрәк, ундай аҡыл башында булмаһа, бик ауыр. Шуға ла һәр мәсьәләнең төп асылын, ысын мәғәнәһен аңларға тырышыу мотлаҡ. Тормошта улар бөтәһе бергә буталған, ҡушылған, ә китаптар уларҙы айырырға өйрәтә. Кешеләрҙең бер-береһенә мөнәсәбәтен аңлау - иң ҡыйыны, имеш. Минең уйымса, бөтә нәмә йәмғиәттә йәшәгән закондарға, үҙ-ара аралашыу тәртибенә, ғаиләләге төп тәрбиәгә барып тоташа...

Ҡыҫҡаһы, мин гимназияға математик булып килгәйнем, философия, психология, социология менән ҡыҙыҡһыныу алға сыҡты. Бәлки, был ваҡытлыса ғыналыр. Кешенең психологияһы бер ниндәй законға-тәрбиәгә лә һыймаҫҡа, баш бирмәҫкә тырыша. Уны тәртипкә һалыр өсөн йәмғиәт, дин закондары уйлап сығарылған. Ләкин был да аҙ. Ә китаптар, бигерәк тә классик әҫәрҙәр, "Һуғыш һәм солох" һымаҡ романдар беҙгә һәр персонаж аша ошо психологик мөнәсәбәттәрҙе аңлата.

**Нур Собханғолов:** Гимназияға мин үҙемде табырға килгәнмендер. Ауылда алған белемдән тыш, яңы ғилем эҙләгәнмендер. Ысынлап та, өмөтөм аҡланды, тип уйлайым. Гимназиялағы тормош беҙҙе сыныҡтыра, йәшәргә өйрәтә. Бындағы шаулы тормош миңә атай-әсәйемде һағыныу тойғоһон еңергә ярҙам итә. Кеше үҙаллы йәшәргә тейеш, ләкин тыуған ғаиләһенән айырылып та китергә тейеш түгел. Үҙенсәлекле тормош алып барыла гимназияла. Бөтә эштәрҙе үҙең башҡарырға тырышаһың, һорауҙарыңа яуапты үҙең эҙләп табаһың. Шулай итеп сыныҡаһың.

Гимназияға беҙ өс иптәшем менән бергә килдек. Бергә уҡыйбыҙ, бергә ҡайтып-китеп йөрөйбеҙ. Атай-әсәйҙәр әйтмешләй, бер-беребеҙгә - күҙ-ҡолаҡбыҙ. Ауылда ла күп дуҫтарым ҡалды. Улар менән тығыҙ бәйләнеш тотабыҙ. Бер-беребеҙгә ярҙам итергә тырышабыҙ. Ауылға ҡайтҡан һайын улар мине йылы ҡаршы ала.

"Тыуған ауылыңдың киләсәген уйлағаның бармы?" тип һорай минән ауылдағы дуҫтарым. Әлбиттә. Бәләкәй саҡта ауылым тирәһендә берәй завод төҙөргә һәм ҡалалағы һымаҡ матур, яңы өйҙәр төҙөргә ине, тип хыяллана инем. Шулай иткәндә, беҙҙең ауыл үҫеп китер, мәктәпкә лә күп балалар килер, ауылда эш булыр, тип уйлағанмындыр инде. Олатайым һөйләүенсә, элек бит беҙҙә колхоз гөрләп торған. Бөтә халыҡ эшләгән. Шул замандарҙы ҡайтарғы килеп китә. Сөнки көслө хужалыҡ булһа, кешеләргә эш булыр ине. Республикабыҙ ҙа алға китер ине. Дәүләт кимәлендә ауылдарҙы нығытыу программалары булдырыу мотлаҡ кәрәк, тип уйлайым. Хәҙер кешеләрҙең күбеһе ҡалаға китә.

Шулай уҡ ҡайһы бер уңғандар ауылдарҙа ла бына тигән итеп йәшәй башланы. Минең дә шундай теләк бар: ҙурайғас, йәғни махсус юғары белем алғас, тыуған яғымда, ауылда йәшәргә һәм ауылды үҫтерергә! Сөнки миңә ауылда бик тә рәхәт, унда мин үҙемде иркен тотам, үҙемде ошо ерҙең хужаһы итеп тоям. Ауыл кешеһе киләсәктә эшле, белемле буласаҡ, тип өмөт итәм. Гимназиям миңә бөтөн ошо хыялдарымды тормошҡа ашырыр белем, үҙ-үҙемә ышаныс, киләсәкте күҙаллар ныҡлы ҡанаттар бирә.

**Яҙгөл Торопҡолова:** Гимназия миңә нимә бирҙе? Иң беренсенән, тап бында уҡырға килгәс, мин үҙемдәге оялсанлыҡты еңергә өйрәндем. Ауылда йәшәгәндә кешеләр менән һөйләшкәндә лә, хатта дәрестәрҙә яуап биргәндә лә оялыу тигән нәмә миңә бик ныҡ ҡамасаулай ине. Үҙем былай ҡурҡаҡ та түгелмен, ләкин һис кәрәкмәгәндә ҡаушай ҙа ҡуя инем. Гимназияла бөтәбеҙ ҙә асыҡтан-асыҡ аралашабыҙ, көнө-төнө бергәбеҙ, тигәндәй. Асыҡ булыу яҡшы, әлбиттә. Нимәләр әйткең килһә, әйтәһең дә ебәрәһең, оялып тормайһың. Икенсенән, гимназия мине көслө булырға, ниндәй генә ауырлыҡтар булғанда ла һынмаҫҡа өйрәтте. Ҡайһы ваҡытта сабыр итергә, юҡҡа-барға ҡыҫылмаҫҡа ла өйрәндем мин. Өсөнсөнән, элек берәй эш килеп сыҡмаһа, уныһын ташлайым да, икенсе эшкә тотона инем. Ә хәҙер бер башлаған эште аҙағына тиклем еткереп ҡуям. Үҙемде-үҙем шулай тәрбиәләйем. Уҡытыусыларым ғына түгел, бергә уҡыған ҡайһы бер ныҡышмал, маҡсатҡа ынтылышлы, үҙ һүҙе, үҙ фекере булған иптәштәрем дә миңә шундай матур өлгө бирә.

Киләсәктә үҙеңдең тыуған яғың, Башҡортостаның өсөн ниҙәр эшләргә уйлайһың, тигән һорауҙы беҙгә уҡытыусылар, тәрбиәселәр йыш бирә. Беренсенән, йәшәргә һәм эшләргә бары тик Башҡортостанда ҡаласаҡмын. Врач һөнәре үҙләштереп, ауылға ҡайтып, үҙемдең шәхси клиникамды асырға хыялланам. Сөнки ауылдар беҙҙең ярҙамға айырыуса мохтаж бит.

**Гөлназ Ишемғолова:** Иң беренсе, гимназия миңә үҙаллы булырға, үҙ көсөм менән эшләргә өйрәтте. Икенсенән, кешеләр менән аралашып, уларҙан да ниндәйҙер ярҙам, кәңәш алырға кәрәк икәнен беләм хәҙер. Мин дә элек оялсанырaҡ, үҙ күңелемә бикләнгән бала булдым, башҡалар менән аралашып бармай инем. Гимназия минән асыҡ кеше яһаны. Үҙ фекеремде әйтергә, уйлап һөйләргә, башҡалар алдында

***✓ Рәми ағай бөгөнгө йәштәрҙе тыңлап, минең мәктәбемдә зирәк аҡыллы егеттәр һәм ҡыҙҙар үҫә, тип ғорурланыр ине. Улар ил алдында үҙ бурыстарын аңлай, тимәк, киләсәккә өмөт бар, тиер ине.***

# ДИҢГЕҘ КӨСӨ

## гимназия-интернатының 75 йыллығы уңайынан

сығыш яһарға өйрәндем. Үҙеңдең төрлө һәләттәреңде асырға ярҙам итә икән ул һөйләй белеү, асыла алыу. Йөрәгең ҡыйыулана икән. Быны мин элек белмәгәнмен. Мәҫәлән, мин хәҙер бейейем дә, ҡумыҙҙа ла уйнайым, спорт менән дә шөғөлләнәм, журналистика менән дә ҡыҙыҡһынам - "Аманат" журналы һәм "Йәншишмә" гәзитенең йәш хәбәрсеһемен. Шиғырҙар яҙам. Ҡыйын ваҡыттарҙа мин уйымды күңелемдә йәшереп тотмайым, ә шиғыр юлдарына күсерәм. Шулай ижад эшенә ылығып киттем.

Гимназияла уҡыу ваҡытыңды бушҡа үткәрмәүҙе, ныҡ тырышлыҡты талап итә. Шулай уҡ түҙемлекте. Мәҫәлән, бер теманы аңламайһың икән, ҡат-ҡат уҡыйһың, уйланаһың, башҡаларҙы өлгө итеп алаһың. Кемдер бит ул теманы аңлаған, рәхәтләнеп мәсьәлә сисә, һөйләй... Һин дә уны аңларға тейешһең. Теманы ныҡышмаллыҡ менән өйрәнеп, үҙеңдең һорауыңа яуап тапһаң, был инде үҙе бер еңеү була. Ә еңеүҙәргә һинең маҡсатҡа ынтылышлылығың һәм... теләгең килтерә. Ҡайһы саҡта иптәштәрем менән шундай диалог ҡорабыҙ: "Министр булалаһыңмы?" "Теләһәм, булам!" "Теләһәңме, әллә ҡуйһалармы?" "Теләһәм генә! Сөнки иң тәүҙә теләк һәм маҡсат ҡуйыу кәрәк..."

**Артабан йәштәр үҙара ирекле һөйләшеүгә күсеп китә. Уларҙы тыңлағанда йәшлек ауазы, ҡояшҡа ҡарап донъяға бәреп сыҡҡан шишмәләр сылтырауы кеүек ҡыҙыҡлы һәм серле өмөттәр тауыш бирә...**

**Гөлназ Ишемғолова:** Интернат тормошо бик ҡыҙыҡ ул. Барыһы ла бергә ҡайнаша, һәр кемдең ҡылығы күҙ алдында. Бер төрлө ҡағиҙә, тәртипкә буйһонаһың. Шуға ла бер төрлө ғәҙәттәр барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, дәрестәрҙе бергә-бергә әҙерләгәс, кемдәндер өйгә эште күсереү ғәҙәти хәл һымаҡ ҡабул ителә. Дөрөҫөн әйтәм, мин өйгә эштәрҙе үҙалы эшләргә тырышам, кемдәндер күсереү бик һирәк була, минең үҙемдән күберәк күсерәләр. Ә һин, Яҙгөл, башҡаларҙан күсерәһеңме?

**Яҙгөл Торопҡолова:** Күсергәнем юҡ, мин үҙемә генә ышанам.

**Ғәзинур Рыҫмөхәмәтов:** Мин ауылда уҡығанда башҡаларҙан өйгә эш күсермәй торғайным, ә гимназияла өйрәтеп алдылар.

**Нур Собханғолов:** Өйгә эште күсереү - экстремаль ситуация, шундай хәлдән сыға белергә лә кәрәк. Ҡайһы берҙә күсермәй булмай. Әммә быға ныҡ өйрәнеп, бирелеп китһәң - бөттөң. Үҙеңдең аҡылыңды күнектереү кәрәк. Башҡалар аҡылына таянып йәшәргә ярамай. Мин бик тә бик өлгөрмәгәндә - күсерәм. Ләкин мин аңлап күсерергә тырышам, сөнки уҡытыусылар бит һине таҡта янына сығарып һорауы ла мөмкин...

**Йәшлек юлы икеләнеү, асыш, һоҡланыуҙар аша үтә. Бындай күңел күтәрелештәре кешенең мөмкинлектәрен донъя менән таныштыра, берләштерә, ҡаршыла упҡындар барлығын иҫкәртә... Әммә кешемен тигән кешене икеләндермәй торған хәҡиҡәт - ул туған тел. Йәштәр ҙә шулай ти.**

**Гөлназ Ишемғолова:** Беҙ йыш ҡына бөгөн ниндәй телдәрҙе яҡшылап өйрәнергә тип бәхәсләшәбеҙ. Әлбиттә, иң тәүҙә туған башҡорт телен төплө белеү мотлаҡ. Ул беҙҙең йөрәктә. Артабан рус телен яҡшы белеү мөһим. Ҡытай телен, инглиз телен өйрәнеү яҡшы. Сөнки Ҡытай иле бөгөн ныҡ үҫешә, донъяны яулай бара. Хәҙер гимназияла бәләкәй кластар ҡытай телен дә өйрәнә.

**Ғәзинур Рыҫмөхәмәтов:** Ә минең инглиз телен яҡшылап өйрәнгем килә. Бөтә донъя инглиз телендә һөйләшә бит. Әлбиттә, мин үҙемдең башҡорт телемде яратам. Бөтә хис-тойғоларымды башҡортса матурыраҡ итеп әйтә алам. Бәлки, бер заман башҡорт телен дә бөтә донъяла өйрәнерҙәр әле. Ана бит, француздар, ирландтар башҡорт телен дә үҙҙәренеке һымаҡ иң боронғо тел тип иғлан иткән.

**Яҙгөл Торопҡолова:** Әлбиттә, гимназияла беҙҙә иң тәүҙә туған телебеҙҙе яратырға өйрәтәләр, уның мөһимлеген күңелгә һеңдерәләр. Шулай уҡ уҡытыусыбыҙ беҙгә инглиз теленең кәрәклеген дә иҫкәртә. Инглиз теле ныҡ ауыр түгел, уны еңел генә өйрәнергә була.

**Гөлназ Ишемғолова:** Беҙҙең класта шундай ҡағиҙә бар: инглиз теле дәресендә тик инглизсә генә һөйләшергә, рус теле дәресендә - тик русса. Ул мейегә яҡшы күнекмә була. Ә ҡалған ваҡытта беҙ, әлбиттә, башҡортса аралашабыҙ.

**Ғәзинур Рыҫмөхәмәтов:** Миңә телде ныҡлап үҙләштерергә инглизсә сериалдар ҡарау ярҙам итә...

**Был балаларҙың тормошо тотош ижадтан тора бит. Уларҙың шуны аңлауы, тормоштоң һәр мәленә ижади ҡарауҙары һоҡландыра...**

**Гөлназ Ишемғолова:** Әйҙәгеҙ, ижад тураһында һөйләшәйек. Минеңсә, ижад итеү - ул ниндәйҙер идеалға ынтылыу. Мин үҙемсә ижад итәм, шиғырҙар, мәҡәләләр яҙам. Ул ижадтың бер төрө генә. Әммә башҡаларҙың ижады ла миңә ҡыҙыҡлы - ғалим, архитектор, диңгеҙ капитаны... Мәҫәлән, врачтарға, артистарға ла гел яңылыҡҡа, тимәк, ижадҡа ынтылырға кәрәк.

**Ғәзинур Рыҫмөхәмәтов:** Был һорауға тиҙ генә яуап биреп булмай... Ниндәйҙер ҙур маҡсатҡа табан ынтылышты ижади ҡарашһыҙ тормошҡа ашырып булмай, минеңсә. Мәҫәлән, һүрәт төшөрөүселәрҙе күҙ алдына килтерәйек. Улар донъяны ҡәләм-ҡағыҙ аша күрһәтә. Ғәләмәт бер ижади һәләт. Спортсылар яңы рекордтар ҡуйып ижад итә. Был да һоҡланғыс. Артист, врач... Һәр береһенең үҙ эше, үҙ бурысы, ләкин ул эштәрҙе лә ижади ҡарашһыҙ үтәп булмайҙыр. Мин илһөйәрлек тураһында ла шулай уйлайым. Илһөйәр булмағандар нисек йәшәй, нисек уйлай, нисек ижад итә икән? Ҡыҙыҡ бит. Ижадҡа юл ҡатмарлы. Илең тураһында уйла, тиҙәр беҙгә. Аңлайым, ил тураһында уйларға кәрәк. Ләкин башта ана шул ижади фекерләрлек итеп үҙеңде үҫтерергә кәрәк. Бер нәмә лә эшләй, уйлай белмәгән наҙан кеше илгә файҙа килтерә аламы ни?..

**Нур Собханғолов:** Мин дә Ғәзинур менән килешәм. Тәүҙә белем ал, үҙеңде камиллаштыр, илгә кәрәкле яҡшы белгес бул. Ватаныңды, тыуып-үҫкән ереңде хәстәрләрлек булһын һинең ғәмәлдәрең. Ул саҡта тамаҡ ярмай ғына хеҙмәт итәһең дә йөрөйһөң инде тыуған ереңә.

**Яҙгөл Торопҡолова:** Хәҙер күп йәштәр ситкә китеүҙе өҫтөн күрә. Етмәһә, үҙенең ошо ҡылығын аҡларға теләгәндәй, йәшәйешебеҙҙе, халҡыбыҙҙы яманларға ла тартынып тормағандар бар. Мин ундайҙарҙы аңламайым. Ашаған табағыңа төкөргәнсе, тыуған ереӊ өсөн үҙең ниҙер эшлә һуң, тип әйтке килә ундайҙарға. Минең үҙ еремдә йәшәгем, эшләгем килә. Алла бирһә, балаларым да бында үҫәсәк. Шуның өсөн мин республикамды күтәреүгә үҙ өлөшөмдө индерергә тейешмен.

**Ғәзинур Рыҫмөхәмәтов:** Ҡайһы берәүҙәр туҡтауһыҙ хөкүмәтте, дәүләтте әрләр сәбәбен табып ҡына тора, ләкин үҙҙәре үк тирә-яҡты бысратып, сүп-сар ташлап китә, яҡындары менән талаша, эшен насар башҡара. Үҙенең етешһеҙлектәрен күрмәй ул, бар бәләһен икенсе кешеләргә япһара. Ошондай алама ғәҙәткә ингән, талаш-тартыштан тыныслыҡ тапҡан кешеләр ҙә бар әйләнә-тирәлә. Мин халыҡтың аңын боҙа торған зарланыу, ошаҡлау, хурлау, кәмһетеү кеүек ҡылыҡтарҙы закон менән тыйыр инем... Бындай негатив энергияны таратыусылар - кешеләрҙең былай ҙа ҡыҫҡа ғүмерен тағы ла ҡыҫҡарта. Ундайҙар менән йәшәп булмай, ил дә алға бармай. Позитив энергия ғына кешене эшкә, көрәшкә, ижадҡа алып бара. Гимназияла беҙҙе позитив энергия менән йәшәргә өйрәтәләр. Күптәрҙе яңынан тәрбиәләйҙәр. Ғүмер юлын ошондай уҡыу йортонан башлауыбыҙ - оло бәхеттер ул...



**Шулай итеп, тормош диңгеҙе шаулай. Тамсыларҙан диңгеҙ тәме килә. Тамсыларҙа диңгеҙ шауы, хәтере, хыялы сағыла. Башҡортостан буйлап төрлө төбәктәрҙән йыйылып, бер көймәгә тейәлеп, ил-халыҡ диңгеҙе буйлап сәфәргә сыҡҡан йәш балалар ошо илгә һәм халыҡҡа хеҙмәт итерлек ҡеүәтле тулҡын булып берләшергә, шуның өсөн һәр бер тамсыны көсәйтергә, белем һәм аҡыл тупларға теләй. Һәр тамсыла диңгеҙ тәме булған кеүек, диңгеҙҙә лә - тамсы көсө була.**

**Утлы һуғыш ҡойононда атайһыҙ ҡалған етем, әммә еңелмәҫ быуын вәкиле, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов та "ерле халыҡтың балалары өсөн махсус асылған мәктәпкә" килеп, белем ала, ошо ил хәстәренә рәхмәт менән яуап ҡайтарырға һүҙ бирә һәм шул антына ғүмере буйы тоғро ҡалып, халҡы намыҫын, халҡы рухын һаҡлаусы-яҡлаусы булып үҫә. Ул үҙенең йөрәк көсөн ижад эшенә биреп, иленә һәм халҡына ғәҙеллек даулап, типһә тимер өҙөр сағында шул юлда ҡорбан була. Әммә Рәми ағай бөгөнгө йәштәрҙе тыңлап, минең мәктәбемдә зирәк аҡыллы егеттәр һәм ҡыҙҙар үҫә, тип ғорурланыр ине. Улар ил алдында үҙ бурыстарын аңлай, тимәк, киләсәккә өмөт бар, тиер ине.**

**Ҡыҫҡаһы, етмеш биш йыллыҡ юбилейын билдәләгән 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты үҙенең башланғыс "ойотҡо"һон онотмаған: башҡорт халҡының аңлы һәм булдыҡлы улдары һәм ҡыҙҙары үҙҙәрен кеше итеп тәрбиәләргә, белем алырға, илгә файҙалы граждандар булырға ынтыла. Беҙҙеңсә, шунан артығы кәрәкмәй ҙә. Һәр хәлдә, был уҡыу йортонда киләсәктә лә, бер генә заманда ла был юлдан тайпылыу булмаҫ, тип ышанайыҡ.**

**Киниә МӘЗИТ.**

***✓ Муса ла иптәштәренең күтәрмәләп тороуын ишетә, уларҙың теләген аңлай, ләкин баянан бирле Йосопто ергә йығырға күңеле тартмай ҙа ҡуя. Хатта һәр бер ташын һағынған тыуған ерҙең кешеһен атып бәрергә нисек йөрәгең етһен?***



**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН**

# ҠОТОЛОУ ЮЛКАЙҘАРЫН ТАПМАҺЫМ

**(повестан өҙөк)**

Айсаның алдатып: "Лесник!" - тип ышыбырлап һөрән һалыуы булды, Мусаның ырғып тороп әлеге бүрәнәнең йыуан башын арбаға алып ташлауы булды. Был хәл шул тиклем көтөлмәгәндә һәм тиҙ булды, хатта ул: "Ниңә мин лесниктан ҡурҡырға тейеш һуң әле, бүрәнәне аҡса түләп ҡырҡабыҙ бит", - тип уйларға ла өлгөрмәй ҡалды.

Икенсе ваҡиға әлеге өйҙөң бураһын мүккә күтәргән саҡта булып үтте. Өмәлә кеше байтаҡ ине, сөнки мәрхүм Лут үҙе халыҡҡа зыянһыҙ булды, шуға ла уның уландарына эскерһеҙ ярҙам итеп, күтәрмәләп кенә торалар. Ғөмүмән, ҡоролған һәр яңы нигеҙ үҙенә күрә бер байрам бит ул: хужа өйлө булам, тип ҡыуана, өмәселәр ауылдарының ҙурайыуынан, ҡеүәт йыя барыуынан ғорурлыҡ тойғоһо кисереп шатлана.

Әйтеүебеҙсә, кеше күп ине өмәлә: олораҡтар кәңәш биреп тороп өсөн генә лә үҙҙәренең шунда булыуын мотлаҡ тип һанаған, ә ир уртаһы булған олпат аҙаматтар эштә ҡайнай: ҡайһыһы мүк алып биреп тора, ҡайһыһы уны тигеҙ генә итеп бүрәнә өҫтөнә түшәй, икенселәре тейешле бүрәнәне алып килеп һала бара. Күңелле көлөшөү, шаяртыу, мәрәкәләшеү тауыштары зыңлап тора - өй күтәреүҙең йолаһы шулай: ундай нигеҙҙән ҡыуаныс өҙөлмәй.

Бураның биш рәтен мүккә күтәргәс, ял итергә ултырҙылар. Шул саҡ өмәселәр эргәһенә текә баҫып Мөхәррәм ҡарт килде. Ауылдың элекке старостаһын сәләменә ҡаршы сәләм биреп ҡаршы алдылар.

- Күтәрәһегеҙме? - тине ул ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып бура яғына ҡарай-ҡарай.

- Күтәрәбеҙ, - тиештеләр.

- Килешә-ә, - тип һуҙҙы әүәлге староста. Мөхәррәмдең көнсөл, тар эсле әҙәм икәнлеген, уның әсе теллелеген яҡшы белгән өмәселәр ҡарттың бер тегеләй, бер былай сығып йөрөүен күреп, шым ғына күҙәттеләр. Һәр береһенең башында, моғайын: "Был ниҙән сей сығарырға белмәй йөрөй", - тигән уй булғандыр. Эт тиҙәк ашамаһа, күңеле булмай тигәндәй, Мөхәррәм ысынлап та оҙаҡ көттөрмәне.

- Ниңә урамды тарайтып, нигеҙегеҙҙе бүтән өйҙәр рәтенән алғараҡ сығарып һалғанһығыҙ? - тине ул башҡа бәйләнер сәбәп тапмағас.

- Урамға һыймайһыңмы әллә? - тип яуап бирҙе уға үҙен хәҙер инде тулы хужа итеп тойған Айса.

Былай ҙа йөҙө сирылып, саҡ ҡына йөрөгән Мөхәррәмгә шул һүҙ етә ҡалды.

- Һыймайым шул! - тип шундуҡ зитлыҡҡа тартты ул. - Мин һеҙҙең шикелле оронсаҡһыҙ кешеме? Һеҙ генә ул, ыштанһыҙ осаға ҡайыш бау һымаҡ итеп, өй күтәртеп ятаһығыҙ. Йә, йыйған йыһаҙдарығыҙ иҫке өйөгөҙгә һыймай башланымы әллә? Тәкәббер булмаһа, хәйерсе буламы ни ул, күкрәгән киргән булып атайһығыҙ йөрөй торғайны, уның урынына һеҙ ҡалғанһығыҙ икән. Нимәгеҙгә шул хәтле...

Тик ул һүҙен әйтеп бөтөрә алманы - ярһыуынан ҡара көйгән Муса уның башындағы түбәтәйен һыпырып алды ла һыңар ҡулы менән бураның бер мөйөшөн күтәреп, бабайының баш кейемен бүрәнә аҫтына тыҡты. Ҡобараһы осоп, ҡапыл телһеҙ ҡалған Мөхәррәм ҡарт түбәтәйен бура аҫтынан алырға тыпырсынды: ҡул менән күтәрергә тырышыуҙан рәт сыҡмағас, мөйөш аҫтына күшәк тығып бүрәнәләрҙе көскә ҡалҡытты. Ҡалҡытыуын ҡалҡытты ла, түбәтәйҙең йәне юҡ - үҙе һикереп төшә алмай. Ахырҙа ул ярҙам һорап, мыйыҡ аҫтарынан йылмайышып тамашаны күҙәткән өмәселәргә өндәште:

- Түбәтәйҙе алығыҙ әле, Хәлил, Ҡунаҡ-ҡужа!

Бер кем дә ҡыбырламаны. Өмәселәр уның хурлығын күреүҙән кинәнеп ултыра бирҙеләр. Һуңынан әллә нисәгә төрләнеп, тирә-яҡҡа таралаcаҡ был ваҡиғаны Муса үҙе тамамланы: баштағыса, һис бер һүҙ өндәшмәйенсә тәүҙә Мөхәррәмдең ҡулынан күшәкте тартып алды, шунан баяғыса һыңар ҡулы менән бураны күтәреп, түбәтәйҙе хужаһының аяҡ аҫтына һыпырып төшөрҙө. Был дәһшәтле кисәтеү ине. Уны бөтә тәрәнлегендә аңлаған Мөхәррәм мәсхәрәнән, оятынан ер булып, түбәтәйен кейә-кейә, йәһәтерәк тайыу яғын ҡараны.

Был хәтирәләр уның башынан: "Ауылыңдың намыҫына тейҙеләр, әгәр егет булһаң, уны яҡлайһың", - тигән һүҙҙәр яҡындағы ҡарағай урманынан шаңдау булып әйләнеп килгән арала үтеп киттеләр. Ауыл намыҫын тик мөртәт кенә яҡламаҫ - Муса түңәрәк уртаһына сыҡты. "Әһә, әһә, әфисәр көрәшергә булды!.. Ну, Йосоп, түҙ инде был яғына!.. Уаяннай сыҙатмаҫ... Белмәйем", - тигән тауыштар аҫтында көрәшселәр таҫтамалдарын бер-береһенең биленән уратып алдылар. Көрәш башланып китте. Йосоптоң биле ныҡ, кәүҙәһе сөгөн шикелле ауыр ине, шулай ҙа Муса шундуҡ һиҙемләне: хәселдә һалғанда еңеп булмаҫлыҡ егет түгел. Йосоп иһә үҙенә ҡаршы сыҡҡан кешенең ябай ғына түгеллеген һиҙҙе, билгә ҡул һалыуына, тәненең ҡатылығына ҡарап бының оҫта һәм ғәйрәтле көрәшсе икәнен белде.

Көрәшеүселәр бер-береһенең уяулығын һынап, таҫтамалдарын тартып тотоп, түңәрәк эсендә бер талай әйләнделәр. Сыҙамлыҡтары юйыла башлаған тамашасылар ҡысҡырыша башланы:

- Йә, Йосоп, нимә ҡарап йөрөйһөң?

- Ҡыбырла инде!

- Билен айма!

Уларға ҡушылып Шаһибал йәүкәләй:

- Бирешмә, Муса! Күтәреп бәр!

Көрәш ҡыҙҙы. Тамаша ҡарарға тирә-йүндәгеләр ағылды, Усмандар ҙа килеп етте. Һәр береһе үҙ батырына ҡысҡырып кәңәш бирә, күтәрмәләй, дәртләндерә. Йосоп барыһын да яҡшы ишетә, Мусаны күтәреп кенә ергә бырақтырырға ниәте бар ҙа, тик ҡайҙа һуң быны эшләрлек дарман? Бында: "Билен айма! Ҡыбырла! Күтәреп бәр!" - тип аҡыл өйрәтеп тороу ғына етмәй. Муса ла иптәштәренең күтәрмәләп тороуын ишетә, уларҙың теләген аңлай, ләкин баянан бирле Йосопто ергә йығырға күңеле тартмай ҙа ҡуя. Хатта һәр бер ташын һағынған тыуған ерҙең кешеһен атып бәрергә нисек йөрәгең етһен? Йосопто оҙатырға килгәндәрҙең рухын ҡалайтып һындырмаҡ кәрәк? Улар бит батырҙарын һуғышҡа оҙата, әйҙә, ул яҡташтары күңелендә шулай батыр булып ҡалһын.

Шулай ҙа көрәштең бер мәлендә Йосопто күтәреп күкрәгенә һалды ул. Тамашасылар "гөж" итеп ҡалды, алыштың нисек бөтөрөндә берәүҙең дә шиге юҡ ине һымаҡ. Ләкин Муса дәғүәсеһен ҡыҫып бер аҙ йөрөттө лә, ташлай алмаған булып, кире төшөрҙө. Бынан һуң инде көрәште ҡарап ултырғандар араһынан шундай һүҙҙәр ишетелә башланы:

- Булмай быларҙан!

- Эйе, ниңә көнө буйы көрәшмәйҙәр икән.

- Ғәйрәт бер иш, ала алмайҙар.

Алыш берәүҙән дә еңмәүе менән тамамланды, ярайһы уҡ арыған көрәшселәр түңәрәкте ташлап сыҡты. Ҡыҙыҡ өсөн генә башланған был көрәш әҙерәк булһа ла Мусаның һағыныуын баҫҡандай итте, әйтерһең, ул күкрәгенә Йосопто сөгөндәй ауыр кәүҙәһен түгел, ә тыуған ерен ҡыҫты, уның күңел елкендерер тартыу көсөн дә, ҡырыҫ таңһыҡлығын да тойоп өлгөрҙө.Бер аҙҙан эшелон начальнигының: "По вагонам!" - тигән һөрәне яңғыраны. Эсенә тыңҡыслап һалдат һәм һуғыш ҡорамалдары тейәлгән состав теләр-теләмәҫ кенә ҡуҙғалып, Көнбайышҡа табан шыуышты.

...Коридорҙа, ваҡыттың ҡотолғоһоҙ икәнлегенә ишара яһап, надзирателдәрҙең аяҡ тауышы ишетелә. Улар сәғәт йөрөшөн хәтерләтеп, бер яҡыная, бер алыҫая: тап-топ, тап-топ.

...Тыуған илгә 1917 йылдың аҙағында ғына, өйҙән сығып киткәненә теп-теүәл биш йыл тигәндә аяҡ баҫты Муса. Империалистик һуғышты Румыния Балканында өс оҙаҡ йыл буйы окоп йылытып үткәргән унтер-офицерҙың яурындарында батша армияһы погондары менән бергә фронт михнәттәре һәм заяға үткәрелгән ғүмер ята ине.

Румын фронты мәғәнәһеҙ ҡан ҡойошҡа, бер ниндәй маҡсатһыҙ һуғышҡа, ғөмүмән, батшалыҡҡа ҡаршы алып барылған өгөт иң киң йәйелдерелгән үҙәктәрҙең береһе ине. Армияла революцион рухлы офицерҙарҙан, алдынғы ҡарашлы һалдаттарҙан торған йәшерен агитацион ойошма үҙенең эшен ныҡ йәйелдереп ебәргәйне. Шул ойошма ағзаларының береһе - күп төшөнсәләргә Мусаның күҙен асҡан кеше поручик Петр Авдеев булды.

Уның менән ҡыҙыҡ ҡына танышып киттеләр. Мусаны күптән күҙәтеп, һынап йөрөгән Авдеев бер көндө һүҙ башланы.

- Һин башҡорт бит әле? - тип һораны ул бер саҡ аулаҡта тап килеп.

- Эйе.

- Ишеткәнем бар. Башҡорттар бик яусыл, ирек һөйөүсән халыҡ, тип һөйләйҙәр.

Муса уға батша хөкүмәтенең Башҡортостанда йәйелдергән ҡот осҡос колониаль иҙеүе, уның аяныслы һөҙөмтәләре тураһында, халыҡтың йөҙәр йыл буйы алып барған тиңһеҙ көрәше хаҡында һөйләп ташларға уйлағайны, тик урыҫ менән һаҡыраҡ булырға кәрәк икәнен иҫенә төшөрөп, тыйылып ҡалды:

- Элегерәк шулай булған шикелле, - тигән яуап менән сикләнде.

- Әйткәндәй, милләттең бөтә рухы, бар булмышы - ижадында. Бына мин йәш саҡтан уҡ Рәсәйҙә йәшәүсе халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады менән ҡыҙыҡһынам. Йәғни әкиәт, йыр, легенда, төрлө ғибрәтле тарих. Аңлайһыңдыр?

- Төшөнәм.

- Йә, берәй башҡорт әкиәтен һөйләп ишеттер әле, - тип һүҙҙе көтөлмәгән юсыҡҡа борҙо поручик.

Муса саҡ көлөп ебәрмәне: бында һуғыш, ҡыйралыш, ә был сәйер поручик балалар шөғөлөнә ҡағылғанды һорашып маташа. Тапҡан ваҡыт! Бында тупаҫлыҡ, вәхшилек, ә әкиәт донъяһы - мөғжизә, тылсым һәм гүзәллек. Нисек итеп бынауында, үҙ илеңдән ете диңгеҙ, ете тау арьяғындағы сит-ят ерҙә, ауыҙ тултырып әкиәт һөйләп ултырмаҡ кәрәк? Тәүҙә ул баш тартырға сәбәп эҙләне:

- Беҙҙә әкиәтте кис, йоҡо алдынан балаларға ғына һөйләйҙәр, - тип ҡотолмаҡсы булды.

- Шундай йоламы ни?

- Йола шул.

- Ярай, йоланы бер боҙғандан әллә нәмә булмаҫ, һөйлә. Үҙеңдең дә көнөң үтеп ҡалыр, бала сағыңды ла иҫләп алырһың.

- Улай бик теләгәс, һөйләйем инде, тыңла, - тип тартыныңҡырап башлап китте Муса, - борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай...

Ул Авдеевҡа әҙәһенән күп тапҡыр ишеткән "Ҡамыр батыр" әкиәтенең эстәлеген һөйләп бирҙе.

- Да-а, - тип һуҙҙы поручик уны тыңлап бөткәс, - һәйбәт әкиәт. Халыҡтың гениаль булыуына һоҡланырға ғына ҡала. Әйт әле, Мортазин, Ҡамыр батыр дөмөктөргән дейеү кем ул?

- Кем булһын, дейеү, яуыз зат.

- Тормошта бармы ул, нисек уйлайһың?

- Осратҡаным юҡ.

- Осратмаясаҡһың да. Уны яҡыныраҡтан эҙләргә кәрәк. Әкиәтте ижад итеүсе башҡорт дейеүҙең кем икәнен яҡшы белгән.

- Кем һуң ул?

- Николай батша.

- Туҡта әле, боронғо әкиәтте уйлап сығарыусы Николайҙы ҡайҙан белһен?

- Ижадсы өсөн, бәлки, ул Иван Грозный булғандыр, ә һинең менән минең өсөн - Николай Романов. Һөйләгән әкиәтеңдең бөтә ҡиммәте шунда: ер йөҙөндә иҙеүселәр бар саҡта ул үҙенең әһәмиәтен юғалтмаясаҡ.

* * *

Биш йыл тигәндә тыуған еренә аяҡ баҫҡан Муса мәғрур түбәләрен ҡар ҡаплаған тауҙарын, улар итәгенә һыйынған ауылын ҡосағына алырҙай булып һағыныуҙан күңеле тулышып ҡайтып инде. Ҡалғандар иҫән-һау: инәһе ҡартайып, әбей ҡорона кергән, Айса ағаһы донъяуи мәшәҡәткә күмелгән, ҡустылары үҫеп, танығыһыҙ булып киткән. Тик әҙәй генә күренмәй, Муса ҡайтҡансы донъя ҙур йөрәкле, оло рухлы йән эйәһен юғалтҡан. Һөйләүҙәренә ҡарағанда, аңы теп-теүәл көйө үткән, һуңғы һулышына тиклем: "Муса ҡайтманымы?" - тип һорашып ятҡан ул. Һөйкөлө ейәнен юҡһынып сығарған мөнәжәттәре - изге, йомарт күңелле әҙәйҙең һуңғы бүләге ине. Уларҙы Мусаға инәһе көйләп ишеттерҙе:

*Берҙән-бер хаҡ тәғәләнән гел һораным:*
*Иҫән булһын тинем Муса уғыланым.*
*Алла биреп, теләккәйем ҡабул булһа,*
*Аҡ ҡорбандар салыр инем, тип торамын.*
*Һин һауала ҡояш, ә мин - бары шәүләң,*
*Тағы ла бер теләгем бар, раббым, мәүләм:*
*Муса тигән уланымды күрмәйенсә*
*Ер өҫтөнән китмәһәсе ошо кәүҙәм,*
*Бәндә булғас, бәндәсә уй ҡороуҙамын,*
*Ҡөҙрәтеңә өмөт бағлап тороуҙамын.*
*Пар теләктең тик береһен үтәр булһаң,*
*Һуңғыһынан ваз кисергә (ы)ризамын.*

Быларҙы тыңлағанда Мусаның күҙҙәренә ирекһеҙҙән мөлдөрәп йәш тулды. Бына шул була инде кеше рухының бөйөклөгө!.. Әгәр донъяла, ысынлап та, Алла тип исемләнгән берәй ғәҙәттән тыш көс булһа, ул, әлбиттә, әҙәйҙең мөнәжәттәренә битараф ҡалмаҫҡа тейеш. Аллаларҙы тетрәндерерлек илаһи күңел тик ошо дәрәжәлә яратырға һәләтле кешеләрҙә генә була торғандыр.

Әҙәй, әҙәй! Һөйләгән әкиәттәреңдең, хикмәттәреңдең сере асыла төштө, тик үҙең генә юҡ. Иң төп яуыз - ике башлы аждаһа ҡыйратылды, ояһы туҙҙырылды. Авдеев әйтмешләй, уның нәҫеленән булған бихисап күп ваҡ йыландар, уңайлы мәл көтөп ятыр мәкерле дейеүҙәр, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ен-пәрейҙәр ҡалды. Улар баш ҡалҡытырға яраҡлы миҙгел генә көтә. Әҙәй, әҙәй! Ғүмер баҡый төрлө золомдоң үҙәге булған, йөрәктәргә аждаһалай ҡурҡыу һалып торған батша ҡолатылып, халыҡтың иң яҡты хыялы булған "ирек", "азатлыҡ" тигән һүҙҙәр ысынбарлыҡҡа әүерелергә торғанда, һинең булмауың ниндәй үкенес!

**(Дауамы бар).**

ИЖАДХАНА

# ТЕЛ ДӘ, РУХ ТА...

## әсәйҙән, атайҙан



**Яҙыусы Шәүрә Шәкүрова Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарамағындағы Балалар һәм үсмерҙәр өсөн әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһендәге Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителде. Уның балалар һәм үсмерҙәр өсөн ижад ителгән проза һәм драматургияһы йәш быуында илһөйәрлек, халыҡ ижадына, тарихына хөрмәт тойғолары тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнай, тип табылды. Гәзит уҡыусыларыбыҙға әҙибә менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

➔ **Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәте ниндәй осор кисерә? Һинең ошо мөхиттә тотҡан урының? Уңышлы ижад емештәрең ниндәй? Нимәләр ауыр бирелә йәки һин булдыра алмаған ыңғандар бармы?**

- Бөгөн башҡорт әҙәбиәтендә лә, рус һәм башҡа, гөмүмән, донъя әҙәбиәтендә герой образы үҙгәреш кисерә. Ижадсылар яңы герой эҙләй. Кисәге герой инде ҡыҙығын юғалтҡан кеүек. Уҡыусыны, тамашасыны тотоу, уны арбау өсөн һоҡланғыс, һис юғында, күҙгә ташланырлыҡ герой кәрәк. Һәм тиҙ арала ул герой ҙа кисәге көнгә әүерелергә тора, шул ҡәҙәре ваҡыт ағышы тиҙ, шарлауыҡ заманы тиерһең.

Бәләкәй халыҡ, юғалыу сигенә еткән тел, тигән фекер бер нисек тә әҫәр сифатына йоғонто яһай алмай. Һәм әҫәрҙе популяр итеүгә лә был сик түгел. Белеүебеҙсә, күп билдәле әҫәрҙәр тап шундай "аҙ һанлы" милләт вәкилдәренеке лә. Халыҡҡа артабан үҫешер өсөн әҙәбиәт кәрәк, был -шикһеҙ.

Әҙәбиәттә мин ниндәй урын биләйем, тигәнгә аныҡ ҡына яуап бирә алмайым. Быны, моғайын, уҡыусы йә тәнҡитсе генә әйтер. Ә беҙҙең быуындың бөгөнгө әҙәбиәттә төп көс икәнлеген аңлайым. Беҙ инде йәш тә, әлегә оло ла түгелбеҙ. Эшләй һәм үҙебеҙҙең һүҙебеҙҙе әйтә торған сағыбыҙ.

"Нимәне булдыра алмайым?" тигәндә, үҙ ижадымды күрһәтә белмәйем. Үҙемде-үҙем рекламалау оҫталығы бирелмәгән миңә. Ә бөгөн был оҫталыҡҡа эйә булыу бик кәрәк. Сит илдәге кеүек, үҙ янында әҙәби агент тотоу ҙа йәйлап беҙгә килеп етер ул...

➔ **Бөгөнгө уҡыусыға ҡыҙыҡ булыу өсөн ни эшләргә: ниндәй темалар һайларға, ниндәй стилдә яҙырға, ниндәй тарихҡа мөрәжәғәт итергә?**

- Һине нимә борсой, нимә көнөләнә яҡын - шуны яҙырға кәрәктер. Башта уларҙы булмышың аша үткәрергә, унан ғына ҡәләмгә тотонорға кәрәк. Тик актуаль темаларҙы, илдә барған хәл-торошто эләп алып ҡағыҙға төшөрә һалыу ғына етмәй тәрән әҫәр булдырыу өсөн. Кешелек донъяһының бер ваҡытта ла иҫкермәй, юғалмай, онотолмай торған темалары бар ул. Ижадсы үҙе йәшәгән дәүергә генә түгел, ә киләсәк быуындарға ла хеҙмәт итә.

➔ **Драматургия, проза, сценарийҙар араһында айырма тотаһыңмы?**

- Был өс жанр, өс төрлө йүнәлеш. Сериалдарҙың сценарийҙарына килгәндә, улар бары тик авторҙың ғына ҡарамағында түгел. Ғөмүмән, кино, сериалдар - улар продюсерҙарҙың, режиссерҙарҙың теләктәренән, мөмкинлектәренән сығып эш итә торған жанрҙар. Театрҙа ла шул самараҡ, режиссер нисек күрә, тоя ала - шулай эшләй. Прозала иһә автор үҙенә үҙе баш та, түш тә. Ул унда иркенле, кисерештәрен дә, хистәрен дә иркенләп тотона, сығара, күрһәтә ала. Унда сикләүсе, ниндәйҙер ҡалыпҡа ултыртырға теләүселәр юҡ. Проза миңә шул яғы менән яҡын. Әлбиттә, гәзиттә йә журналда баҫып сығарған мөхәррир ниндәйҙер үҙгәртеүҙәр индерергә тәҡдим итә ала, әммә был өлкәлә автор иреклерәк.

➔ **Режиссерҙар йыш ҡына "драматургтар юҡ" тип зарлана. Ә ҡарап торһаң, ҡәләм тирбәткән йәштәр драматургияла күп кенә. Бер-ике уңышлы прозаһы булғандарҙың барыһы ла тигәндәй драматургияға ла мөрәжәғәт итә. Нисек аңларға быны - прозаиктарҙың драматургияға теше үтеп етмәйме?**

- Һәр прозаик драматург була алмай. Һәм, киреһенсә: һәр драматург та прозаик була алмай. Драматург һәр ваҡыт кимәлде үҫтереүҙе талап итә торған профессия. Өфөлә Башҡортостан Республикаһының Драматургтар үҙәге эшләп килә. Шул үҙәк бер мәл байтаҡ ҡына драматургтарҙы туплап алғайны, семинарҙар үткәргәйне, шунда илдең һәм республиканың билдәле драматургтары оҫталыҡ дәрестәре биргәйне. Авторға артабан үҫер өсөн был бик шәп ысул тип күрәм. ВГИК-та уҡығанда донъяның билдәле режиссерҙарының, драматургтарының оҫталыҡ дәрестәре һаман иҫемдә, ҡайһы берҙәренең тауышы ла ҡолағымда ғына торғандай. Был ысынлап та ярҙам итә! Беҙҙең әҙәбиәттә ошо йүнәлеш ҡулланылһа, үҫешһә - шәп булыр ине.

➔ **Пьесаларығыҙ, әлеге көндә ҡуйылған, сәхнәлә булған әҫәрҙәрегеҙ хаҡында һөйләп китегеҙ әле...**

- Салауат дәүләт башҡорт драма театрында минең пьеса буйынса "Гөлкәйҙең бәхете" тигән тамаша бара (режиссеры Лиана Ниғмәтуллина). Был пьеса русса яҙылды, "Олюшкино счастье" тип аталды. Ил кимәлендәге конкурсҡа ҡатнашып енде һәм федераль грант яуланы.

Күптән түгел генә, әле бына 31 октябрҙә, Сепсел исемендәге Сыуаш дәүләт йәш тамашасы театрында минең "Зәңгәр томандар артында" тип аталған пьесам буйынса спектакль ҡуйылды. Сыуаш йәштәре Мәскәүҙә йәшәгән башҡорт егет-ҡыҙҙарының тормошон уйнаны. Өсөнсө мини-спектаклем дә Бөтә Рәсәй конкурсына әләгеү бәхете менән сәхнәгә сыҡты. Бөгөн уны Мәскәүҙең "А-Я" балалар театры ҡуя. Атамаһын "Әсәй мине ярата" тип алғандар.

➔ **"Ауыҙымдан ел алһын" китабы, роман үҙе лә, ниндәйҙер мистик нигеҙҙә яҙылған. Фольклорҙа, беҙҙең башҡорт халыҡ ижадында ла, фантастик сюжеттарға урын бар. Фэнтези жанры яҡынмы һеҙгә, әллә был замана елеме?**

- Мин тарих факультетында уҡыным һәм дипломды билдәле тарихсы Әнүәр Зәкир улы Әсфәндийәровҡа яҙҙым. Унан Донъя әҙәбиәте институты аспирантураһына инеп, "фольклористика" специальносы буйынса тамамланым. Диссертацияны башҡорт халыҡ эпосы "Урал батыр"ҙың текстологияһы буйынса яҡланым. Етәксем данлыҡлы Гацак Виктор булды. Диссертациям нигеҙендәге етди генә онографиям да бар, экспедицияларға сыҡтым, япон мистикаһы менән ҡыҙыҡһындым һәм быйна шулар ошо әҫәремдә ҡуша үрелде лә инде. Әммә шул уҡ ваҡытта миңә реализм да яҡын, ниндәй жанрҙа ла эшләй алам. Һин уйлаған тарих, һинең фантазияң жанрҙы формалаштыра ла инде. Хатта "Ай бүреләре" әҫәре лә ғәйнә башҡорттары тарихы, шул заман атмосфераһы менән һуғарылған: һалдат өйөнә ҡайтып килә, юлда уны үлтерәләр, кем үлтереүсе икәнде бер кем белмәй. Был әҫәр идеяһы миңә күптән килгәйне, йылдар буйына күңелемдә өйкәп йөрөнө лә, ВГИК-та уҡығанда башта уны биш битлек кенә сценарий итеп яҙҙым. Уҡытыусым (билдәле Рәсәй сценарисы Александр Эмануилович Бородянский) "Дауамы нисек?" тип һораны һәм был һорау артабанғы ижадҡа этәргес көс булды. Аҙағын тиҙ генә яҙып бөттөм. Һуңғараҡ иһә ул әҫәргә лә әйләнде. Ә сценарийына килгәндә, башҡорт киноһында фэнтэзи жанры ҡасан тормошҡа ашырлыҡ булыр - әйтеүе ауыр.

"Ауыҙымдан ел алһын" романында нигеҙҙә "Саҡ-Суҡ" бәйете ята. Был бәйетте мин бала саҡтан тыныс ҡына тыңлай алманым. Шул хәтлем малайҙарға ярҙам иткем килә ине. Романда ҡарғышҡа алып килгән ҡара көстәрҙең инеше эҙләнә. Ҡайҙан килә бындай ҡара уй? Уларҙы беҙ үҙебеҙ яралтмайбыҙмы һәм башҡалар. Һәр уҡыусының башына килә һәм күңелендә яуап эҙләнә торған һорауҙар тыуа.

➔ **Һин ҡала ҡыҙы, рус телендә яҙаһың. Әҫәрҙәреңдән дә был һиҙелә. Башҡорт телле уҡыусы өсөн ижад итәсәкһеңме?**

- Башҡортса яҙылған хикәйәләрем матбуғатта сыҡҡаны бар, әммә әҫәрҙәремдең төп өлөшө әлегә русса яҙыла. Башҡорт һәм милли әҙәбиәттә был осрай торған хәл. Әсә һөтө менән кергән рух барыбер ҡанда урғыла бит. Әлбиттә, йылап башҡортса ла ҙур әҫәр яҙғы килә. Бигерәк тә минән башҡортса яҙылған әҫәрҙе көткән уҡыусыларым булыуы мине шул эшкә әйҙәй.

Ә икенсе яҡтан, минең өс әҫәрем дә русса яҙылып, ил һәм бөтөн донъя кимәлендә конкурстарҙа еңеп кенә сәхнәгә ҡуйылды.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**яҙып алды.**

ҠЫҘЫҠ ФЕКЕРҘӘР

# ЯРАЛАР ИРҘӘРҘЕ МАТУРЛАЙ,

## ә ҡатын-ҡыҙҙарҙы...

- Кеше характерындағы йомшаҡлыҡ аҡыллылыға яҡын, ҡатҡыллыҡ - ахмаҡҡа.
- Әрәмтамаҡ кеше тапҡанды ашай, минминлек кешенең йәнен ашай.
- Мин ырымға ышанмайым, ләкин тәүҙә уң итегемде кейәм.
- Ике егет бер ҡыҙҙы ярата, тимәк, улар серҙәштәр.
- Дөрөҫлөктә иң ҡыйыны - дөрөҫлөктә иҫбат итеү.
- Ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшкәндә лә ҡапма-ҡаршы уйҙар булыуы ихтимал.
- Дуҫ-иш ашы - ҡара-ҡаршы, дошман ашы - тирмән ташы.
- Туҙға яҙмаған хәбәрҙән дә тиҙ таралғаны булмай.
- Телеңде ҡыҫҡартмаһаң, вазифаңды ҡыҫҡартырһың.
- Эскесегә күрше хаҡы - бер ярты.
- Хат яҙышыуҙа иң тәмлеһе конверт елеме.
- Ҡуш ҡуллап һайлау - бирелә тигән һүҙ түгелме?
- Түрәнең мәғәнәһеҙ күрһәтмәһен үтәгән өсөн буйһоноусының мәғәнәле яуап биреүе ихтимал.
- Һинең төп етешһеҙлегең нимәлә? Был турала берәүгә лә әйтмәүҙә.
- Кешенең донъяға ҡарашы - уның тормош юлы. Әгәр ҡарашың ҡапыл үҙгәрһә, һаҡ бул: юлдан яҙғанһыңдыр.
- Яралар ирҙәрҙе матурлай, күгәреүҙәр - ҡатынды.
- Кемгәләр яҡшы күренәм тиһәң, уның кеүек бул.
- Әгәр "Ғәилә - дәүләт" булһа, ҡәйнә - диверсант булыр.
- "Боронғо ҡарттар ныҡ булғандар" түгел, ныҡтары ғына ҡартайғандар.
- Үлемһеҙлек тыумағандар өҫтөнлөгө, тыуыу үлемгә алып бара.
- Ҡартты сабый ҙа рәнйетә ала.
- Теге донъя барҙыр тип уйламайым. Әгәр булһа, һис юғында берәү ҡасып сығыр ине.
- Теге донъя барҙыр тип уйлайым, юғиһә, бөтә кеше шунда кемуҙарҙан китмәҫ ине.
- Төрлө талант эйәһе булһаң, ни эшләргә лә белмәйһең.
- Аҡһаҡал булайым тиһәң, аҡыл эйәһе булыу кәрәкмәй, ҙур түрәнең дуҫы булыу ҙа етә!
- Кеше етешһеҙлеге күҙ алдында, үҙендеке - танау аҫтында.
- Мөхәббәт - йәйғор.
- Күршең менән оҙон юлға сыҡма - юл ғазабы үтәр, аҙабы ҡалыр.
- Элек баш бар нәмәгә баш ине, хәҙер - киреһенсә.
- Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын.... уларһың.
- Күмәкләп "Ура" ҡысҡырғанда, яңғыҙың "Караул" ҡысҡырғаны ишетелмәҫ.
- Беҙҙең һум тамам ауырайҙы: үтескә бирһәң бата ла ҡуя.
- Дарвинса әйткәндә: кем эшләмәй - шул маймыл.
- Олатаһының һабаҡтарын тыңларға яратмаған ейән уйларға өйрәнмәҫ.
- Ниһайәт, беҙ тоннель осондағы яҡтылыҡты күрҙек, тик был киләсәк яҡтыһымы, әллә теге донъяныҡымы?
- Түңәрәк өҫтәл артында ла осло мөйөштәр була.
- Телятникҡа ут тоҡанған, тип янғын һүндереүсегә ҡысҡыралар. Ә уныһы: "Бер-ике сынаяҡ сәй эсеп алайым да, барырмын", - ти.

**Йомор АТАУЛЛИН.**
**Әбйәлил районы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨРТМӘЛЕ АША

■ Көртмәле составында булған фитонцидтар дизентерия таяҡсаларына, ҡорһаҡ тифына ҡаршы яҡшы сара иҫәпләнә. Шуға ла белгестәр көртмәле өлгөргән миҙгелде бушҡа уҙғармаҫҡа, ә уны туйғансы ашап ҡалырға саҡыра. Туңдырылған емештәргә ҡарағанда, яңы өҙөлгән көртмәленең күпкә файҙалыраҡ икәнен дә онотмағыҙ. Бынан тыш, көртмәле күҙҙәргә лә яҡшы тәьҫир итә, ул күреү һәләтен яҡшырта, күҙҙәр арымай башлай, төнөн, бигерәк тә энергә күҙ томаланыуҙан ҡотҡара. Эштәре компьютер менән бәйле булғандарға был емеш айырыуса файҙалы.

■ Америка ғалимдары, XX быуат чумаһы тип йөрөткән сир - депрессияны физик күнегеүҙәр ярҙамында еңеп була, тип белдерә. 25 минут физик күнегеүҙәр яһап алғандан һуң кешенең кәйефе күтәрелә, ул тыныслана. Даллас ҡалаһы университетында шундай тәжрибә яһала: тәүге төркөм 150 минут буйы еңелсә, ә икенсе төркөм 75 минут ауырыраҡ күнекмәләр менән шөғөлләнә. Асыҡланыуынса, икенсе төркөмгә тәғәйенләнгән күнекмәләр депрессияға ҡаршы һөҙөмтәлерәк көрәшә. Иртән бер нисә минут күнекмәләр яһарға ғәҙәтләнгәндәр ҙә депрессияға бирешеп бармай икән. Шуға ғалимдар әҙәм физик күнекмәләр был сиргә ҡаршы махсус дарыуҙарға ҡарағанда файҙалыраҡ булыуын белдерә.

■ Нимә ул көлөү һәм кеше ни өсөн көлә икәненә аныҡ ҡына яуап биреү еңел түгел. Ғалимдар көлөү иммун системаһын нығытыуын да билдәләй. Етмәһә, йыш көлгән кешелә нейрондар тарафынан бүленеп сыҡҡан бәхет гормондары - эндорфиндар баш мейеһенә ауыртыу сигналдарын үткәрмәй, киреһенсә, ҡәнәғәтлек тойғолары уята. Биш минут ихлас итеп көлөү 40 минут йүгереүгә тиңләшә. Психологтар әйтеүенсә, кеше ологаа барған һайын көлөү һәләтен дә юғалта. Табиптар раҫлауынса, яһалма көлөү ҙә организм өсөн файҙалы була ала. Баҡтиһәң, эш көлөүҙең оҙайлығында икән. Көнөнә 17 минут ихласлап көлөү депрессиянан ҡотҡара, ә яһалма көлгәндә ошо уҡ һөҙөмтәгә өлгәшеү өсөн 1 сәғәт ваҡыт кәрәк буласаҡ.

■ Ғалимдар эш урынында көрәгенән артыҡ ултырыуҙың тағы бер зыянлы яғын асыҡлаған. 11 сәғәткә һуҙылған эш көнө артыҡ ауырлыҡ, күреү һәләтенең түбәнәйеүе, иртә ҡартайыуға килә түгел, ә депрессияға ла килтерә икән. Британия тикшеренеүселәре 5 йыл да 8 ай дауамында 2123 кешене тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. Тикшеренеүҙәр ваҡытында унда ҡатнашыусыларҙың социаль статусы, эштең ауырлыҡ кимәлен, уның күпме тәмәке тартыуын, алкоголь ҡулланыуы, ҡулланмауы, шулай уҡ илдәге дөйөм торош та иҫәпкә алынған. Ғалимдар әйтеүенсә, иҡтисади көрсөккә ҡарағанда, нормаһыҙ булған эш көнө депрессияға тиҙерәк килтергән. Стандарт ваҡыт - 8 сәғәт эшләүселәрҙән бындай хеҙмәткәрҙәрҙең депрессив төшөнкөлөк кимәле 2,3-2,5 тапҡырға юғарыраҡ булып сыҡҡан. Быны ғалимдар түбәндәгесә аңлата: бар ваҡытын эшендә үткәреүселәрҙең ғаиләһенә һәм төп рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә ваҡыты ҡалмай. Бынан тыш, гел көсөргәнештә булыу ҡанда стресс менән кортизол гормоны кимәлен күтәрә. Ул үҙ сиратында иммунитетты түбәнәйтә һәм ҡан баҫымын күтәрә.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ДОНЪЯ ТОТҠАҺЫ БУШАҠ БУЛМАҺЫН



Ейәнсуралар.

## ЕЙӘНСУРАЛА

**Ейәнсура районы Иҫәнгол ауылы ағинәйҙәре ҡорона был юлы Үрген, Абҙан, Самаҙы, Байыш, Ағурҙа ҡатын-ҡыҙҙары ла килгәйне. Был ауылдарҙың ағинәйҙәрен Сибайҙа үткән мөнәжәт бәйгеләрендә лә, Өфөлә үткән дебет шәл күргәҙмәләрендә лә, милли кейем парадтарында ла күрергә була һәм һәр береһе тураһында оҙон-оҙаҡ итеп һөйләргә мөмкин. Әммә был юлы һүҙ ҡор хужаларына - Иҫәнгол ағинәйҙәренә.**

Иҫәнголда ағинәйҙәр ике рухи тотҡа булып берләшкән: дин юлында йөрөгән ағинәйҙәр - "Үҫәргән", икенсеһе "Ағинәйҙәр" төркөмөндә. Әммә байрамдар ҙа, ғәмәлдәр ҙә бергә: улар Стәрлебаш, Хәйбулла, Сибайҙа үткән мөнәжәт конкурстарында, милли кейем күргәҙмә-бәйгеләрендә ҡатнаша, мәктәптәрҙә, китапханаларҙа һәм йәйге пионер лагерҙарында сығыш яһай - барыһы ла асышлы, табышлы яңы заман ғәмәлдәре.

"Үҫәргән" төркөмө ағинәйҙәре Стәрлебаштағы "Мөнәжәт" байрамында икенсе урын алып, еңеүсе исемен күтәреп ҡайтыуҙарын ҡыуанып һөйләй. "Йортта йәки баҡсала ла йырлап-моңланып йөрөп була, беҙҙең күңелдә гел изге теләктәр, тормошҡа шөкөр итеү. Ләкин хәҙерге заманда халыҡҡа ошо уй-нәсихәтте көнөндә-ваҡытында еткереү ҙә мотлаҡ, сөнки беҙҙең йәштәрҙе, яңғыҙ кешеләрҙе аҙаштырырға, юлдан яҙҙырырға, аҡылын һәм байлығын таларға ниәтләгән ағымдар күп. Беҙҙең мөнәжәттәребеҙ донъяны ҡара уйҙарҙан, көрәкмәгән һағыш-хәсрәттәрҙән таҙартыр ул", тип ышана ағинәйҙәр. Улар үҙҙәренең рәтен икегә-өскә бүлә торған һәр төрлө тарҡатҡыс кешеләрҙе яҡын юлатмаүҙары тураһында ҡәтғи белдерә. Төркөмгә тәүгеләрҙән булып килгән һәм әҙәм йөрөүселәрҙән береһе Рәйсә Ғәбитова әйтеүенсә (ул үҙе Күгәрсен районы Ыуары ауылынан), иҫәнголдар "мөнәжәт моңо һәм аҡылы" менән уртаҡлашып, үҙҙәре лә байый һәм күтәрелә. Күптән түгел күрше Күгәрсен районы Түкәт, Ишбирҙе ауылында халыҡ алдында сығыш яһағандар. "Бөгөнгө уйға-эшкә батҡан күп кешегә фәһемле һәм ҡыуаныслы булды беҙҙең сығышыбыҙ", тип ҡыуана улар һәм алдынға ҡарашлы гүзәл һәм кешелекле хужалар менән бер сафҡа баҫып, уларҙың эшенә ярҙам итергә, халыҡ менән эштәрендә (әгәр ҙә ул халыҡ файҙаһына булһа!) ҡулалмаш булырға әҙер икәндәрен белдерә.

"Ағинәйҙәр" төркөмөнөң дә әйтер һүҙе, эшләгән эше халыҡ аҡылын таратыу, күтәрмәләү менән бәйле. Алдағы көндәрҙә "Йөрәк һүҙе" ҡалыбындағы "Ағинәй һүҙе", "Аҡһаҡал һүҙе" тигән сәсәнһүҙ, ҡобайыр һәм мөнәжәт кисәләре үткәрергә ниәтләйҙәр. Улар йыш ҡына балалар баҡсаларына, мәктәптәргә йүнәлә, яҡын-тирә ауылдарҙа йәшәгән күңелдәштәренә лә барып урай. "Беҙҙең урыныбыҙ - йәштәр янында, балалар янында. Ә улар - баҡсала һәм мәктәптә, мәҙәниәт йортонда һәм паркта, ял лагерҙарында, походтарҙа... Беҙ уларҙы уйламайынса йәшәй алмайбыҙ..." - ти улар.

Ейәнсура районы ағинәйҙәренең бер үҙенсәлеге бар: улар үҙҙәренең әсәй, инәй, апай, уҡытыусы, ҡатын-ҡыҙ икәнен бер генә мәлгә лә онотмай - һәр ваҡытта ла донъя тотҡаһы булып ҡала. Был уларҙың эштәрендә асыҡ күренә. Беренсенән, улар иң тәүгеләр булып милли кейем тегеп кейгән. Икенсенән, төбәк өсөн бик ғәзиз булған "Ейәнсура дебет шәле" ағинәйҙәр өсөн дә төп милли хазина. Башҡорт халҡын меңәр йыл буйы йылытҡан, кейендергән дебет кәзәһе бөгөн дә күҙҙән төшмәй. Ошо милли һөнәрмәнлекте яҡлау - ағинәйҙәрҙең дә төп эше булып тора.

Ейәнсура районы "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе Нурия Ҡунысбаева иһә үҙе тирәһендәге ҡатын-ҡыҙҙарҙы асыл һүҙҙәре менән күтәрмәләп, дәртләндереп, эштәренә йүнәлеш биреп тора. Был юлы ла ул ойошмаға тупланғандарҙың бурыстарын тағы бер тапҡыр телгә алып, һүҙҙе матур ғына итеп ослап ҡуйҙы: "Ағинәй иң беренсе үҙенең йортонда, үҙ балаһы һәм ире янында аҡ йөҙлө, хаҡ һүҙле булырға тейеш. Бөтә нәмә шул ғаилә тигән йәншишмәнән башлана. Ошо йәншишмәне йөрәгендә йөрөткән, аҡылына һендергән аҡыллы ҡыҙ балалар - улар буласаҡ ағинәйҙәр..."

## ЙЫЛАЙЫРҘА

**Йылайыр районы - тау-урмандар ҡаплаған Йылайыр ҡалҡыулығы - ҡырыҫ тәбиғәтле географик зонала - Йылайыр платоһы буйлап урынлашҡан. Башҡорт ауылдары башлыса ҙур йылғалар ярына һыйына: Йылайыр, Һаҡмар, Ҡараһыу һ.б. Бында тыңғәүер һәм үҫәргән ырыуы башҡорттары йәшәй. Был яҡтар Башҡортостан һәм Рәсәй тарихында бик ҙур фажиғәле ваҡиғалар менән бәйле. Шағир Шәйехзада Бабич тап ошо ауылда һәләк ителә: ирекке һәм үҙаллылыҡҡа ынтылған башҡорт зыялыһы ҡорбанға салынған мал кеүек Граждандар һуғышы ҡылысынан тураҡлана….**

"Тәнкәбикә" тигән ағинәйҙәр ҡоро Йылайыр ауылы уртаһындағы Мәҙәниәт һарайы эсендә күршеләш кенә булып урынлашҡан. Йыйнаҡ ҡына милли көнкүреш мөйөшө тупланған бында: кейемдәр, яңы заманса биҙәүестәр, йорт эсенең урын-ҡаралтыһы, музей экспонатына ярамалы боронғо һауыт-һаба һәм эш ҡулайламаһы, был төбәктәге файҙалы үҫемлектәр шәлкемдәре... Бынан тыш, иркен генә фойе, сәхнә лә бар. "Тәнкәбикә" Йылайыр ауылында йәшәгән бөтә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары өсөн бер йыйылыш урыны булыр, бында килгән йәше-ҡарты бергәбергә үҙ хыялына, ижадына осош табыр, ҡулы тартылған ҡул эшен башлар, йәне тартылған әхирәте менән серләшер, кәңәш алыр тип күҙаллана. Шулай ти ҡор хужабикәһе Фәндизә ханым Ҡудашева - Йылайыр районы Һабыр мәктәбендә һәм ауыл советында оҙаҡ йылдар эшләгән ве-

***✓ Был эшкә еңелсә елдергән ыңғайға ғына тотонғандар "башҡорт кейеме" асылына төшөнә алмай һөрлөгөп туҡтап ҡалыусан. Шуға күрә бөгөн республикала "традицион ырыу кейемен боҙмау" тигән талаптар ныҡлап ҡуйыла.***

теран. Ул шулай уҡ йәмәғәт ойошмаһының эш планын балалар менән аралашыу, музыкаль оркестр булдырыу, китапханасылар менән бергә кисәләр ойоштороу, матбуғат көндәре үткәреү һәм башҡа төрлө йүнәлештәрҙә ҡормаҡсы.

Миләүшә Моратова, райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, район үҙәгендә лә ағинәйҙәр ҡороноң бик ыңғай эш башлауын һөйөнсөләй, уның һүҙен башҡортса бик оҫта һөйләгән ир-уҙаман дауам итә. Башҡорт ауылында тыуып-үҫкән рус егете Александр Васильевич Коротков - Йылайыр районы хакимиәт башлығының социаль эштәр буйынса урынбаҫары. Ул Матрайҙа башҡорт телен генә түгел, башҡорт тарихын, характерын, һәләтлелеген бик яратып үҫкән. "Башҡорттарҙан да арттырып матур итеп һөйләшә беҙҙең урыҫтар", - тип ҡыуана йылайырҙар. Ә Александр Васильевич: "Һеҙһеҙ булмай, ҡыҙҙар, ағинәйҙәр",- ти һәм уларҙың һәр сараһын күтәрмәләп тора. Матрай балалар приюты етәксеһе Светлана Сәйфуллина ла ағинәйҙәр эшен хуплауын белдерә: "Бар ағинәйҙәргә рәхмәт уҡыйбыҙ - улар приютҡа килеп, беҙҙә тәрбиәләнгән балаларға өләсәй йылыһын өләшә. Приютҡа ағинәйҙәр килгән көндә тәмле ҡурмас еҫтәре, талир тәңкәләр сыңы тарала. Һәр бала инәйҙәр тағып килгән сулпы-селтәрҙәрҙе кейеп-тағып, уларҙы тотҡолап, бәләкәс кенә устарына һалып ҡарай, йөрәк төбөндәге наҙҙарын уята. Был күренешкә тыныс ҡарап булмай - күҙ йәштәре бәреп сыға. Милли матурлыҡ, милли зауыҡ ул һәр быуында, һәр заманда ла һәр милләт балаһын үҙенә тарта..." - ти ул.

Артабан "Тәңкәбикә"нең ыҡсым сәхнәһен ҡотлап, ағинәйҙәр йола күренештәрен уйнай башланы. Әйткәндәй, Йылайыр районының һәр ауылы ағинәйҙәре үҙ төркөмдәренә йырлап торған исемдәр ҡушҡан икән: Йылайырҙар - "Тәңкәбикә"-ләр, Ҡашҡарҙар - "Сәлимәкәй", Матрайҙар - "Хазина", Сиҙер ауылында "Гәүһәркүл" төркөмө, Байғужалар - "Шишмәләр", Һултантимерҙәр - "Йәнгүзәл", Юлдыбайҙар - "Ҡанифа". Ҡашҡарҙар бик йәнле итеп "Әбейҙәр сыуағы" сәхнә сарпыһын - тамашаһын күрһәтте. Матрай ауылының "Хазина" ағинәйҙәр төркөмө "Биртек йыйыу" йолаһын әҙерләгән. "Мин бәләкәй саҡта биртек йыйғаным булды, - ти төркөм етәксеһе Рәйсә апай Мелкоедова, - ул йола беҙҙең яҡтарҙа бөгөн дә йәшәй, хатта был им кемгәләр килешә лә. Ғөмүмән, йолаларҙың ыңғай энегетикаһы барлығын тойоп йәшәгән быуын бит инде беҙ. Әле бына "Килен оҙатыу" йолаһын атҡарырбыҙ, тип йыйынабыҙ. Хәҙер халыҡ туйҙарҙы ысын йола менән үткәрергә тырыша, йола үтәргә беҙҙе саҡырып торалар. Элекке теләһә ни кейеп-шашынып, шағараҡ ҡороп, һыу юлын тапау беҙҙә хәҙер бөттө..."

Һултантимер ауылы ағинәйҙәре бик фәһемле тамаша менән сығыш яһаны. "Йылҡы ите йәшәтә, ҡыр сейәһе йәшәртә!" - был һамаҡлау менән ҡымыҙсылыҡ һәм йылҡысылыҡтың бәрәкәтен, тәбиғи ашамлыҡтың файҙаһын аңлатырға тырышты ағинәйҙәр үҙ сығышында. "Һеҙгә хәҙер ут ҡоймағы бешереп күрһәтәм", тип усаҡ тоҡандырырға тотондо бер ағинәй. Уның телде йотторорлоҡ тәмле һыйы ҡуҙға бешерелгән ҡоймаҡ булып сыҡты.

Сиҙер ауылы (Сидоровка) ағинәйҙәре "Бил быуыу" йолаһын сәхнәләштерҙе һәм ҡыҙҙы кейәүгә оҙатҡан мәлдә башҡарыла торған был тамашаның мәғәнәһен, зарурлығын аңлатып, "Билкәйеңде бәйләйем, Ҡотҡайыңды бәйләйем", тип, йәш киленгә өгөт-нәсихәт яуҙырҙылар. "Иҫен булһа, иҫләрһең, иҫләмәһәң, үкенерһең, терһәгеңде тешләрһең", - тип тә иҫкәрттеләр. Яманһаҙ ағинәйҙәре Йылайыр тарафы яҙыусыһы Зөлфирә Ҡаҙаҡбаеваның "Хыялға илтер һуҡмаҡ" тигән китабынан "Ҡәйнә фатихаһы" тураһында хикәйәтте сәхнәләштереп, театр тамашаһы итеп уйнап сыҡты. Байғужа ауылының "Шишмәләр" төркөмө үҙҙәре эсеп үҫкән Туңғатар шишмәһе тураһында тамаша күрһәтте. Ауыл янында Туңғатар ҡоҙоғо бар икән, ул боронғо Ҡанифа юлы буйында, уҙған юлсы-каруансыларға һыу биргән оло сығанаҡ булған, әле лә тәмле һыуы менән һуғарып ағып ята. "Яңыраҡ Туңғатарҙы уратып кәртәләп ҡуйҙыҡ, рәшәткәһен буяп, "торналы" ҡоҙоҡ сиртмәһе яһатып, күҙҙең яуын алырлыҡ итеп йәмләнек", тип һөйөнсөләй һыу йәнле байғужалар.

Юлдыбай ауылындағы "Ҡанифа" ағинәйҙәр төркөмө башҡорт милли кейемдәре күргәҙмәһе менән сәхнәгә сыҡты. Төркөм-төркөм ағинәйҙәр берсә ҡашмау, селтәр күрһәтә, таҫтар, елән, камзул күргәҙмә өлгөләре лә әҙер - барыһы ла Хафиза Амантаева апайҙың ентекләп күҙҙән үткәреүе менән эшләнгән. Һәр төбәктә лә шулай яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алған оҫталар юҡ. Учалыла барса ағинәйҙәр Азат Салауат улы Ғариповҡа ҡарап тора, уның кәңәшен һәм дәресен ала. Йылайыр яғы Хафиза апай менән кәңәш итергә тырыша, сөнки һүҙ ырыу кейемен, милләт хазинаһын тергеҙеү тураһында бара. Ағинәйҙәр был юҫыҡта әленән-әле конкурстар һәм оҫталыҡ дәрестәре үткәреп торорға тырыша. Сөнки бөгөн бай зауыҡлы башҡорт кейемдәрен еренә еткереп тергеҙеү өсөн бик төплө уйлау, ғилми эҙләнеү, музейҙарҙы һәм китаптарҙы өйрәнеү мотлаҡ. Был эшкә еңелсә елдергән ыңғайға ғына тотонғандар "башҡорт кейеме" тигән "төрки ҡәүемдәр араһындағы иң бай, иң төрлө һәм иң мәғәнәле күренештең" (рус этнографы Сергей Руденко фекере) асылына төшөнә алмай һөрлөгөп туҡтап ҡалыусан. Шуға күрә лә бөгөн бөтә республикала "хаталар өҫтөндә эш" йәки "традицион ырыу кейемен боҙмау" тигән талаптар ныҡлап ҡуйыла. Ағинәйҙәр бөгөн ошо эш менән мәшғүл.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Күмәкләп йөрөү һәр ваҡытта ла эләкмәй, бындай осрашыу - күңел талабы икән, тип ҡайтып барабыҙ", ти матрайҙар. Улар менән хушлашҡан саҡта ағинәй, ветеран-уҡытыусы Сәйетова Гөлсирә Мәхмүтйән ҡыҙы бик фәһемле һүҙҙәр әйтте: "Беҙгә күп кәрәкмәй бит: бер йылы һүҙ етә - йәшәтеүсе лә, йыуатыусы ла яҡшы һүҙ..." Ысынлап та, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһына берләшкән ошо төрлө йәштәге башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары район халҡының көйөн хәстәрләп йөрөгән район етәкселегенә һәр даим ҡыуаныслы саралар үткәрешергә ашҡынып, уларға таяныс булырға әҙер тора бит. Уларҙы хуплап, йылы һүҙ менән күтәрмәләп торорға ғына кәрәк.**

**Сәрүәр СУРИНА.**



*Йылайырҙар.*

## СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Урта быуаттар дәүерендә итальян сығышлы табип Церби ҡартлыҡта кеше организмы шыйыҡлыҡты юғалта, тип раҫлай. Ҡартайыусы организмдың барлыҡ ағзаларға ла туҡландырыусы матдәләрҙе тигеҙ бүлмәүе һөҙөмтәһендә туҡымалар тығыҙлана һәм кеше ҡартая башлай.

XIX быуатта инглиз табибы Э. Дарвин ҡартайыу - "ҡуҙғыусанлыҡтың бөтөүе" һөҙөмтәһе тигән гипотеза тәҡдим итә. Шуға күрә ул ҡарт пациенттарына ниндәйҙер эш менән шөғөлләнергә, һәр саҡ йәмғиәттә булырға, тормош, йәғни тирә-яҡта нимә барғаны менән ҡыҙыҡһынырға кәңәш итә.

Билдәле философ Герберт Спенсер, Дарвиндың ватандашы, ҡартайыу - "тормош энергияһы запасының" бөтөүе, тип белдерә һәм хәтерҙе яҡшыртырға, һалмаҡ тормош алып барырға саҡыра.

1889 йылда бөтә донъяны сенсацион яңылыҡ аяҡҡа баҫтыра. Франция физиологы Шарль Броун-Секар француз биологик йәмғиәте алдында яһаған докладында үҙенең оҙаҡ йылдар дауамында төрлө хайуандарҙы бестергәндән һуң уларҙың йәшәү рәүешен күҙәтеү һығымталары менән бүлешә.

Баҡтиһәң, хайуандарҙың ғына түгел, кешеләрҙең дә орлоҡ биҙҙәре ҡанға тормош энергияһын стимуллаусы һәм тотош организмды йәшәртеүсе матдәләр (һуңынан асыҡланыуынса, улар енси гормондар була) бүлеп сығара.

Ғалимдарҙы хаҡлылығына инандырыу өсөн ғалим үҙенә эттәрҙең орлоҡ шыйыҡсаһынан инъекция эшләй һәм бик ҡыҫҡа ваҡыттан һуң уға егеттәр дәрте, эш һәләте ҡайтыуын һәм энергия тулышыуын ғәмәлдә раҫлай. Был раҫлауҙар шул тиклем инандырырлыҡ була, бөтөн донъя буйынса табиптар үҙҙәренең йәшәрергә теләгән пациенттарына йәш арландарҙың аталыҡ орлоҡтарын индерә башлай. Был йүнәлештә беҙҙең ватандашыбыҙ, билдәле рус хирургы С. Воронов барыһын да уҙып китә.

Уҙған быуыттың 20-се йылдарында Париждың ваҡытына күрә иң алдынғы медицина ҡорамалдары менән йыһазландырылған клиникаларының береһендә ул орлоҡ биҙен күсереп ултыртыу буйынса үҙенсәлекле операциялар эшләй башлай. Бындай бумды Париж бер ваҡытта ла күргәне булмағандыр, моғайын!

Донъяның төрлө мөйөштәренән ҡарттар Воронов клиникаһына ағыла. Уларға орлоҡ биҙен күсереп ултыртҡас, сәсәтәре ҡарая башлай, күҙҙәренә оҫкон ҡуна, мускулдары нығына. Операциянан һуң бер ни тиклем ваҡыт үткәндән һуң бер пациент табипҡа былай тип яҙа: "Кәүҙәм турайҙы, бит һәм кәүҙә тиреһе нығынды, ҡарашым йәнләнде. Мин йәш, көслө кеше кеүек күренәм. Элекке тормош рәүешенә кире ҡайттым, прогулкала йөрөй башланым, кискеһен бик йыш театрҙарға барам. Әммә иң мөһиме - мин ҡабат элекке кеүек үҙ фекеремде еңел генә итеп әйтеп бирәм һәм бер нисә сәғәт дауамында һис бер арыуһыҙ эшләйем".

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## БСТ
## 18 НОЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК

7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.
14.00 Итоги недели (на рус. яз.).
14.45 Специальный репортаж. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе… [6+]
16.00, 17.30 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Волчье солнце". [16+]
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Ради добра. [6+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00, 20.45 Новости (на рус. яз.).
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
21.20 Хоккей. КХЛ. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа).
0.00 Новости (на баш. яз.).
0.30 Х/ф "Праздничный переполох". [16+]
3.00 Бәхетнамә. [12+]
4.00 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]
5.30 Наука 102. [12+]
6.00 Историческая среда. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 19 НОЯБРЯ
## ВТОРНИК

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Волчье солнце". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 Республика Live. #Дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Дорога к храму. [0+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.00, 17.30 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Волчье солнце". [16+]
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Тайм-аут. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).
20.15 Криминальный спектр. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Полезные новости. [12+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 По сути дела… [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Которого не было". [16+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.15 Спектакль "Древо жизни". [12+]
5.00 "Бай". [12+]
5.30 Наука 102. [12+]
6.00 Историческая среда. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 20 НОЯБРЯ
## СРЕДА

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Волчье солнце". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 По сути дела… [12+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бала-саға. [6+]
16.00, 17.30 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Волчье солнце". [16+]
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Ты можешь! [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Куньлунь РС" (Пекин).
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Историческая среда. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 Земляки. [12+]
0.00 Х/ф "Запрет". [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Тамарис". [12+]
5.00 Автограф. [12+]
5.30 Наука 102. [12+]
6.00 Историческая среда. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 21 НОЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ

7.00 Сәләм. [12+]
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Т/с "Волчье солнце". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 Честно говоря. [12+]
12.00 Счастливый час.
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Наши годы. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.00, 17.30 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Волчье солнце". [16+]
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Безопасность на дорогах. [16+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Новости (на рус. яз.).
20.15 Криминальный спектр. [16+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 Уфимское "Времечко".
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Республика Live. #Дома. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 "Песня года". [12+]
23.30 Автограф. [12+]
0.15 Х/ф "Полный контакт". [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Похищение стариков". [12+]
4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]
5.00 Башҡорттар. [6+]
5.30 Наука 102. [12+]
6.00 Историческая среда. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 22 НОЯБРЯ
## ПЯТНИЦА

7.00 Сәләм.
9.00 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Д/ф "Сохранять во имя будущего…" [12+]
11.00 Новости (на рус. яз.).
11.15 "Йома". [0+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Точка Z. [12+]
12.30 Башҡорттар. [6+]
13.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Үткән ғүмер. [12+]
14.00 "Весело живем. [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Алтын тирмә. [0+]
16.00 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Д/ф "Узел вечности". [12+]
17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
17.30 Новости (на рус. яз.).
17.45 Интервью. [12+]
18.00 "Йома". [0+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск).
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Точка Z. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз.).
23.00 Караоке по-башкирски. [12+]
23.30 Автограф. [12+]
0.00 Х/ф "Не свадебное путешествие". [12+]
2.00 Спектакль "Прости меня". [12+]
3.45 Ете егет. [12+]
4.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]
4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]
5.45 Д/ф "Сохранять во имя будущего…" [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 23 НОЯБРЯ
## СУББОТА

7.00 "Доброе утро!" [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 Ты можешь! [12+]
9.15 Посмотрим… [12+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 Преград.net. [6+]
10.30 Сыйырсыҡ. [0+]
10.45 "Тамыр селтәре". [0+]
11.15 Байтус. [6+]
11.30 "Асылташ". [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Ете егет. [12+]
13.15 Земляки. [12+]
13.30 Хазина о Хазине. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Концерт театра танца "Ренессанс". [6+]
18.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 Ради добра. [6+]
20.30 "Байыҡ-2019". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Караоке по-башкирски. [12+]
22.30 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]
0.00 Х/ф "Новейший завет". [16+]
2.00 Итоги недели (на баш. яз.).
2.45 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]
5.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]
6.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

## 24 НОЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ

7.00 "С Днем матери!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Бейе". [0+]
10.15 "АйТек?!" [6+]
10.30 "Детей много не бывает". [0+]
11.00 "Сулпылар". [0+]
11.30 Гора новостей. [6+]
11.45 Бирешмә. Профи. [12+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз.).
13.15 Алтын тирмә. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.15 Безопасность на дорогах. [16+]
15.30 Дорога к храму. [0+]
16.00 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак барс" (Казань).
19.00 Полезные новости. [12+]
19.15 Ты можешь! [12+]
19.45 Әлләсе… [12+]
20.30 Теге өсәү! [12+]
21.00 Республика Live. #Дома. [12+]
21.30 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15 Специальный репортаж. [12+]
22.30 Республика Live. #Дома. [12+]
22.45 "Красная кнопка". [16+]
23.30 "Байыҡ-2019". [12+]
0.30 Х/ф "Убийство кота". [16+]
2.15 Спектакль "Банкрот, или свои люди сочтемся". [12+]
4.00 Х/ф "Убийство кота". [16+]
5.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
6.45 Специальный репортаж. [12+]

ЭТО ПОЛЕЗНО ЗНАТЬ

# Обогреватель с эффектом горячего кирпича

## Современный вариант русской печи от завода "ТеплЭко"




**В старину русская печь занимала половину избы, требовала внимания и заботы, а за отдаваемое тепло заставляла человека поработать. Зато в доме всегда было тепло и комфортно. Современная система центрального отопления избавила нас от необходимости растапливать печь и подкидывать дрова, но многие все же не отказались бы обзавестись хотя бы "буржуйкой".**

Что ж, мечты сбываются! Не "буржуйкой", а целой русской печью сегодня может обзавестись каждый, при этом займет новая печь всего *около одного квадратного метра на стене*, не потребует дров и вообще какого-либо внимания, ее всего лишь надо включить в розетку.

Речь идет об экономичном обогревателе **"ТеплЭко"**, который сочетает в себе теплоносные характеристики кирпича русской печки и современные технологии, сделавшие его компактным и экономным.

### МЕЧТЫ О ТЕПЛЕ

Во многих квартирах батареи то греют, то не греют. Если в мае квартирную "печку" можно отключить, в сентябре ее не включишь, так как отопительный сезон еще не начался. А еще иногда батареи засоряются… А еще падает давление в системе… А еще… Да мало ли отговорок мы слышали о том, почему в квартире вдруг становится холодно. Послушав о причинах похолодания, мы достаём обогреватели, какие у кого есть: масляные, тепловентиляторы, калориферы. Одни сушат воздух, другие угрожают пожаром, к третьим нельзя подпускать детей. В общем, мороки с ними не меньше, чем с громадной русской печью. При этом они еще крайне "прожорливы": счет за электроэнергию лучше оплачивать с закрытыми глазами!



Обогреватель **"ТеплЭко"** разом решает все эти проблемы. Он представляет собой декоративную панель, внутри которой спрятан хромоникелевый нагреватель, залитый составом из кварцевого песка. **"ТеплЭко"** можно использовать, как отдельно, так и создавать отопительные системы - количество обогревателей зависит от площади. Один обогреватель устанавливается на 9 квадратных метров, при условии стандартной высоты потолков. До требуемой температуры такая панель нагревается за 10-15 минут, а остывает, как плотная кирпичная стена - несколько часов.

**"ТеплЭко"** не сушит воздух, не сжигает кислород, пожаробезопасен (так как поверхность не нагревается более чем до 98 градусов) и в четыре раза экономнее обычного чайника (даже за сутки работы одна панель потребляет всего 2,5 кВт при использовании терморегулятора). Номинальная мощность обогревателя: 400 Вт, размер: 600 мм*350мм*25мм, вес: 12 кг.

### ВЛИЯНИЕ НА ЗДОРОВЬЕ ЧЕЛОВЕКА

Тепло - это инфракрасные лучи, но не все из них безопасны для человека, только те, которые находятся в диапазоне излучения человеческого тела - от 6 до 20 мкм. Внешнее излучение с такими длинами волн наш организм воспринимает как своё собственное и интенсивно его поглощает. За счет этого в организме активизируется микроциркуляция крови, ускоряется метаболизм, улучшается самочувствие, исчезает усталость. Природный источник длинноволновых инфракрасных лучей - это солнце, а бытовой - русская печь, излучающая тепло, комфортное для организма. Обогреватели **"ТеплЭко"** используют естественные свойства кварцевого песка накапливать тепло, а затем долгое время отдавать его в длинноволновом инфракрасном диапазоне по принципу горячего кирпича. В отличие от всех других обогревателей, **"ТеплЭко"** не только безвреден, но и оказывает благотворное влияние на здоровье человека.

### САМОСТОЯТЕЛЬНЫЙ И НАДЁЖНЫЙ

Главное преимущество обогревателя **"ТеплЭко"** - его самостоятельность. Оптимальную температуру, которую он должен поддерживать в комнате, можно задать с помощью терморегулятора. *И все. Он будет работать, создавая атмосферу настоящего домашнего, "обжитого" уюта - когда можно играть с детьми на полу, спокойно спать, ворочаясь и раскрываясь, какие бы морозы ни трещали за окнами.* Еще обогреватель **"ТеплЭко"** идеально подходит для дачи, гаража и офиса. Несколько обогревателей способны полностью заменить центральное теплоснабжение.

Завод **"ТеплЭко"** является единственным в России производителем энергосберегающих обогревателей из кварцевого песка высокой степени очистки. Купить обогреватель вы можете в нашем фирменном магазине или заказать доставку по телефону. А для установки обогревателя потребуется минимум сил и сноровки, три самореза и отвертка.

И пусть простота обогревателя не вызывает никаких сомнений в его долговечности. Как известно, все гениальное устроено довольно просто. И обогреватель **"ТеплЭко"** может работать практически вечно, ведь его нагревательные элементы не контактируют с воздухом и не окисляются. Гарантия пожизненная.*




СДЕЛАНО В РОССИИ

Подтверждено европейское качество

CE

ТЕПЛЭКО

Единственный фирменный магазин компании "ТеплЭко" в Уфе расположен по адресу:
ул. Конституции, 2. Время работы: пн. - суб. с 10 до 20 часов без обеда, воскресенье - выходной. Тел.: (347)214-93-08, (964) 956-23-00, 8 800 333 05 35 (звонок бесплатный по России)
ОСТЕРЕГАЙТЕСЬ ПОДДЕЛОК!
tepleko.ru

ОГРН 1177847333993. *срок эксплуатации 10 лет.

На правах рекламы.

*✓ Әгәр ҙә кемдер белем тауының иң юғарғы баҫҡысында торам, тип иҫәпләй икән, тимәк, ул әле белем тауының иң аҫҡы баҫҡысында ғына. (Солонон Рысинский).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# НОЯБРЬ ЮБИЛЯРҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**45-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ғайсин. Сәлихов. Сиңерткә. Йәннәт. Ныҡ. Мәрт. Аслаев. Кран. Тереғолов. Әҙеп. Нони. Төкө. Нептун. Ем. Ыу. Швед. Йүкә. Шарт. Әхүәл. Әхәт. Азов.

**Вертикаль буйынса:** Өмөтбаев. Санъяров. Ҡарғатуй. Сәсе. Үтәләк. Рәми. Атлант. Өшәмә. КВН. Хата. Әйтер. Еңеү. Игорь. Йыһаншин. Вәлиев. Әрпеш. Нужа. Травмпункт.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+

**22 ноябрь "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 12+

**23 "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 18.00 12+

**24 ноябрь "Әбейүшкә@түщкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18 ноябрь** Салауат ҡалаһының балалар музыка мәктәбе **"Һарығош йыры"** (Ж. Мангуткина), мюзикл. 12.00 0+

**21 ноябрь "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айтматов), хикмәт. 12+

**22 ноябрь "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 12+

**24 ноябрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. 12.00, 14.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры Өфөлә гастролдә

**18 ноябрь** М. Кәрим ис. Милли йәштәр театры сәхнәһендә:

**"Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), музыкаль комедия. 15.00 12+

**"Әүлиә"** (Л. Яҡшыбаева), Мөжәүир хәҙрәткә мәҙхиә. 19.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23 ноябрь "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен) 12.00, 14.00 0+

**"О чем поет осень..."** (В. Щербакова) 16.00 0+

**24 ноябрь "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен) 12.00, 14.00 0+

**"О чем поет осень..."** (В. Щербакова) 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 ноябрь "Виртуозы Якутии"**. Саха Республикаһының (Якутия) скрипкасылар дәүләт ансамбле. 6+

**24 ноябрь "Арғымаҡ"** төркөмө концерты. 18.00 6+

* * *

**Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле** коллективтың 80 йыллығына арналған концерттар менән сығыш яһай башланы. 12 ноябрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залы сәхнәһендә ансамбль "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" юбилей концерт программаһын тәҡдим итте. Тантаналы юбилей концерты 13 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була. 80 йыллыҡҡа бағышланған концерттарҙың һуңғыһы 20 апрелдә Йәштәр һарайында уҙа.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Ноябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (21) дүшәмбе | 7:24 | 8:54 | 13:30 | 15:37 | 17:07 | 18:37 |
| 19 (22) шишәмбе | 7:26 | 8:56 | 13:30 | 15:36 | 17:06 | 18:36 |
| 20 (23) шаршамбы | 7:28 | 8:58 | 13:30 | 15:34 | 17:04 | 18:34 |
| 21 (24) кесе йома | 7:30 | 9:00 | 13:30 | 15:33 | 17:03 | 18:33 |
| 22 (25) йома | 7:31 | 9:01 | 13:30 | 15:32 | 17:02 | 18:32 |
| 23 (26) шәмбе | 7:33 | 9:03 | 13:30 | 15:30 | 17:00 | 18:30 |
| 24 (27) йәкшәмбе | 7:35 | 9:05 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЙӘН ҠЫЙЫУ - ГОНАҺ

**Экрандар бөгөн үлтереш һәм фәхишәлек күренештәре менән тулды. Ерҙең төрлө тарафтарында ла йән һорап ҡына торған упҡындар ишәйә. Был упҡындарға мосолмандар ҙа битараф ҡалып ятмай кеүек. Буталырға сәбәбе сығып ҡына тора.**

Дин өйрәтә: "Хаҡығыҙ - аҡланырлыҡ сәбәбегеҙ булмай тороп, Аллаһ тыйған йәнде ҡыймағыҙ, ти. Әгәр ҙә кем дә булһа берәү бер ғәйепһеҙ кешене үлтерһә, уның вариҫына беҙ үлтереүсенең йә үҙен дә үлтерергә, йә үлтермәй генә мал алып ҡалыу йә ғәфү итеү өсөн тулы хоҡуҡ бирҙек. Үс алғанда ла самаларҙы үтә күрмәгеҙ. Ғәйепһеҙгә рәнйетелгәнде Аллаһ үҙенең ярҙамынан ташламаҫ" ("Әл-Исра" (Төндә күсереү) сүрәһе, 33-сө аят). Ҡөрьән киҫәтә: "Әгәр ҙә берәү кеше үлтермәгән, йәки Ер йөҙөндә боҙоҡлоҡ эшләп йөрөмәгән кешене үлтерһә, был инде бөтә кешеләрҙе үлтереүгә, бер кешене үлемдән ҡотҡарып ҡалыу - бөтә кешеләрҙе ҡотҡарып ҡалыуға тиңләшә", - ти ("Әл-Маидә" (Аш табыны) сүрәһе, 32-се аят). Исламда кешенең боҙоҡлоҡҡа, әфиүн ҡулланыуға, эсеү-тартыуҙарға бирелеп, үҙенең ғүмерен ҡыҫҡартыуы, өмөтһеҙлеккә төшөп, үҙенә-үҙе ҡул һалыуы ла кеше үлтереүгә тиңләшә һәм ҡәтғи рәүештә тыйыла. Иң боронғо халыҡтарға бирелгән тәрбиә дәрестәрендә лә, дини китаптарҙа ла вәхшилек өсөн бирелергә тейешле яза хаҡындағы хөкөмдәрҙән һуң: "Әгәр ҙә кеше үс алыуҙан тыйылып ҡала алһа, был уның өсөн элек эшләгән гонаһтарын да ярлыҡауға сәбәп буласаҡ", - тигән фекер ҡабатлана (шул уҡ сүрә, 45-се аят). "Тәүратта Беҙ йән өсөн - йән, күҙ сығарған өсөн - күҙ, танау өсөн - танау, ҡолаҡ өсөн - ҡолаҡ, теш өсөн - теш, яра өсөн яра менән үс алырға тейеш, тип бойорҙоҡ. Әммә кеше был зыяндар өсөн үс алмай, ғәфү итә белһә, был ғәмәле - игелектәрҙең иң отошлоһо". Әле төрлө ерҙә баш күтәреп, таш атып, бола ҡуптарып торған бик күптәр быны белһә лә, ғәфү итешеү тигән нәмә хәтерҙәренән сығып тора булһа кәрәк. Шуның өсөн дә: "...Аллаһ бойорғандарҙы үтәй белмәгәндәр үҙҙәренә үҙҙәре зыян итеүсе залимдар", - тип киҫәтелә мөьминдәр (шул уҡ сүрә, 45-се аят).

*✓ Күңелгә дәрт өҫтәр, йөрәктәрҙе ялҡынландырыр, тәрән уйға һалыр һәм борсоулы һорауҙарға яуап табышыр поэтик һүҙ сәхнәлә биш сәғәт дауамында яңғыраны.*



БӘХӘС ҠОРО

# "ЙӨРӘК ҺҮҘЕ" ШАҒИРҘАР МАЙҘАНЫМЫ?



**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың "Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһе үтте. Сара Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуы һәм Рәсәйҙә "Театр йылы" билдәләнеүенә арналды.**

"Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһенең һуңғы этабына 16 ҡатнашыусы - республика театрҙары актерҙары сыҡты. Уларҙың һәр береһе тамашаһы өсөн ихтирамлы шәхестәр ине: Әлмирә Ҡыуатова, Илгиз Таһиров, Шәһит Хамматов, Зөлфиә Хәлилова, Морат Рафиҡов, Эльмира Юлдашева, Фәнис Рәхмәтов, Земфира Байбулдина, Суфия Ҡорбанғәлиева, Нәүфилә Яҡупова, Зиннур Сөләйманов, Вадим Ҡылысов, Юнир Ғәйнуллин, Гөлназ Мөхәмәҙиева, Гөлмирә Исмәғилева һәм Фәрүәз Урманшин. Ярыштың тәүге өлөшөндә улар Мостай Кәрим ижадына мөрәжәғәт итһә, артабан күңелдәренә яҡын шиғри юлдарҙы тамашасыларға тасуири һөйләп ишеттерҙе. Күңелгә дәрт өҫтәр, йөрәктәрҙе ялҡынландырыр, тәрән уйға һалыр һәм борсоулы һорауҙарға яуап табышыр поэтик һүҙ сәхнәлә биш сәғәт дауамында яңғыраны.

Бәйгенең баһалама комиссияһы ағзалары "Йөрәк һүҙе"ндә шиғырҙарын күңел түрендәге уй-кисерештәренә ауаздаш итә алғандарҙы еңеүсе тип билдәләне. Беренсе урын һәм төп приз - автомобиль алыуға сертификат Башҡортостандың атҡаҙанған артисы һәм телетапшырыуҙар алып барыусы Земфира Байбулдинаға тапшырылды. Икенсе урынға М. Ғафури исемендәге БАДТ актеры Морат Рафиҡов лайыҡ булды һәм уға "Урал" хәйриә фондынан аҡсалата бүләк бирелде. Өсөнсө урынды "Нур" Өфө дәүләт татар театры актрисаһы Гөлназ Мөхәмәҙиева яуланы. Гөлли һәм Арыҫлан Мөбәрәковтар иҫтәлегенә арналған махсус призды Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе актрисаһы Зөлфиә Хәлилова алды, ә "Йыл авторы" номинацияһында Морат Рафиҡов һөйләп ишеттергән "Буран" поэмаһы өсөн шағир Мөнир Иҡсанов еңеүсе тип табылды. "Тамашасы һөйөүе" номинацияһына Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фәрүәз Урманшин лайыҡ булды.

- Был ярыш Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыу йылында үтеүе менән үҙенсәлекле. Мостай ағай менән 2005 йылдағы һуңғы осрашыу һаман да күҙ алдында, әйткән һүҙҙәре һаман да күңелемдә. Ярты сәғәт тирәһендәй уның менән республика Президенты Хәкимиәтенең ҡабул итеү бүлмәһендә һөйләшеп ултырҙыҡ, ул саҡта шағирҙы Хәкимиәт етәксеһе Радий Фәрит улы Хәбиров үҙе ҡаршы алды һәм, һеҙҙе оҙаҡ көттөрҙөм, тип ғәфү үтенде. Ә Мостай ағай: "Юҡ, мин бер ҡайҙа ла ашыҡмайым, мине тиҙҙән мәңгелек көтә. Ә һеҙ, йәштәр, ашығығыҙ", - тип яуап ҡайтарҙы. Бына ошо ыҡсым һүҙҙәргә тәрән мәғәнә һалынған. Мин дә, Мостай ағайҙың һүҙҙәрен иҫкә алып, шуны әйтәм: туған башҡорт телебеҙҙе яҡлауға, һаҡлауға, үҫтереүгә йүнәлтелгән бөтә ниәттәребеҙҙе тормошҡа ашырырға ашығайыҡ. Бөтә булған мөмкинлектәрҙе файҙаланырға өлгөрәйек, - тине еңеүселәрҙе тәбрикләгәндә БР Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Илшат Тажетдинов.

Әйткәндәй, бәйгеселәр бүләкләнеп бөткәндән һуң, кисә аҙағында, тамашаның авторы, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Наилә Сәфәрғолова шатлыҡлы бер ваҡиға тураһында хәбәр итте: республикала "Архтамға" эксперт-проект бюроһы проекты менән Рәми Ғарипов исемендәге Шиғриәт үҙәге төҙөләсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙ ҙә юҡ, башҡорт теленең тылсымын, мәртәбәһен, шиғриәттең илаһилығын тойҙорған "Йөрәк һүҙе" бәйгеһе республика сәхнәләрендә барған иң күркәм тамашаларҙың береһе. Әммә... Тамашасы элекке йылдарҙағы тәүге ике "Йөрәк һүҙе" сараһының тетрәндергес дауамын көсәп килһә лә, был юлы уның өмөттәре бик үк аҡланманы, тигәнде лә әйтеп ҡуйыу кәрәктер. Шиғриәтте шағирҙар тыуҙыра, шиғриәт шағирҙарҙың йөрәк һүҙе. Ә артистар иһә уларҙы башҡарыусылар ғына (башҡара белһә әле). Шуға ла халыҡ был проектты сәсәндәр майҙанын яңыртыу, йәғни шағирҙарҙың бәйге тотоуы һымағыраҡ ҡабул иткәйне. Һәм был дөрөҫ булыр ине. Башҡорт әҙәбиәтендә, шөкөр, башҡорт һүҙен, аҡылын, фәлсәфәһен әйтеп бирер шағирҙар бар, тик уларға майҙандар, трибуналар кәрәк. "Йөрәк һүҙе" ошондай майҙан, трибуна булырға тейеш ине һымаҡ. Башҡалар ни уйлай икән ошо турала?**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Октябрь һәм ноябрь айҙарында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Өфө районы** Шамонин ауылынан Рәйфә Вәлиева, Фәриҙә Ҡаҙаҡбаева, Яңылбикә Хәйбуллина, Сания Исламетдинова, Нуғай ауылынан Нәфис Аҡколов, **Күгәрсен районы** Яҡшымбәт ауылынан Альмира Аллағыуатова, **Архангел районы** Абҙан ауылынан Тәслимә Рәхимова, Архангел ауылынан Рәғиҙә Ғиззәтуллина, **Әбйәлил районы** Әлмөхәмәт ауылынан 65 йәшлек юбилейын билдәләүсе Фирүзә Килдейәрова, **Ейәнсура районы** Яңы Павловка ауылынан Азамат Әлмөхәмәтов, Айнур Әлмөхәмәтов, **Өфө ҡалаһынан** Шәүрә Әбүбәкирова, Марс Кәримов һәм башҡаларҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Йән-тәнегеҙ ауырыу-һыҙлау белмәй, бәхетле оҙон ғүмер юлы үтергә насип итһен, эштәрегеҙҙә уңыштар һәм янығыҙҙа арҡа терәр яҡындарығыҙ булыуын теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*ЯҢЫ КИТАП СЫҠТЫ*

# БАЛАЛАР УҠЫҺЫН ИНЕ ЛӘ...

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә өс томлыҡ "Балалар әҙәбиәте антологияһы"ның исем туйы уҙҙы. 200-ҙән ашыу Башҡортостан яҙыусыһының әҫәрҙәре тупланған йыйынтыҡ башҡорт һәм рус телдәрендә донъя күргән. Төҙөүсеһе - яҙыусы Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.**

"Балаларҙы китапһыҙ тәрбиәләп булмай. Рәсәйҙә китап сығарыу сәскә атһа ла, балалар әҙәбиәте бер аҙ ситтәрәк ҡала. Шуға күрә мин республиканың ике дәүләт - башҡорт һәм рус телдәрендә Балалар әҙәбиәте антологияһын төҙөү эшенә тотондом. Балалар әҙәбиәте антологияһын баҫтырып сығарыуҙа ярҙам күрһәткән өсөн "Китап" нәшриәтенә ныҡ рәхмәтлемен. Уның аша беҙҙең кескәй уҡыусыларыбыҙ Башҡортостандың төрлө милләт яҙыусыларының ижады менән таныша ала", - ти Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.

"Китап" нәшриәтенең баш мөхәррире Зөлфиә Ҡарабаева Стәрлетамаҡта, Дүртөйлөлә, Мәскәүҙә "Ҡыҙыл майҙан" фестивалендә ошо йыйынтыҡтың исем туйҙарының уңыш менән үтеүен билдәләне. Балалар әҙәбиәте антологияһы төрлө конкурстарҙың дипломдарына лайыҡ булған, шулай уҡ "2018 йылдың иң яҡшы китаптары" конкурсы йомғаҡтары буйынса "Иң яҡшы 50 төбәк баҫмаһы" исемлегенә ингән.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТЕЛ - ҠЫЛЫС:

## тейешһеҙ ерҙә тый, тейешле ерҙә ҡый

Туғандарың - ҡулың менән аяғың, дуҫтарың - таяныр таяғың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ахмаҡҡа уның ахмаҡ икәнен хатта аҡыллы ла иҫбат итә алмаясаҡ.

**(Л. Гаврилов).**

Ни тиклем күберәк үҙгәргән һайын, шул тиклем күберәк бөтәһе лә иҫкесә ҡала.

**(Француз мәҡәле).**

Белем аҡылды алыштыра алмай.

**(Пифагор).**

Әгәр ҙә кемдер белем тауының иң юғарғы баҫҡысында торам, тип иҫәпләй икән, тимәк, ул әле белем тауының иң аҫҡы баҫҡысында ғына.

**(Солонон Рысинский).**

Аҡылһыҙҙар менән идара итеүгә ҙур аҡыл, наҙандар менән идара итеүгә ҙур белем кәрәкмәй.

**(Эстебан де Эсмир).**

Әйтелгән һүҙ өсөн үкенергә тура килде, әйтелмәгәне өсөн - юҡ.

**(Ксенократ).**

Туй балдағы - сылбырҙың тәүге өлөшө.

**(Жарко Петан).**

Бөйөк кешеләр үҙ алдына маҡсат ҡуйып, ҡалғандар үҙ теләгенә эйәреп йәшәй.

**(У. Ирвинг).**

Кешенең тыуыуы һәм үлеүе, аҡсаһынан йәки башҡа мөлкәтенән яҙыуы ҡыҙғаныс түгел, сөнки быларҙың береһе лә уның үҙенеке түгел. Уның үҙенең байлығынан - кешелек дәрәжәһенән яҙыуы ҡыҙғаныс.

**(Эпиктет).**

Рухи аҙыҡ менән йәшәгәндәр яҙмышҡа буйһоноп бармай.

**(Лев Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бөркөт ағас башында ял итеп ултыра ти. Уны күреп ҡалған бәләкәй ҡуян һорай ҡуйған:**

**- Мин дә һеҙҙең кеүек тик кенә ултырһам буламы?**

**- Әлбиттә, була, ниңә булмаһын ти, - булған бөркөт яуабы.**

**Ҡуян быны ишетеп, бер нәмә лә эшләмәҫкә ҡарар итеп, ағас төбөндә ял итергә ултырған. Ҡапыл төлкө килеп сығып, ҡуянды тотоп ашаған да ҡуйған. Бына шулай, бер нәмә лә эшләмәҫ өсөн бик юғарыла ултырырға кәрәк..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**

E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

**Баш мөхәррир** 253-25-44

**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24

**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 15 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.

Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707

Заказ - 2277/11

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.